ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

22-28
июнь
(һөтай)

2019
№25 (859)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Башҡортлоҡ - тарихи феномен,**
башҡортлоҡ һәр беребеҙҙән башлана



2-3

**Бер-берегеҙгә...**
батыр тиегеҙ



6

**Милли кеүәтебеҙ күрһәткесе -**



йәмәғәт ойошмалары һәм халыҡтың берҙәмлеге ул

8-9

**Бәхәстән бәхет тыуамы?**



11

**ТВ-программа** 14


*"...Далала батырҙар көрәшә ине, улар ғәжәп көс һәм таҫыллыҡ күрһәтте. Ҡыйыуҙар бейек шыма бағана осондағы бүләкте алырға үрмәләне, үсмер малайҙар сәкән менән шар тәгәрәтә башланы. Тегендә лә, бында ла егеттәр менән ҡыҙҙар уҙҙәре яратҡан "Бүҙәнә"не бейеҙәр, йырлайҙар, күңел асалар. Былай итеп фәҡәт азат рухлы халыҡ - башҡорттарҙың улдары һәм ҡыҙҙары, күңелдәре көр булған йәштәр генә уйнай ала..."*

***Ф. НЕФЕДОВ.***

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

## БЕҘ БУЛҒАНБЫҘ, БАРБЫҘ, БУЛАСАҠБЫҘ!

*Далаларҙан, тауҙан, урмандарҙан*
*Шәрбәт йыйып ҡайтты бал ҡорттарым.*
*Бал ҡорттары һымаҡ, йыйылдылар*
*Баш йортома бөгөн башҡорттарым.*

*Оҙаҡ йылдар, оҙон юлдар буйлап,*
*Ашҡынышып килдек, һағынышып.*
*Ҡоштар ҙа бит табышҡанда шулай*
*Ҡыуаналар, ҡанат ҡағынышып.*

*Хәсрәт түгел, хәстәр йыйҙы беҙҙе:*
*Туғанлыҡты кәрәк яңыртыуҙар,*
*Һүрелмәһен өмөт, һүнмәһен дәрт,*
*Һүнеп ҡалғанда ла янар тауҙар.*

*Йөҙәтмәһен әжәл юраусылар,*
*Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ,*
*Үҙебеҙҙең йырыбыҙҙы йырлап,*
*Тарих арбаһында барасаҡбыҙ.*

*Әммә һис ҡасан да бирелмәбеҙ*
*Күкрәк һуға торған мин-минлеккә,*
*Табынырбыҙ башҡорт илендәге*
*Татыулыҡтар менән именлеккә.*

**Мостай КӘРИМ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**




*"Дөм ҡараңғы төн. Ҡайҙандыр тауҙар яғынан ҡурай моңо ағыла. Көтөү көткән тау башҡорттары, төндә усаҡ янына йыйылышып, ҡурай тарта. Уларҙың "Сәлимәкәй" тигән тәрән хисле көйөн йәтерһең йылғалар, тауҙар, урмандар, Ер үҙе йырлай... Тау үҙәндәре буйлап әллә нисәмә саҡрымдарға тиклем таралған ҡурай моңо төнгө тынлыкта тағы ла йомшағыраҡ, наҙлыраҡ яңғырай. Ә мин ниндәйҙер илһамлыҡ сағылған был матур көйҙө йотлоғоп тыңлайым да тыңлайым..."*

***Л. ЛЕБЕДИНСКИЙ.***

*"Башҡорттарҙың ҡунаҡсыллығын, бигерәк тә ситтән килгәндәргә ихтирамдарын беренсе урынға ҡуйырға кәрәк. Башҡорттоң ҡунағы - изге йән, уның өсөн ул иң һуңғы һарығын йәки тайын булһа ла һуйып ашата. Ҡунаҡ ҙур дәрәжәле булһа ла, башҡорт, ялағайланып, түбәнселеккә төшмәй, уға ярамһаҡланмай, үҙ абруйын һаҡлап ҡала белә".*

***Д. НИКОЛЬСКИЙ.***

*"Башҡорттар элек-электән йәштәрҙә һүҙ оҫталығы - сәсәнлек тәрбиәләүгә ҙур иғтибар биргән. Башҡорт кешеһе, үҙенең ырыуы менән нәҫеле тарихын ныҡлы белеүҙән тыш, риүәйәттәр, әләндәр, йырҙар, батырҙар тураһында ҡиссалар өйрәнергә һәм һөйләй белергә тейеш булған".*

***М. ЛОССИЕВСКИЙ.***

12+

ӘЙТӘГҮР!

# МАҠСАТЛЫ БУЛАЙЫҠ!

**V Ҡоролтайға бағлаған өмөттәрегеҙ, әйтер һүҙегеҙ ниндәй булыр?**

***Данир ҒӘЙНУЛЛИН, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе:*** V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы трибунаһына халҡыбыҙҙың киләсәге менән бәйле бик мөһим мәсьәләләр сығарыласаҡ, уларҙы хәл итеү буйынса асыҡтан-асыҡ фекер алышыу буласаҡ, яҡын киләсәктә иң әүәл башҡарырға тейешле эш-ғәмәлдәребеҙ барланасаҡ. Беҙ милләтебеҙҙең, республикабыҙҙың проблемаларын оло донъя кимәленә күтәреп, был проблемаларҙы дөйөм кешелек проблемаларының бер өлөшө итеп күрһәтергә тейешбеҙ. Шуға ла ҡоролтай йыйыны яңы форматта һәм эшлекле буласаҡ, тип күҙаллайбыҙ. Быға тиклем үткән ҡоролтайҙарға анализ эшләйәсәкбеҙ. Сөнки хаталарыбыҙҙы һәм йомшаҡ яҡтарыбыҙҙы аңларға тейешбеҙ. Күҙ буяу, ҡоро һүҙ һөйләү һымаҡ күренештәргә сик ҡуйыласаҡ. Һәм пландар ҙа ысынбарлыҡҡа тап килтереп төҙөләсәк. Был ҡоролтай ололарҙың йыйылып ултырып, әңгәмәләшеү урыны түгел, сөнки беҙ бөгөн әлеге мәлде лә, үткәнде лә тикшерергә түгел, ә киләсәкте ҡайғыртып, аныҡ эштәр башҡарырға йыйылабыҙ. Борон йыйындарҙа, ҡоролтайҙарҙа йөҙәр йыл алдағы быуындар мәнфәғәте ҡайғыртылған, һәм шуның арҡаһында беҙ дәүләтле милләт булып йәшәп киләбеҙ ҙә. Хәҙер беҙ ҙә, ниһайәт, шул аҡыл буйынса эшләргә өйрәнергә тейешбеҙ.

Үткән ҡоролтайҙарҙың да тормошҡа ашҡан эштәре аҙ булманы. Улар халҡыбыҙҙың үҫеш юлдарын билдәләү йәһәтенән ҙур эш башҡарҙы, милләт килә-сәге өсөн иң мөһим проблемаларҙы үҙ ваҡытында күтәреп сыҡты, уларҙы хәл итеү юлдарын билдәләргә тырышты. Әммә былдай мәсьәләләрҙе ул үҙе генә ғәмәлгә ашыра алмай, быны өсөн уның мөмкинлектәре сикләнгән. Дәүләт власы органдары, бигерәк тә закондар сығарыу һәм башҡарма власть менән килешеп эшләй алыу һөҙөмтәһендә милли мәнфәғәттәребеҙ менән бәйле байтаҡ ҡына проблемаларыбыҙ уңышлы хәл ителәсәгенә ышанабыҙ.

Заман бөгөн беҙҙән икеләтә, бишләтә уяуыраҡ һәм сапсаныраҡ булыуҙы талап итә. Республикабыҙҙың яңы етәксеһенең республиканы, халыҡты үҫтерергә теләгән күтәреп алырға, бергә булырға, ярҙам итергә кәрәк. Шундай әүҙем һәм рухлы, эшлекле һәм аҡыллы кешенең артынан бер уйһыҙ, ҙур ышаныс менән эйәрәм һәм быларҙың барыһын да үҙ милләтемә лә аңлатырға теләйем. Беҙ был ваҡытта бер уйҙа һәм бер һүҙҙә булып, алға ынтылырға бурыслы. Шундай һынылышлы мәлдә милләт мәнфәғәтен алға ҡуйыусы барса йәмәғәтселәр ҙә, дин әһелдәре лә, башҡа зыялыларыбыҙ ҙа, заман тулҡынын эләктереп алып, әүҙем хәрәкәт итеп ҡалырға тейеш. Торғонлоҡто аҙ кисермәнек, әле башланып ҡына торған үҫеш осорон тулыһынса файҙаланып ҡалайыҡ, туғандар, тием.

Был ҡоролтайҙа йәштәргә юл бирелде. Улар делегаттарҙың 30 процентын тәшкил итәсәк. 1917 йылда милләтебеҙ яҙмышын хәл иткән ҡоролтайҙарҙа ла төп көстәр шул уҡ йәштәр булған бит. Вәлидигә - 27, Халиковҡа - 23, Бикбовҡа - 28, Бабичҡа - 22... Бөгөнгө Ҡоролтайға килгән йәштәр ҙә яҡшы мәғәнәләге "революционер" булырға, йәмғиәтте үҫтерергә ынтылып торорға тейештәр, тибеҙ һәм шуға өмөтләнәбеҙ.

УЙЛЫҒА - УЙ

**Ҡасандыр барлыҡҡа килеп, башҡа халыҡтар араһында танылыу тапҡан, үҙҙәренең булмышы һәм йәшәйеше хаҡында аҙмы-күпме мәғлүмәт ҡалдырған, бәғзеләре быуаттар төпкөлөндә юғалып, онотолоп бөткән һәм хәҙерге заманда ла тарих аренаһында йәшәп ятҡан меңәрләгән ҡәүемдәр бар. Һуңғылары иҫәбендә беҙҙең өсөн ғәзиздәрҙән ғәзиз халҡыбыҙ - башҡорттар ҙа бар. Нәҫелдән нәҫелгә, быуындан быуынға атай-әсәй йорто, мәктәп тәрбиәһе, йәмғиәт йөҡонтоһо, мәғрифәт вә мәҙәниәт аша һеңдерелгән милли тойғоларыбыҙ бар, бөтөнөбөҙҙө бергә беректергән милли үҙаңыбыҙ бар. Башҡортлоҡ, тибеҙ ошо рухи төшөнсәне. Башҡортлоҡтоң үҙ тарихы, бөгөнгөһө бар, һәм уны киләсәк быуындарға халҡыбыҙҙың аҫыл мираҫы итеп тапшыра алһаҡ, милли киләсәгебеҙ ҙә дауамлы буласаҡ.**

# БАШҠОРТЛОҠ - ТАРИХИ ФЕНОМЕН,

## башҡортлоҡ һәр беребеҙҙән башлана

Башҡортлоҡ башында тарихи ысынбарлыҡ ята. Кәмәлек буйы башҡорттары менән аралашҡан Лев Толстой ата-бабаларыбыҙҙың боронғолоғон үҙенең даһиҙарға ғына хас зиһене аша тойомлап, башҡорттарҙан Геродот (б.э. тиклем V быуатта йәшәгән грек тарихсыһы) "еҫе" аңҡыуы тураһында тикҡә генә яҙып ҡуймағандыр. Ошо "тарих атаһы" көнсығыш тарафтарындағы бейек тауҙар янында "будин" һәм "аргиппей" исемле ҡәүемдәр йәшәүе, скифтарса кейенеүҙәре, бейә һөтөн эсеүҙәре, шунан иппак тигән сыр яһауҙары, эсендә төшө булған емештән сепрәк аша һығып, асхи тип аталған һут алыуҙары хаҡында яҙа. Ҡымыҙ, ҡорот, әсетелгән емеш (сейә) һуты (әсе һыу) - боронғо аш-һыуҙарыбыҙҙан булһа, грекса яҙып алынған "будин" һүҙендә "буҙ" тамырын тоҫмаллап була: аҡ йөҙлө башҡорттарҙы тап шулай атауҙары бик мөмкин. Аҡбуҙ атыбыҙ, буҙа эсемлегебеҙ, Буҙыҡай, Буҙанһәр, Буҙъегет ише исемдәребеҙ ҙә боронғо замандарҙан ҡалғандыр. Ә аргиппей һүҙенең "арғы өпәй"гә тап килеүе лә бар бит.

Беҙҙең эраның II быуатында грек географы Птолемей мәғлүмәттәрендә пасиртай тип аталған ҡәүем барлығы теркәлгән, уларҙың, Ә.-З. Вәлиди билдәләүенсә, башҡорт булыуына һис бер шик юҡ. Тимәк, башҡортлоҡтоң тарих аренаһына сығыуына ла иң кәмендә 2 мең йыл була. Ошо архаик замандарҙа башҡорт тип танылған ҡәүем исеме менән бәйле географик атамалар Дон йылғаһынан Памир тауҙарына, Төркөстандың көньяҡ-көнсығышынан хәҙерге Урал тауҙарына тиклемге киң ареалда билдәле була. Башҡорттарҙың Евразия тарихында киң билдәле һун ҡәбиләләренең бер тармағы булыуы ихтималлығы ла тарихсылар тарафынан инҡар ителмәй. Нисек кенә булмаһын, IX - X быуаттарҙа һәм унан һуң теркәлгән яҙма сығанаҡтарҙа башҡорттар төрки ҡәүемдәренең береһе итеп һүрәтләнә.

Урта быуаттарҙа ғәрәптәр "башғард" тип исемләгән халҡыбыҙҙың "башғар - башар", йәғни баш арый ҡәүеменән булып, Урал ерлегендә тәү тормош эпоһаһынан бирле йәшәп килеүе хаҡында фараз-фекерҙәремдә элегерәк яҙып үткәйнем инде. Антропология белгестәре билдәләүенсә, милләттәштәребеҙ араһында 4 антропологик тип осрай, улар көньяҡ себер, аҡ европеоид, понтик һәм субурал биогенетик расалары тип исемләнә. Тимәк, күп быуаттар дауамында халҡыбыҙ үҙенең эске структураһына төрлө сығышлы ырыуҡәбилә вәкилдәрен туплай алған, әммә уның этник нигеҙе, "ойотҡоһо" `тап башҡорт исеме аҫтында Уралда барлыҡҡа килгән.

Ошо тарихи ерлектә һәммәбеҙгә уйланырлыҡ, киләсәгебеҙҙе асығыраҡ күҙалларлыҡ аргументтар табып була. Бына ниндәй парадокс бар башҡортлоҡта: 40-тан ашыу боронғо үҙ аллы ырыу вәкилдәре була тороп (бөрйән, ҡыпсаҡ, юрматы, табын, әйле, ғәйнә, тамъян, ҡатай һ.б. - исемдәре генә ни тора!), барыһы ла тәбиғи үҙ атамаларын өҫкә сығармаған, ә башҡорт тип аталыусы берҙәм халыҡ булып ойоша, туплана алған. Был осраҡта беҙ башҡорт атамаһының дөйөм, бар ырыуға уртаҡ ил исеме булараҡ өҫкә сығыуын, тарихи ысынбарлыҡта тап шул рәүешле объективлашыуын күрәбеҙ. Тимәк, башҡорт бары этнос ҡына булған, милләт - нация буларак тик совет осоронда ғына формалаша башлаған, тигән фекер менән һис килешерлек түгел. Төрлө исемле башҡорт ырыуҙары - улар этник берләшмәләр, ә Башҡорт иле - Башҡортостан, айырым ырыуҙарҙы бергә туплап, ошо ил исемен үҙенеке итеп ҡабул иткән инсандарҙа милли берҙәйлек (идентичлыҡ) тойғоһон да тыуҙырған.

Рәсәй закондары буйынса Башҡортостан граждандығы юҡ, әммә үҙенде башҡорт итеп танытыу - һәр милләттәшебеҙҙең үҙ-үҙен ошо исемдәге ил вәкиле сифатында күрһәтә алыуылыр. Тимәк, башҡортлоҡтоң

> *"Беҙҙең менән был тауға менергә бер башҡорт та ризалашманы. Улар был тауға менер алдынан доға ҡылып, нәҙер әйтеп кенә менәләр икән. Былай ғына менеүҙе улар ҙур гонаһҡа һанай. Башҡорттарҙың тәбиғәткә шул тиклем яҡын тороуы, уны һаҡлауҙарына һоҡланырлыҡ".*
>
> ***И. ЛЕПЕХИН.***

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Эшсе-крәстиән Ҡыҙыл армияһының 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы (16-сы Гвардия кавалерия дивизияһы) командиры генерал-майор Миңлеғәле Минһаж улы Шаймуратовтың тыуыуына 120 йыл тулыуҙы байрам итеү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы.

✓Төбәк етәксеһе Радий Хәбиров "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" конкурсы сиктәрендә үткәрелгән "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара, "Рус теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы", "Татар теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы", "Йәш йыл уҡытыусыһы" республика конкурстары лауреаттарына - 25 педагогҡа Башҡортостан Башлығы премияларын биреү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы.

✓2019 йылдың 1 июленән Башҡортостанда Хөкүмәттең табиптарҙы дәртләндереү тураһында ҡарары үҙ көсөнә инә. Пациенттарҙа онкология сирҙәрен иртә стадияла асыҡлаған белгестәргә биш мең һумдан ашыураҡ премия түләнә. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ҡушыуынса, Башҡортостанда диспансер күҙәтеүе барышында йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иртә стадияла асыҡлаған участка табиптарын дәртләндереү программаһы ла әҙерләнә.

✓Башҡортостандан 196 мосолман хажға бара. Осоштар 26, 28, 29, 31 июлдә ҡуйылана. "Болғар-тур" рәсми хаж операторы юлламаһының уртаса хаҡы - 180 мең һум. Сәғүд Ғәрәбстанының Рәсәйгә быйылғы хаж өсөн бүлгән дөйөм квотаһы 20 мең 500 кеше тәшкил итә.

✓Быйыл 1365 дөйөм белем биреү ойошмаларынан 60 меңдән ашыу уҡыусы сығарылыш кисәләрендә ҡатнаша. Республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы кисә уҙғарыусыларға ике эвакуация юлы булған биналарҙы файҙаланырға, яуаплы кешеләргә залдарҙа дежурлыҡ итергә, тамашалар ваҡытында утты тулыһынса һүндермәҫкә, фейерверктар, хлопушкалар ҡулланыуҙы тыйырға кәңәш бирә.

✓Башҡортостандың барлыҡ муниципалитеттарында 63 мәктәпкә яңы уҡыу йылына хаҡы 2,1 млн һумлыҡ һанлы техника комплекты һатып алына. Өфө был һатып алыуҙарға индерелмәгән. Һәр мәктәпкә бер күп функциялы йәйланма (принтер, сканер, күсермә яһау аппараты), ике интерактив комплекс, ике иҫәплəү комплексы, уҡытыусылар өсөн ике ноутбук, класс өсөн 30 ноутбук, мәктәп етәкселеге өсөн алты ноутбук бирелә.

***✓ Башҡорт дәүләтселегенә бөгөн ни тиклем сикләнгән булыуына ҡарамаҫтан, Башҡортостандың республика статусын яҡлау һәм һаҡлауға йүнәлтелгән ғәмәлдәребеҙҙе башҡортлоҡтоң сағыу бер һыҙаты итеп ҡабул итеү фарыҙ.***



төп һыҙаты - милләт улы/ҡыҙы булыу, башҡорт тарихын төптән белеү һәм аңлау, уны ысын күңелеңдән ҡабул итеү. Үҙ халҡыңдың тарихын белеүҙе аҫаба башҡорттарҙың йәш быуындары өсөн уғата әһәмиәтле ҡанун икәнлеген тәрән аңлаған мәғрифәтсебеҙ Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың ошо хаҡтағы һүҙҙәрен бөгөн дә халыҡ васыятылай ҡабул итеү урынлылыр. Тарихын белмәгән, ҡабул итмәгән башҡорт манҡортҡа әйләнәсәк.

Рәсәй империяһы халыҡтарынан тик беҙҙең халҡыбыҙ ғына аҫабалыҡ хоҡуғына эйә булып, үҙ еренең хужаһы статусын күҙ ҡараһылай һаҡлап-яҡлап торған. Башҡорт аҫабалығы бик боронғо замандарҙан килгән ырыу хоҡуғы рәүешендә йәшәп килеп, Алтын Урҙа дәүерендә хандар тарафынан рәсми рәүештә танылған һәм ғәмәлдә булған ижтимағи күренеш. Ошо хоҡуҡи статус башҡортлоҡ феноменын нығытып, үҙ ерендә йәшәүсе башҡорт ҡәүемдәренә яңынан-яңы ырыуҙарҙың ҡушыла-өҫтәлә барыуын тәьмин иткән. Әлбиттә, "яңы башҡорттар" үҙҙәре килеп ҡушылғанға тиклем ғәмәлдә булған Башҡорт иле ҡанундарын, урындағы ғөрөф-ғәҙәттәрҙе лә мотлаҡ үтәргә тейеш булған. Был элекке башҡорттарға ла, яңыларына ла берҙәй ҡулай булып, Башҡорт илен көсәйтеүсе факторға әйләнә. Тарихи башҡорт аҫабалығынан башҡа башҡортлоҡ ижтимағи-сәйәси күренеш кимәленә күтәрелә алмаҫ ине.

> *"Беҙҙең бөтә дәүләтебеҙҙә тик башҡорттар ғына аҫаба хоҡуғында ер биләй. Уларға башҡа урында бушлай ер бирелмәйәсәк. Хатта урыҫ казактарының да үҙ ере юҡ, улар йәшәгән ер - ҡаҙнаныҡы. Казактар ул ерҙе һата һәм ҡуртымға бирә алмай, ә башҡорттарға быларҙың барыһы ла закон менән рөхсәт ителгән".*
>
> **А. БЕЗАК.**

Большевиктар власҡа килеү менән ҡабул ителгән "Ер тураһындағы декрет" традицион башҡорт аҫабалығын да юҡҡа сығара. Әммә бер төркөм алдынғы башҡорт зыялылары - Ә.-З. Вәлиди, Ш. Манатов, С. Мерәҫов, Х. Йомағолов, Ә. Бикбавов, М. Ҡулаев, М. Халиҡов, И. Мутин, Ш. Бабич һ.б, 1917 йылда уҙғарылған Бөтөн башҡорт ҡоролтайҙары ҡарарҙарына таянып, милли-территориаль Башҡортостан автономияһы өсөн көрәш йәйелдереп ебәрә. Оҙайлы, ҡан ҡойошло бәрелештәр Үҙәк Совет Хөкүмәтен Башҡорт милли автономияһын танырға һәм Башҡорт хөкүмәте менән килешеү төҙөргә мәжбүр итә. Шулай итеп, аҫабалыҡ хоҡуғын юғалтҡан башҡорттар бының өсөн сәйәси компенсация ала - сикләнгән булһа ла, дәүләтселек хоҡуғына, Рәсәй составында үҙ халҡының исемен йөрөткән Башҡорт автономиялы республикаһын булдырыуға өлгәшә. Тимәк, башҡорт халҡының үҙ республикаһы булыуы - башҡортлоҡ традицияһын бөгөн дә ғәмәлдә ҡалдырыу мөмкинлеген тәьмин итеүсе сәйәси шарт. Башҡорт дәүләтселеге бөгөн ни тиклем сикләнгән булыуына ҡарамаҫтан, федерализмды нығытыуға, Башҡортостандың республика статусын яҡлау һәм һаҡлауға йүнәлтелгән ғәмәлдәребеҙҙе башҡортлоҡтоң сағыу бер һыҙаты итеп ҡабул итеү фарыҙ.

Башҡорттар боронғо замаларҙан бирле үҙҙәрен иҫ китмәле батыр халыҡ итеп таныта алған. "Төрөк риүәйәттәренең иң боронғоһо булған "Уғыҙ дастаны"нда башҡорттар Иҙел буйында һәм уға яҡын болғарҙар менән сиктәш бер таулы өлкәлә йәшәгән ҡеүәтле һәм хәйләкәр (көслө һәм ғәйәр) халыҡ тип танылған һәм үҙенең ғорурлығы, ҡыйыулығы арҡаһында һис бер йыһангирға баш эймәгән ҡәүем сифатында иҫкә алынған", - тип яҙа Ә.-З. Вәлиди ошо хаҡта. Х быуат башында Булғарға йүнәлгән ғәрәп хәлифе илселеге сәркәтибе ибн Фаҙлан билдәләүенсә, башҡорт ерҙәренә етмәҫтән күпкә алда уҡ уларҙы "Башҡорттарҙан ҡурҡығыҙ!" тип, киҫәтеп ҡуялар. Тимәк, башҡорт еренә рөхсәтһеҙ үтеп инеү ул заманда бик хәүефле һаналған. Замандашыбыҙ, билдәле яҙыусы Ғ. Хисамов та башҡортлоҡтоң яугирлыҡ, ғәскәрилек менән бәйле бар булыуын тарихи ысынбарлыҡ сағылышы, тип иҫәпләй. Башҡорттарҙың ғәрәп мәмлүктәре сифатында ошо илдә иң юғары хәрби вазифалар биләп, ваҡытында ил менән идара итеүсе ҡатлам кимәленә күтәрелә алыуы, Ҡара диңгеҙ буйында айырым башҡорт ханлығы булып, ил башы Башҡорт хандың Киевтың бөйөк кенәздәренә үҙ ғәскәре менән ярҙам итеп тороуы, Венгрия короле армияһында башҡорт яугирҙарының иң батырҙарҙан булыуы хаҡында тарихи мәғлүмәттәр беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән. Рәсәй империяһындағы айырым башҡорт ғәскәре, 1918 - 1920 йылдарҙа Граждандар һуғышында ҡатнашыусы башҡорт полктары, ниһайәт, башҡорт батыры генерал Шайморатовтың данлы 112-се Башҡорт атлы дивизияһы - былар барыһы ла башҡортлоҡтоң иң юғары әхлаҡи өлгөләре ул.

Хәҙер яугирлыҡ замананы түгел, әммә яугирҙарға хас ҡыйыулыҡ, рухи ныҡлыҡ, тыныс йәшәгәндә лә кәрәкле булыр саялыҡ кеүек сифаттарҙан азат булмаһаҡ ине. Юғиһә, үҙебеҙҙең шәхси тормошобоҙҙа ла,

> *"Башҡорт халыҡ йырҙарының күбеһе моңло һәм һағышлы; башҡорттарҙа композиторҙар көнләшерлек көйҙәр бик күп".*
>
> **Р. ИГНАТЬЕВ.**

милли мәнфәғәттәребеҙҙе ҡайғыртҡан мәлдәрҙә лә үтә йомшаҡлыҡ, быуынһыҙлыҡ күрһәтеп, ситтәрәк, боҫоборaҡ ҡалырға теләүсе милләттәштәребеҙ саманан тыш артып бара...

Туған телеңдә аралашыу, уны аңлау, әҙәби телебеҙҙә уҡый-яҙа белеү - был милләтте милләт иткән төп сифаттарҙың береһе. Тап шуның өсөн бала аңына башҡорт телен бишектә саҡта уҡ һеңдерә алыу, уны мәктәптәрҙә уҡытыуҙы сикләмәү, башҡорт матбуғатын, китаптарын баҫыу һәм таратыу кеүек эштәребеҙ милләтебеҙ өсөн һәр саҡта ла өҫтөнлөклө бурыс булып ҡаласаҡ. Шул уҡ ваҡытта, әле киҫелгән осорҙа, билдәле бер сәбәптәр һөҙөмтәһендә туған телендә аралашыу мөмкинлеген юғалтҡан, йәиһә башҡортса уҡый-яҙа белмәүсе башҡорттар барлығын да иҫәпкә алырға кәрәктер. Беҙ уларҙы башҡорт булыуҙан яҙғандар икән былар тип, бер нисек тә ситкә тибә алмайбыҙ бит. 2010 йылда уҙғарылған халыҡ иҫәбен алыу материалдарына ярашлы, был нисек үкенесле булмаһын, башҡорттарҙың 71 проценты ғына башҡорт телен туған теле итеп күрһәткән. Ҡалғандарын башҡортлоғонан яҙған икән, тип ҡарау һис тә дөрөҫ булмаҫ ине: бында телебеҙҙең төньяҡ-көнсығыш диалектында һөйләшеүсе, ҡала мөхитендә үҫеп, бары тик рус телле булып китеүсе башҡорттар тураһында һүҙ бара. Ҡайһы бер зыялыларыбыҙҙың төньяҡ-көнбайыш башҡорттары телен икенсе әҙәби тел сифатына күсереү идеяһын бер нисек тә хуплап булмай: был хәҙерге ысынбарлыҡта тормошҡа аша торған хәл түгел, уның файҙаһынан зыяны күберәк булыр ине. Бына беҙ, башҡорт әҙәби телендә һөйләшеүселәр, татар әҙәби телендә әйтелгән һәм яҙылғанды энәһенән ебенә тиклем аңлайбыҙ бит, бер ниндәй проблема юҡ! Ғөмүмән, хатта икенсе бер сит телде өйрәнә алыу кеше мейеһе өсөн хәл итмәҫлек мәсьәлә түгел, тик теләк кенә булһын. Был кеше психологияһы ҡануны, туған әсә телен дә, башҡа бер телде лә кеше, ниндәй йәштә булыуына ҡарамаҫтан, бик һәйбәт кимәлдә үҙләштерә ала. Икенсе яҡтан, күп теллелек кешенең аң-белем ҡеүәтен бермә-бер арттыра, мәҙәнилеген тағы ла юғарыраҡ кимәлгә күтәрә, уның яҙмышында яңы ижтимағи мөмкинлектәр аса. Тап шуның өсөн башҡортлоҡтоң киләсәктәге өр-яңы сифаты - туған телле башҡорттоң күп телле, күп мөмкинлекле, тимәк, конкурентлы шәхес була алыуылыр.

Ошо яҙмамда башҡортлоҡтоң башҡа бер күркәм сифаттары - милли моңдарыбыҙҙы үҙ итеү, сәнғәтебеҙҙе һанлау, милли кейемдәребеҙҙе тергеҙеү, башҡорт аш-һыуын ҡәҙерләү һәм халыҡ-ара кимәлгә сығарыу, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙгә тоғро ҡалыу кеүек мәҙәни-гуманитар өлкәгә ҡағылғандары хаҡында тәфсир ҡылманым. Тик шуныһы үтә мөһимдер: башҡортлоҡ һәр беребеҙҙең үҙенән башлана, ул күңелдәребеҙҙе биләһә, йөрәктәребеҙгә дәрт-дарман өҫтәп торһа, башҡорт исемле ғәзиз милләтебеҙгә һис бер хәүеф янамаҫ.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Вьетнам Күмертау авиация заводы етештергән "Ка" маркалы вертолеттарға ҡыҙыҡһыныу белдерҙе. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров һәм Вьетнам Социалистик Республикаһының йәмәғәт хәүефһеҙлеге министры То Лам осрашыуҙа ошо мәсьәләне тикшерҙе. Махсус конструкциялы вертолеттарҙың донъяның 30 илендә файҙаланылыуы билдәләнде.

✓ Уҙған йылдың ғинуар-май айҙары менән сағыштырғанда, республикала торлаҡ төҙөлөш күләме 31,9 процентҡа артҡан. Төбәктә торлаҡ төҙөлөше структураһында халыҡтың үҙ иҫәбенә һәм кредит аҡсаһына һалған торлаҡ өлөшө 67,1 процент тәшкил иткән. Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында республика сафҡа индерелгән торлаҡ майҙаны буйынса - икенсе, йән башына торлаҡты файҙаланыуға тапшырыу йәһәтенән өсөнсө урында, тип йомғаҡ яһаны статистиктар.

✓ Башҡортостанға "Һаулыҡ һаҡлау" милли проектын тормошҡа ашырыу өсөн 16 миллиард һум бүленә. "Маҡсат бер - 2024 йылға ғүмер оҙайлығы 78 йәшкә етергә тейеш. Проект һигеҙ өлөшкә бүленгән: ҡан әйләнеше сирҙәренән, яман шештән үлем осраҡтарын кәметеү һәм башҡалар", - ти республиканың һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Максим Забелин.

✓ "Мәҙәниәт" милли проекты сиктәрендә Башҡортостандың бәләкәй ҡалаларында һәм район үҙәктәрендә йыл һайын ике кинозал асыу күҙаллана. Проект 500 меңгә тиклем кеше йәшәгән тораҡ пункттарҙа тормошҡа ашырыла. Был кинозалдарҙа Башҡортостанда йәшәүселәрҙең фильмдың премьераһын ҙур ҡалаларҙа күрһәтелгән көндә үк ҡарау мөмкинлеге була. Кино прокаты менән шөғөлләнергә теләгән эшҡыуарҙарға ла субсидия бирелә. Бөгөнгә Башҡортостан райондарында 20-нән ашыу заманса кинозал бар.

✓ Рәсәйҙә мотлаҡ медицина страховкалауының яңы ҡағиҙәләре үҙ көсөнә инә. Документҡа ярашлы, поликлиникалар сирҙәрҙе иҫкәртеү эшен көсәйтә. Алдағы ике йылда рәсәйҙәрҙең бөтәһенә лә диспансерлаштырыу һәм профилактик тикшереү үткәреү күҙаллана, һуңынан һәр кемдең һаулыҡ төркөмө билдәләнә. Бынан тыш, страховка компаниялары халыҡтың мөрәжәғәттәре һәм ялыуҙары менән эшләргә, шулай уҡ бәхәсле хәл килеп тыуған осраҡта, уларға ярҙам итергә бурыслы.

✓ *Урал батырға әлегә тиклем һәйкәл ҡуйылмаған, ул хыял булып ҡына ҡалырмы икән? Үҙлегебеҙҙе, ерлегебеҙҙе күрһәткән эпос-ҡобайырҙарыбыҙ архивтарҙа ятып тонсоғормо?*



*ӘЙТӘГҮР!*

# ҘУР КӨСКӘ ӘҮЕРЕЛӘЙЕК!

**I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы тураһындағы хәтирәләрегеҙ ниндәй?**

***Таңсулпан ҒАРИПОВА, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:*** Хәтерләүемсә, I Ҡоролтай рухи юғарылыҡта, кисерештәр тәрәнлегендә үтте. Сит илдәрҙән күпләп делегаттар килгәйне. Тәү башлап ауыҙ тултырып, иркенләп, "Мин - башҡорт!" тип әйттек ошо йыйында. Секцияларҙа һәр беребеҙ ҡоролтайға үҙ тәкдимдәребеҙҙе индерә алдыҡ. Мин һөнәри белем биреүсе училищеларға башҡорт әҙәбиәтен уҡытыуҙы индереүҙе һораным. Сөнки ул уҡыу йорттарына балалар 9-сы кластан һуң килә һәм урта мәктәп программаһында ҡаралған әҙәбиәтте өйрәнеүҙән мәхрүм ҡала ине. Бындай уҡыу йорттарында илһөйәрлек тәрбиәләү, үҙебеҙҙең тарихты өйрәтеү, йолаларҙы аңлатыу тап ошо дәрестә һалына. Быны күтәреп алдылар һәм киләһе уҡыу йылынан студенттарға әҙәбиәт дәрестәре инә башланы.

Ҡоролтай - ул мөһим сара. Уны байрамға, хәҙергесә әйткәндә, шоуға әйләндереп үткәрмәҫкә ине. Ҡоролтай йыйыуҙан файҙаланып, үҙебеҙҙе борсоған иң үткер мәсьәләләрҙе күтәреп, мөһим ҡарарҙар ҡабул итергә ине. Тел, әҙәбиәт, мәҙәниәт, һаулыҡ һаҡлау, экология көнүҙәк мәсьәләләр булырға тейеш. Әлегә тиклем Милли әҙәбиәт музейы бинаһы юҡ, ә әҙәбиәтһеҙ халыҡ, йәшәйештең башҡа тармаҡтары нисек кенә үҫешкән булмаһын, ул юҡ халыҡ. Глобализация шарттарында милләт булып һаҡланып ҡалабыҙ тиһәк, әҙәбиәт, мәҙәниәткә күп иғтибар бүлергә кәрәк. Урал батырға әлегә тиклем һәйкәл ҡуйылмаған, ул хыял булып ҡына ҡалырмы икән? Үҙлегебеҙҙе, ерлегебеҙҙе күрһәткән эпос-ҡобайырҙарыбыҙ архивтарҙа ятып тонсоғормо? Делегат булып кемдәр һайланғандыр, кемдәр нимә һөйләр, халыҡ, ил-йорт хәсрәтен донъяға ишетерлек итеп кем әйтер?

Хәтеремдә, шул тәүге Ҡоролтайҙан алған рухи күтәрелештә Учалыға ҡайтып төштөм. Ҡалала урта профессиональ сәнғәт уҡыу йорттары араһында республика фестивале үтергә тейеш. Бер аҙна эсендә Байыҡ Айҙар сәсәндең 1812 йылда башҡорттарҙы француздарға ҡаршы яуға оҙатыуын һәм ошо яуҙан ҡаршы алыуына нигеҙләнгән сценарий яҙып, 120 студентты сәхнәгә сығарып, Гран-при алдыҡ. Ҡоролтайҙа ҡатнашып, рухи күтәрелеш кисереп ҡайтмаһам, бәлки, быға көсөм дә етмәҫ ине. Ә унда мине халыҡ үҙе һайлап ебәргәйне, ошо төбәктә башҡарған эштәремә шулай юғары баһа биреп, ышаныстарын белдергәйнеләр.

V Ҡоролтай ҙа халыҡтың бөтөн проблемаларын хәл итә алған сара булһа, милләтебеҙҙең икенсе һулышы асылыр ине. Үҙебеҙҙең еребеҙгә хужа булып, телебеҙ, мәҙәниәтебеҙ, әҙәбиәтебеҙ мәсьәләләрен үҙебеҙ хәл итерлек ҙур көскә әүерелер инек. Ҡоролтайға уңыштар теләйем һәм халыҡ делегат итеп халыҡтың үҙенең күҙен асырлыҡ, иң әһәмиәтле проблемаларҙы күтәрерлек батыр йөрәкле, белемле улдарын һәм ҡыҙҙарын һайлағандыр, тип ышанам.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ХӘҮЕФҺЕҘЛЕК МӨҺИМ

**"Торатау" конгресс-холында хәүефһеҙлек мәсьәләләре өсөн яуап биргән юғары вәкилдәрҙең 10-сы халыҡ-ара осрашыуы булды. Форумды асыуҙа Рәсәйҙең хәүефһеҙлек советы секретаре Николай Патрушев, Рәсәй президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров, Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ҡатнашты.**

Николай Патрушев һүҙҙәренсә, халыҡ-ара осрашыу һәр ваҡыттағыса абруй менән файҙалана һәм бөгөн ул Европа, Америка, Африка, Фарсы ҡултығы, Яҡын Көнсығыш, Көньяҡ-көнсығыш һәм Төньяҡ-көнсығыш Азия һәм донъяның башҡа төбәктәренән 119 дәүләтте берләштерә. Һәр осрашыуҙың көн тәртибе ҡатнашыусы илдәрҙең теләктәрен иҫәпкә алып, шулай уҡ бынан алда уҙған конференцияларҙың йомғаҡтары буйынса төҙөлә. "Башҡортостан ерендәге конференцияла һөҙөмтәле аралашыуҙан тыш, ошо ҙур иҡтисади һәм экспорт ҡеүәтенә эйә һоҡланғыс төбәк менән танышыуҙан онотолмаҫ тәьҫораттар ҙа алырбыҙ тип ышанам", - тине Николай Патрушев һәм Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбировҡа форумды ойоштороуҙа ярҙам һәм ҡунаҡсыллыҡ өсөн рәхмәт белдерҙе. Осрашыуҙың тәүге көнөндә делегация вәкилдәре милли хәүефһеҙлекте тәьмин итеү һәм гибрид янауҙарының артыуы шарттарында дәүләттәрҙең тотороҡло социаль-иҡтисади үҫеше мәсьәләһен тикшерҙе. Икенсе көн ғәҙәттән тыш гуманитар ярҙам күрһәтеү өлкәһендә халыҡ-ара хеҙмәттәшлек һәм уны үҫтереү мөмкинлектәре тематикаһын ҡарау менән дауам итте.

# АУЫЛҒА БАР!



**Рәсәй Мәғариф министрлығы "Ауыл уҡытыусыһы" программаһында ҡатнашыусылар өсөн электрон ресурс һәм эш урындары реестрын әҙерләй. Был хаҡта министр Ольга Васильева Выборг ҡалаһында йәш уҡытыусылар форумында белдерҙе.**

"Һәр педагогтың программаның федераль йәки төбәк сайтына инеп, күсеп барырға уйлаған мәктәпте һайлау, уны ситтән тороп ҡарау, һайлап алыуҙы үтеү өсөн критерийҙар исемлеге менән танышыу һәм ғариза биреү мөмкинлеге бар", - тип министрҙың һүҙҙәрен еткерә ведомствоның матбуғат хеҙмәте. Уның һүҙҙәренсә, программала ҡатнашырға теләгән кандидаттарҙың йәше сикләнмәгән - ауылдарҙа йәштәргә лә, тәжрибәле уҡытыусыларға шат булырҙар. Кандидаттарҙың ғаризаларын Мәғариф министрлығы комиссияһы менән бергә махсус төбәк комиссияһы ҡарай. 2020 йылдан Рәсәй Федерацияһы Президенты йөкләмәһен үтәү барышында "Ауыл уҡытыусыһы" программаһын тормошҡа ашырыу башлана. Программа ауылға, эшселәр ҡасабаһына, ҡала тибындағы ҡасабаға, 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡалаға эшкә килгән (күсеп килгән) уҡытыусыға 1 миллион һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған компенсация түләүҙе күҙ уңында тота. Йәш уҡытыусыларҙың "Педагог: һөнәр, булмыш, сәнғәт" Бөтә Рәсәй форумы 20-22 майҙа Ленинград өлкәһенең Выборг ҡалаһында уҙҙы.

Әйткәндәй, Башҡортостанда ауыл ерендә эшләгән йәш уҡытыусыларға гранттар булдырылды. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров тейешле указға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, 2019 йылдың 1 июленән һәр береһе 600 мең һум күләмендәге 100 грант булдырыла. Указ менән гранттар биреү буйынса республика комиссияһы төҙөлгән, уның составы һәм гранттар тураһында положение раҫланған. Башҡортостан Хөкүмәтенә гранттар түләү тәртибен билдәләү бурысы йөкмәтелгән. Гранттарға дәғүә итеүселәр конкурсында ике йылдан ашыу ауыл ерендәге (халҡы 10 меңдән артмаған) белем биреү ойошмаларында эшләгән 35 йәшкәсә уҡытыусылар ҡатнашырға хоҡуҡлы. Уларҙы дөйөм белем биреү ойошмалары һәм мәғариф идаралыҡтары тәҡдим итә. Документтарҙы тапшырыу ваҡыты - йыл һайын 1 августа тиклем.

# ИНВЕСТОР - ИШЕМБАЙҘА



**Алдағы йылдарҙа инвестор Башҡортостандың Ишембай районында күмәкләп ял итеү зоналары ойоштороруға һәм спорт-мәҙәни әһәмиәттәге комплекс төҙөргә ниәтләй. "Инвестиция сәғәте" кәңәшмәһендә республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров менән ошо мәсьәлә тикшерелде.**

Беренсе этапта - Ишембай ҡалаһында Тәйрүк күле буйында парк, пляж зонаһы булдырыу, икенсеһендә - ҡаланың саңғы базаһы биләмәһендә тау саңғыһы трассаһы (846 метр) һәм биатлон трассаһы, өсөнсөһөндә Ишембай районының Маҡар ауылы эргәһендә "Патриот" хәрби-патриотик лагеры, "Күк-Ҡарауыҡ" туристик ауылы төҙөү күҙаллана. "Тәйрүк" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте проектҡа 1,3 миллиард һум йәлеп итергә уйлай. Яҡынса 10-15 йылдан хаҡы сығырға тейеш. Компания сит ил сәйәхәтселәре өсөн туристик юлламалар ойоштороруға вәғәҙәләй. Мәскәү партнерҙары менән һөйләшеүҙәр алып барыла. "Тәйрүк" компанияһы Ишембайҙа 2017 йылда теркәлгән, өс физик берәмек исемендә һәм микропредприятие булып тора. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров беренсе этаптың проектын хупланы.

# СИТ ТӨБӘКТӘРҘӘ - ҺАБАНТУЙ



**Рәсәй төбәктәрендә халыҡ байрамдары - һабантуйҙар бара. Быйыл улар Башҡортостандың ойошторолоуына 100 йыл тулыуға арналған. Республика рәсми делегацияларының халыҡ байрамдарында ҡатнашыуы дауам итә.**

29 июндә Ленинград өлкәһендә һабантуй була. Унда Башҡортостандың Ғафури һәм Стәрлебаш районлары вәкилдәре ҡатнаша. 29 июндә Һамар өлкәһендә Бөтә Рәсәй ауыл һабантуйы уҙғарыла, Башҡортостандан унда Нуриман районы һәм Учалы филармонияһы ҡатнаша. 6 июлдә Мәскәүҙә, Силәбе өлкәһенең Троицк ҡалаһында һәм Һамарҙа Хәйбулла, Кушнаренко, Күгәрсен районы, Октябрьский ҡалаһы вәкилдәре ҡатнашлығында байрамдар ойошторола. 20 июлдә Свердловск өлкәһе Сысерт районында һабантуй була. 27 июлдә Ырымбурҙа һабан байрамы үткәрелә. Һабантуйҙар башҡорт мәҙәниәтен һәм милли спорт төрҙәрен һаҡлау һәм үҫтереү, республиканан ситтә йәшәгән ватандаштарыбыҙға ярҙам итеү, төбәктәр араһында мәҙәни һәм иҡтисади бәйләнештәр булдырыу өсөн уҙғарыла. 8 июндә тәүгеләрҙән булып халыҡ байрамын Һарытау өлкәһендә йәшәүселәр үткәрҙе. 15-16 июндә Ҡурған өлкәһендә, Пермь крайында, Ханты-Манси автономиялы округында һәм Екатеринбург ҡалаһында һабантуйҙар уҙҙы. Рәсми делегациялар составында республиканың Миәкә, Ҡыйғы, Бүздәк, Салауат, Ишембай, Дүртөйлө районлары вәкилдәре ҡатнашты.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө хоккейы тәрбиәләнеүсеһе Владимир Сохатский "Салауат Юлаев" хоккей клубына кире ҡайтты. 29 йәшлек голкипер өс йыл Екатеринбургтың "Автомобилист" командаһында уйнағандан һуң бер миҙгелгә туған командаһы менән килешеү төҙөнө. Был турала "Салауат Юлаев"тың рәсми сайтында хәбәр ителә.

✓29 июндә Ишембай районындағы Торатау итәгендә район һабантуйы сиктәрендә "Сармат вариҫтары" этно-фольклор фестивале уҙғарыла. Байрамда 5 меңгә яҡын кешенең ҡатнашыуы көтөлә. Фестиваль ҡунаҡтарының милли уйындарҙа, уҡтан атыу буйынса оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнашыу, Эльбрус Ниғмәтуллиндың шоуын, һыбай йөрөү оҫталығы, атта сабып барған килеш уҡтан атыу буйынса турнирҙарҙы ҡарау мөмкинлеге бар. Ойоштороусылар балалар өсөн айырым конкурс-уйын программаһы әҙерләй.

✓Башҡортостанда "Мәғариф" милли проектының "Һәр баланың уңышы" федераль проекты сиктәрендә һәләтле балаларҙы асыҡлау һәм ярҙам күрһәтеү үҙәге асыла. Уны булдырыуға 300 миллион һумдан ашыу аҡса бүленә. "Сириус" белем биреү үҙәге моделе буйынса үҙәк республика инженер лицейында булдырыла. Тағы өс учреждениены мәғариф программалары өсөн майҙансыҡ сифатында файҙаланыу күҙаллана.

✓2019 йылдың ҡабул итеү кампанияһы башланыуға RAEX рейтинг агентлығы, илдең 158 вузынан 50 меңдән ашыу студенттың анкета һорауҙарына яуаптарын тикшергәс, Рәсәйҙең иң яҡшы 100 юғары уҡыу йорто рейтингын иғлан итте. Иң яҡшылар исемлегендә Башҡортостандың өс университеты бар: нефть университеты - 56-сы, медицина университеты - 65-се, авиация университеты 99-сы урында. Тәүге өсәү уҙған йылдан бирле үҙгәрмәй. Улар - Мәскәү дәүләт университеты, Мәскәү физика-техника институты, Милли тикшеренеү ядро университеты.

✓ Канаданың Торонто ҡалаһында йолаға әүерелгән Taste of Russia-2019 ("Рәсәй тәме") фестивале уҙҙы. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының яңы бүлексәһе - Канада башҡорттары ҡоролтайы унда тәүгә ҡатнашты. Һәр халыҡтың вәкилдәре үҙҙәренең художестволы үҙешмәкәрлек номеры менән сығыш яһаны. Башҡорттар Рим Хәсәновтың бөтәһенә лә билдәле "Өфө йүкәләре" йырын башҡарҙы.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЙӘЙГЕ ЭШТӘР ГӨРЛӘЙ

**Ниһайәт, шаулап-гөрләп байрамдар ҙа үтеп китте. Әммә байрам урынында, көндәлек тормоштағы мәшәҡәттәр хаҡында ла оноторға ярамай. Ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмә тап үткән сараларға байҡау яһауҙан башланып, йәйге мәшәҡәттәргә барып тоташты.**

Һәр миҙгелдәгесә, баш ҡалала ремонт эштәре әүҙем бара. Әле Өфөлә 2011 йылда башланған һәм төрлө исем менән дауам ителеп, бөгөн "Башҡорт ихаталары" тип аталған программа тормошҡа ашырыла. Был хаҡта Ҡала йәшәйешен тәьмин итеү идаралығы начальнигы Никита Дмитриев бәйән итте. Төҙөкләндереү эштәре асфальт һалыуҙы, балалар уйын майҙансыҡтары, турниктар ҡуйыуҙы, хоккей ҡумталары эшләүҙе, яҡтыртыу сығанаҡтарын тулыһынса ремонтлауҙы, видеокүҙәтеү системалары ҡороуҙы, сүп һауыттары, эскәмйәләр урынлаштырыуҙы, автомобилдәр өсөн ваҡытлыса парковка урындары ойоштороуҙы үҙ эсенә ала.

Оператив кәңәшмәнең көн тәртибендә ҡаралған тағы бер мөһим мәсьәлә - ҡаланың социаль-иҡтисади үсешендә Эшҡыуарҙар союзының роле булды. Уның эше менән Совет рәйесе Ольга Одинокова таныштырҙы. Мәғлүм булыуынса, әлеге ваҡытта эксперттар һәм эшҡыуарҙар үҙҙәре бизнеста ауырлыҡтар булыуын йәшермәй. Юғары һалымдар, халыҡтың һатып алыу һәләте кәмеүе, квалификациялы кадрҙарҙың етешмәүе, ҡатмарлы ҡануниәт, административ ҡаршылыҡтар, кесе һәм урта эшҡыуарлыҡтың дәүләт заказдарын алыу мөмкинлеге булмауы, сеймал, финанс ауырлыҡтары йәштәрҙең эшҡыуар булыу теләген һүрелдерә. Шуға ҡарамаҫтан, Өфө ҡалаһы эшҡыуарҙары союзы урындағы үҙидаралыҡ органдары, БР, РФ ҡабул иткән норматив-хоҡуҡи акттарға экспертиза үткәреүҙә ҡатнашып, ошо мохитте яҡшыртырға, бизнестың, эшҡыуарҙарҙың шәхси үсешенә ярҙам итергә тырыша. Был йәһәттән улар үҙ көстәре һәм ситтән эксперттар саҡырып оҫталыҡ дәрестәре, тренингтар, семинарҙар, конференциялар, түңәрәк ҡорҙар ойоштора, эшҡыуарлыҡҡа инвалидтарҙы йәлеп итеү буйынса ла эш алып бара, балаларҙа ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу маҡсатында махсус марафон үткәрергә планлаштыра һәм башҡа бик күп эштәр башҡара. Әлбиттә, һәр кем эшҡыуар булып тыумай, бының өсөн теләк, ныҡышмаллыҡ һәм үҙ өҫтөңдә көн һайын эшләргә, эшҡыуарҙар үҙҙәре әйтмешләй, "уңайлылыҡ зонаһы"нан сығырға кәрәк. Хәйер, был эшҡыуарҙарға ғына ҡағылмайҙыр, моғайын.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# ФЕКЕР БЕЛДЕР

**Өфөлә йәшәүселәрҙе Башҡортостандың баш ҡалаһына "Хеҙмәт батырлығы һәм даны ҡалаһы" тигән халыҡ-ара маҡтаулы исем биреү буйынса йәмәғәт фекер алышыуында ҡатнашырға саҡыралар.**

Был исем хеҙмәт батырлыҡтары һәм ҡаҙаныштары менән фашизмды еңеүгә ҙур өлөш индергән ҡалаларға бирелә. Әлеге көндә Рәсәйҙең 24 ҡалаһы "Хеҙмәт батырлығы һәм даны ҡалаһы" исемен йөрөтә. Өфө улар иҫәбендә булырға лайыҡлы, тип иҫәпләй белгестәр. Башҡортостандың баш ҡалаһы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында илдең тәрәк үҙәктәренең береһенә әүерелгән. Ҡала 40-тан ашыу предприятиены, дәүләт, белем биреү, ғилми, мәҙәни учреждениеларҙы ҡабул итеп урынлаштырған, шулай уҡ илдең үҙәк, көнбайыш һәм көньяҡ райондарынан эвакуацияланған 104 мең кешене үҙенә һыйындырған. Рыбинск ҡалаһының авиация заводы (хәҙер Өфө моторҙар эшләү берекмәһе) иң мөһим предприятиеларҙың береһе булған. Һәр өсөнсө хәрби совет самолеты Өфөлә сығарылған двигатель менән йыһазландырылған. Өфө нефть эшкәртеү заводы фронтҡа бер миллион тоннанан ашыу яғыулыҡ һәм башҡа кәрәкле продукция оҙатҡан. Ҡалала 7 хәрби берләшмә һәм часть, атап әйткәндә, биш дивизия ойошторолған, улар араһында легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы бар. Өфөлә һәм Башҡортостанда йәшәүселәрҙе баш ҡалаға "Хеҙмәт батырлығы һәм даны ҡалаһы" исемен биреүгә үҙ фекерҙәрен белдерергә саҡыралар. Тәҡдимдәрҙе Өфө ҡалаһы, 450098, Октябрь проспекты, 120 адресы буйынса йәки *op@ufacity.info* электрон почтаһына ебәрергә мөмкин. Тәҡдимдәр һәм иҫкәрмәләр 1 августҡа тиклем ҡабул ителә.

# ӘЙҘӘГЕҘ, КОНКУРСҠА!

**Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы "Башҡортостан лидерҙары" кадрҙар конкурсының башланыуы тураһында иғлан итте.**

"Бөгөн мөһим яңы проектты башлайбыҙ. Ул беҙгә һауа кеүек кәрәк, сөнки һәр етәксенең иҡе проблемаһы бар - квалификациялы хеҙмәткәрҙәрҙе ҡайҙан табырға һәм йәҙәткес, квалификацияһы булмағандарҙан нисек ҡотолорға. Икеһен дә хәл итеү өсөн беҙ "Башҡортостан лидерҙары" конкурсын ойошторабыҙ ҙа инде. Проекттың маҡсаты - кандидаттарҙы ғәҙел, таныш-тоношһоҙ һәм коррупцияһыҙ һайлап алыу", - тине республика етәксеһе һәм конкурстың финалы Башҡортостан юлдаш телевидениеһында тура эфирҙа уҙасағын хәбәр итте. Һөҙөмтәләр буйынса иң яҡшы 100 ҡатнашыусы һайлап алына. "Уларҙың һәр береһе үҙенең потенциалын тормошҡа ашырыу мөмкинлегенә эйә була. Ә беҙ иһә республикаға үсешергә ярҙам итергә һәләтле профессионалдар алырбыҙ. Бөтә ҡатнашыусыларға уңыштар теләйем һәм конкурс еңеүселәрен Тукай урамы, 46-сы йортта түҙемһеҙлек менән көтәм, бергәләп эшләрбеҙ", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы.

ӘЙТӘГҮР!

# РУХ КҮТӘРЕЛЕШЕ КӨТӘБЕҘ!

**I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы тураһындағы хәтирәләрегеҙ нindәй?**

***Фәнзил САНЪЯРОВ, филология фәндәре кандидаты, БР Мәғарифты үҫтереү институты доценты:*** I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы 1995 йылдың 1-2 июнендә үтте, ул халҡыбыҙҙың күптән көтөп алған әһәмиәтле һәм оло сараһы, форумы булды. Өфө ҡалаһының үҙәк урамы йыр-бейеүгә сорналды, республиканың төрлө район-ҡалаларынан, Рәсәйҙең төрлө тарафтарынан, сит илдәрҙән килгән делегаттарҙы ул ваҡытта "Нефтселәр" мәҙәниәт һарайына халыҡ ҡул сабып оҙатты. Шул осорҙағы дәрт, рухи күтәрелеш кисергән милләттәштәрҙең шатлыҡтан балҡыған йөҙҙәре һаман да күҙ алдында. Сөнки халыҡ I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына ҙур өмөт бағланы һәм уға әҙерлек тә етди барҙы. Әйтергә кәрәк, халыҡтың ышанысын, ойоштороусылар һалған көстө йыйындың ҡарарҙары аҡланы, яңғыраған бөтә фекерҙәр ҡалын-ҡалын китаптар булып баҫылып сыҡты. Ҡыҙғаныска күрә III-IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайынан һуң шундай йыйынтыҡтарҙы баҫтыра алманыҡ. Тарих өсөн бындай йыйындар тураһындағы һүҙҙең ташҡа баҫылыуы барыбер бик мөһим.

I Ҡоролтайҙың хәтирәләре менән бүлешкәндә, Башҡортостандың халыҡ шағирҙары Мостай Кәрим һәм Рауил Бикбаевтың сығыштары, йыйынға арналған шиғырҙарын телгә алмай булмай. Гөмүмән, йыйында сығыш яһаусы һәр делегаттың фекере, һүҙе күңелгә уйылып ҡалған. Әммә бөтәбеҙҙе лә таң ҡалдырған, сәмләндергән сығышты Берлин иректе университеты профессоры Маргарет Ингеборг Эрсен-Раш яһаны. Немец ғалимәһе саф башҡорт телендә һөйләп, бөтәбеҙҙең дә танауға сиртте. Тап ул телмәр тотҡандан һуң, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡорт телендә барырға тейеш, тигән инаныу барлыҡҡа килде. Ә инде Башҡортостандың беренсе Президенты Мортаза Рәхимовтың һәм философия фәндәре докторы, профессор Дамир Вәлиевтың республиканың төрлө тармаҡтар үҫешенә арналған тулы йөкмәткеле докладтары киләһе йылдарҙағы эшмәкәрлеккә йүнәлеш бирҙе. Беренсе йыйындың бөтә ҡарарҙары ла төптән уйланылған булыуы һәм бик күп йүнәлештәрҙә башҡорт халҡының үсешенә ыңғай йоғонто яһауы менән айырылып торҙо. Ҡоролтай Башҡарма комитетының тәүге рәйесе итеп һайланған БР Фәндәр академияһы академигы, археолог Нияз Мәжитов үҙ иңенә һалынған бурыстарҙы намыҫлы үтәне.

I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында күтәрелгән мәсьәләләрҙең күбеһе бөгөн дә актуаллеген юғалтмаған. Ул саҡта халҡыбыҙҙың иҡтисади хәле, демография, миграция мәсьәләләре тураһында борсоулы фекерҙәр әйтелде, улар бөгөн көн ҡаҙағында. Әлеге көндә беҙҙе, бигерәк тә эш юҡ, тип һылтанып, күптәрҙең һәлкәүләнеүе, ялҡауға әйләнеүе борсой. Ҡалала ғына түгел, ауыл ерендә лә эшһеҙ йөрөүселәр күбәйҙе, ярты ырҙыны буш ята, хатта картуф сәсеп ашарға ла ялҡауы килә ҡайһы берәүҙәрҙең. Хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләү һәм эшҡыуарлыҡты үҫтереү башҡорт халҡының иҡтисади һәм социаль киләсәген яҡшыртыуға йүнәлтелгән аҙым икәнен аңларға кәрәк беҙгә.

Тағы ла бер мөһим мәсьәлә - башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү. Быйыл был йүнәлештәге эштәр яңы һулыш алды, байтаҡ ҡына ыңғай күренештәрҙе шаһит булдыҡ. Милләт үҫеше өсөн туған тел төп фактор булыуын беләбеҙ, әммә әлеге көндә 25-30 процент башҡорт ғаиләһендә русса аралашыу тенденцияһы күҙәтелә. Быны ошо проблемалар V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайындағы һөйләшеүҙәрҙән ситтә ҡалмаҫ, моғайын. Бынан 24 йыл элек күҙәтелгән рухи күтәрелеш ҡабатланыр, башҡорт халҡының мәнфәғәтен хәстәрләгән ҡарарҙар ҡабул ителер, тип ышаныс киләә.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йоҡо ла дауа

❖ Төндә ғырылдаһағыҙ, йоҡларға ятыр алдынан йоҡолоҡто диңгеҙ тоҙо иретмәһе менән сайҡатығыҙ, танауға ҡан тамырын тарайтыусы тамсылар тамыҙығыҙ.

❖ Йоҡларға 4 сәғәт ҡала иҫерткес эсемлек тә, йоҡо дарыуы ла, тынысландырыусы дарыуҙар ҙа эсмәгеҙ.

### Гөлйемеш

❖ Гөлйемештә С витамины күп. Әммә ашҡаҙанда сей яра бар, ашҡаҙандың әселеге юғары икән, гөлйемеш төнәтмәһен бик һаҡ ҡына эсергә.

❖ Гөлйемеш төнәтмәһе тештәргә насар йоғонто яһай, шуға күрә уны эскән һайын тештәрҙе һыу менән сайҡатырға.

❖ Ҡан тамырҙарында ҡан ойошоу күҙәтелһә, ҡан төйөрҙәре булһа, был төнәтмәне эсеү тыйыла.

❖ Ҡайһы бер йөрәк сирҙәре булғанда, мәҫәлән, эндокардит, төнәтмәне сама менән эсергә.

❖ Ҡан баҫымы түбән булғандарға гөлйемештең спиртлы төнәтмәһен эсергә кәрәк, ә һыулы төнәтмәһе зыянлы.

❖ Ҡан баҫымы юғары булғандарға гөлйемештең һыуҙағы төнәтмәһе шифалы.

❖ Гөлйемеш төнәтмәһен күп һәм оҙаҡ эсергә ярамай, сөнки ул бауыр эшмәкәрлегенә насар йоғонто яһай һәм һары ауырыуына килтереүе бар.

❖ Тире ауырыуында ла эсеү зыянлы.

❖ Гөлйемеш тамыры төнәтмәһе үт бүленеүҙе әкренәйткәнлектән, эсе ҡаталаған кешеләргә эсергә ярамай.

❖ Гөлйемеш һәм уның менән әҙерләнгән башҡа ҡатнашмалар эсәктәрҙә газ барлыҡҡа килеүҙе көсәйтә. Уны кәметеү өсөн туран, аҡ кишер төнәтмәһе эсергә кәрәк.

### Бауыр ауыртһа

❖ Ярты стакан кәбеҫтә һуты, ярты стакан яңы өлгөргән томат һутын бергә ҡушып, оҙайлы ваҡыт эсһән, файҙаһы тейә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *"Бына бөгөн бында йыйылыуҙың да сәбәбе - Урал батыр рухы. Әкиәттәребеҙҙе ҡарағыҙ: кем генә булмаһын, уның төп геройын батыр тигән исем менән йөрөтәбеҙ. Үҙебеҙҙе лә һәр ваҡыт батыр тип йөрөтәйек".*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

**Ҡумыҡтарҙың балаҫ һуғыу сәнғәтен өйрәнеүсе Э. Ташлицкая XVI быуатҡа ҡараған сығанаҡтарға иғтибар иткән. Унда перстарҙа төрлө төҫтәге буйлы балаҫ булыуы тураһында әйтелә. Бындай балаҫтар (ҡумыҡтар уны тура балаҫ ти), автор фекеренсә, ябай һуғыу сәнғәтенән юғары сәнғәткә - төҙөлөшө йәһәтенән үҫешкән, композицион яҡтан тулы орнаментты тәшкил иткән балаҫ һуғыуға күсеү этабын күрһәтеп тора.**

XX быуаттың аҙаҡҡы йылдарында Көньяҡ Уралда йәшәгән оҫталар ҙа аҫалы балаҫ һуғыуға тотона. Ҡатмарлы биҙәкле балаҫтар ауыл йорттарын биҙәй, уны туй бүләге итеп биреү бик абруйлы иҫәпләнә.



*Балаҫ - туй бүләге.
Йылайыр районы Һабыр ауылы.
Т. Сурина фотоһы. 1981*

Шулай ҙа XX быуатта Башҡортостандың көньяҡ-көнбайыш төбәге балаҫ һуғыусылары менән дан ала. Күгәрсен, Ейәнсураның тауҙарға яҡын өлөштәрендә, Ашҡаҙар йылғаһы буйында малсылыҡ менән шөғөлләнгән райондарҙа - Стәрлебаш, Стәрлетамаҡта, Ағиҙел йылғаһының аръяғының урта өлөшөндә һәм Дим йылғаһы буйында XX быуаттың уртаһына тиклем буйлы балаҫ һуғылған, ул көньяҡ-көнсығыш балаҫтарынан айырылмаған. Буй балаҫтарҙы рамлы һуғыу станогында һуҡҡандар.

Урал алдының көньяғына хас балаҫ һуғыу станогы - урынағасты рәссам Г. Мөхәмәтшина 1958 йылда Ейәнсура районы Ибрай ауылында төшөрөп ала. Иҙәндә торған ағас рамға борғоса һәм нигеҙҙең ирекле өлөшөн нығытыу өсөн бағаналар беркетелгән. Көрөҫ йәки көрө торлаҡтың иҙәненән һайғауға етеп тиерлек торған бағаналарҙы тоташтырып тороусы урҙаға эленгән. Тараҡ тартылған нигеҙҙә ята. Һуғыу аяҡтар ярҙамында башҡарыла. Йәғни, рам һуғыу ҡоролмаһын урынлаштырыу өсөн генә кәрәк булған. Н. Бикбулатов билдәләүенсә, был һуғыу станогы көньяҡ-көнсығышта ҡулланылғанынан айырылмай һәм ҡышлау йорттарында барлыҡҡа килгән. Шул уҡ ваҡытта, Ағиҙел аръяғында, Дим йылғаһы бассейнында ҡатмарлыраҡ һуғыу станогы булған, унда рам конструкцияһы һуғыу станогының айырылғыһыҙ өлөшө булып тора. Ул күрше татарҙар һәм сыуаштарҙың һуғыу ҡоролмаһына оҡшаш.

**Светлана ШИТОВА.
"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

АФАРИН!

**Егерме беренсе тапҡыр ойошторолған һәм Башҡортостан автономияһының 100 йыллығына арналған "Урал батыр" эпосын башҡарыусыларҙың республика конкурсы был юлы Ишембай ерендә үтте. Унда республиканың төрлө райондарынан үҙен тулы хоҡуҡлы Урал батыр вариҫы тип атарға хаҡлы ике йөҙҙән ашыу бала ҡатнашты. Быны улар тәрән фәлсәфәүи мәғәнә һалынған эпос юлдарын рухлы итеп һөйләүе һәм туған телде камил белеүе менән иҫбат итте.**

# БЕР-БЕРЕГЕҘГӘ...

## батыр тиегеҙ






Башҡорт ерենең изге урыны - Торатау итәгендә бары тик башҡорт кешеһенә генә серен асҡан эпосты яңғыратты, бер-береһен тыңлап илһам һәм дәрт алды уҡыусылар. Улар араһында 49 кеше эпосты яңғыҙ башҡарҙы, 30 коллектив сәхнәләштереүҙә ҡатнашты. Баһалама ағзалары әйтеүенсә, йылдан-йыл йәш ҡобайырсылар камиллаша, телмәр оҫталығын һәм актерлыҡ һәләттәрен үҫтерә бара, коллективтар ғәжәйеп ҡыҙыҡ сюжеттар тәҡдим итә, хатта тәүге тапҡыр "Сәйфелмөлөк" эпосын сәхнәләштергәндәр. "Ҡатнашыусылар һаны алдағы йылдарға ҡарағанда бер ни тиклем кәмерәк булһа ла, беҙҙең өсөн республиканың төрлө тарафынан балалар тупланыуы һәм эпосты аңлап һөйләүе әһәмиәтле. Быйыл ете йәш ҡобайырсы "Урал батыр"ҙы тулыһынса ятлап килгән, улар теләгән урындан тотоп һөйләп китә белеүҙән тыш, кәрәкле интонация, үҙен тотошо, ҡиәфәтенә лә тейешле иғтибар бирә белеүе менән һоҡландырҙы. Был үҙе ғәжәйеп бер күренеш һәм камиллыҡтың сиге юҡ икәненә ишара. Ҡатнашыусыларҙың ғына түгел, ойоштороусыларҙың да бәйгенең кимәлен күтәреү йәһәтенән бик тырышып эшләгәненә шик юҡ", - тине ярыш тураһында баһалама ағзаһы, "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналының баш мөхәррире Салауат Кәримов.

Был һүҙҙәрҙе конкурстың йомғаҡлау тантанаһында бөтә залды үҙҙәренә мөкиббән иткән А.В. Доставалов исемендәге Башҡорт кадет корпусының командаһы йөпләне: тамашасы егеттәрҙең һәр һүҙенә, хатта ым-ишараһына ышанып ҡабул итте сәхнәләштереү ваҡиғаларын. Ҡусҡыһы Урал алдында һыр бирмәҫкә тырышҡан Шүлгән ролендәге Алмаз Шәйбәков, яуыз һәм ҡотҡо таратыусы Әзрәкә батшаһы - Рушан Ғәйнуллин, уның бөтә һүҙен йөпләп һәм кәңәштәр бирергә әҙер Һынсы дейеү - Дим Искәндәров, мөһабәт кәүҙәле, ғәҙел һәм ҡыйыу Урал батыр - Камил Ғирфанов ҙур талант эйәләре булып сыҡты. Сценарий авторы һәм команданы әҙерләүсе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Рәйсә Мөхәмәтова әйтеүенсә, егеттәр кейемдәрен һәм сәхнә биҙәлешен дә үҙ ҡулдары менән әҙерләгән. Уларҙың тырышлығын жюри ағзалары ла юғары баһаланы һәм "Урал батыр" эпосын сәхнәләштереү номинацияһының төп еңеүсеһе тип тапты. Ә бына II урынды Баймаҡ ҡалаһы 2-се мәктәбе командаһы алды, III урынды Сибай гимназия-интернаты һәм Республика инженер лицей-интернаты командалары бүлеште. "Урал батыр" эпосын башҡарыусыларҙың республика конкурсы Гран-приһын быйыл Күмертау ҡалаһы 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернатының 10-сы синыф уҡыусыһы Гөлназ Үтәгәнова яуланы. Бишенсе синыфтан алып эпосты өйрәнгән һәм хәҙер инде тулыһынса яттан белгән ҡыҙ республика кимәлендә икенсе тапҡыр ҡатнаша. "Былтыр тау-урманлы Бөрйән районына барғайныҡ, ҡатнашыусылар ҙа күберәк булған һымаҡ тойолғайны, әммә бында ла конкурс көсөргәнешле барҙы. Миңә эпостың башын, Һаҡмар батыр килгәнен, Аҡбуҙат һәм Зәрҡүм һүҙҙәре ингән өлөшөн яттан һөйләргә тура килде. Мине конкурсҡа оҙаҡ йылдар әҙерләгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусым Гөлсинә Йосопованың да хеҙмәт емеше был еңеү", - тине тәьҫораттары менән бүлешеп иң шәп ҡобайырсы. Эпосты яттан һөйләүселәр араһында I урынды Республика инженер лицей-интернаты уҡыусыһы Таһир Шаһморатов һәм Ишембай ҡалаһы Ә. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернаты уҡыусыһы Ғәлиә Шәрипова яуланы. II урынға Йылайыр ауылы Ш. Бабич исемендәге Башҡорт гимназияһынан Гөлнәзирә Мәхмүтова, Бөрйән районы Иҫке Монасип мәктәбенән Сара Истәкова, Учалы районы Озерный ауылы мәктәбенән Алһыу Ҡотоева лайыҡ тип табылды. III урынды Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатынан Ғайсар Ҡансурин, Илеш районы Ябалаҡлы ауылы мәктәбенән Диана Ағалиева, Учалы районы Ураҙ лицейынан Лениза Шәйхетдинова, Өфө ҡалаһы Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһынан Сөләймән Ғәниев бүлеште. "Республика кимәлендә икенсе тапҡыр ҡатнашам, ә быға тиклем Өфөләге халыҡ-ара конкурста һәм Баймаҡ районы кимәлендә "Урал батыр" эпосын һөйләгәнем булды. Әлегә эпостың 3000 юлын яттан беләм, киләһе йыл 4500 юлға барып етергә һәм "Урал батыр"ҙы үҙем өсөн нығыраҡ асырға уйлайым. Шуға әле Гран-при алмаһам ярар ине, тип теләп ултырҙым, - ти I урын хужаһы Таһир Шаһморатов. - Икенсе ҡатнашыусыларға ҡарап һоҡландым, һәр кемдең үҙенә генә хас һөйләү ғәҙәте бар, бигерәк тә сәхнәләштергән командаларҙың сығышы күңелгә ятты. Бөтәһенән дә эпостың беренсе юлдарын һөйләтәләр, унан тыш минән Ҡоҙғон, Үгеҙ һәм Аҡбуҙат һүрәтләнгән өлөштәрен һоранылар. Ҡоҙғондо сағылдырыу өсөн әҙерләнгәндә "YouTube" каналындағы ошо ҡоштар тураһындағы видеоларҙы ҡараным, тауышымды ла оҡшатыбыраҡ һөйләргә тырыштым. Үгеҙҙе инде фильмдарҙағы кеүек ярһыу, ташланырға торған итеп күрһәтеп ҡараным. Ләкин эпостың Аҡбуҙат тураһындағы өҙөгөн саҡ ҡына нығытып өлгөрмәгәйнем, шул урыны эләкте лә ҡуйҙы. Киләһе йыл тулыһынса яҡшылап ятлап киләм!" Шулай итеп, башҡа уҡыусылар ҙа Таһир кеүек сәмләнеп, "Урал батыр" эпосын тағы ла яҡшыраҡ өйрәнергә, күберәк ятларға һәм сәхнәлә үҙҙәрен батыр тоторға вәғәҙә итеп ҡайтты. Уларға конкурстың жюри ағзаһы, педагогия фәндәре кандидаты Вәкил Хажин да шундай кәңәш бирҙе: "Беҙҙе һаҡлай торған тағы бер һүҙ бар - ул "батыр" тигән һүҙ. "Үлер илдең балаһы бер-береһенә "бахыр" тир", үҫер илдең балаһы бер-береһенә "батыр" тир. Бына бөгөн бында йыйылыуҙың да сәбәбе - Урал батыр рухы. Әкиәттәребеҙҙе ҡарағыҙ: кем генә булмаһын, уның төп геройын батыр тигән исем менән йөрөтәбеҙ. Үҙебеҙҙе лә һәр ваҡыт батыр тип йөрөтәйек, бер-берегеҙгә батыр тип өндәшегеҙ", - тине Вәкил Исмәғил улы еңеүселәрҙе тәбрикләп. Бына шулай, башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады менән яҡындан таныштырыуҙан тыш, булдыҡлы, рухлы һәм лайыҡлы алмаш тәрбиәләй "Урал батыр" эпосын башҡарыусыларҙың республика конкурсы.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*"Тәбиғәте шифалы был бай илдең бөтөн милкенә ирекле башҡорттар хужа. Улар бөтөн ер аҫты хазиналарын, тауҙарҙа һәм йылға үҙәндәрендә бик күп алтын, көмөш һәм аҫыл таштар ятыуын яҡшы белә. Ләкин халыҡтың байлығы ер аҫты хазиналарында түгел, ә иркен көтөүлектәрҙә, иҫәпһеҙ-һанһыҙ йылҡы өйөрҙәрендә, балығы мыжғып торған йылғаларында, башҡорттоң ҡанъянындағы һуңғы уғы атылһа ла, кейек-януарҙары һәм ҡоштары һис кәмемәҫ урмандарында. Ә умарталары иһә мөлдөрәп торған хуш еҫле йүкә балы менән һәр саҡ туп-тулы буласаҡ. Шулай булғас, ниңә башҡорт тимер, кәйлә, йә болан мөгөҙө менән уның күкрәген йыртҡыслап, тауҙарын аҡтарһын, ти?.."*

***Ф. НЕФЕДОВ. "Өскүл" хикәйәһенән.***

✓ XVI быуатта көнбайыш табындары ошо традицияны яңырта. XVI-XVII быуаттарҙа табын башҡорттарының бер өлөшө (бишул, йомран ырыыуҙары) тора-бара Тоҡ, Оло һәм Кесе Уран йылғалары үҙәндәрен үҙ төйәгенә әйләндерә.

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# БӨРКӨТ ҠОШЛО ТАБЫНДАР БЕҘ!




**Табын башҡорттары, башҡа башҡорт ырыу-ҡәбиләләре кеүек үк, меңйәшәр халҡыбыҙҙың берҙәм милләт булып ойошоуында ҡатнашып, ошо уртаҡ тарихыбыҙҙа лайыҡлы урын биләй. Табындар, иң эре этник берләшмәләрҙең береһе булараҡ, әле лә тарихи Башҡортостандың барса тарафтарында көн күрә.**

Тарихсы-этнолог Р.Ғ. Кузеев, XVIII быуатҡа ҡараған тарихи сығанаҡтарға нигеҙләнеп, башҡорттарҙың төрлөсәрәк сығышлы, әммә уртаҡ табын исеме аҫтындағы тотош бер этник берләшмәһе булыуын билдәләй. Был берләшмәгә, табындан башҡа, ҡыуаҡан, сырҙы, бишул, баҙраҡ, ҡумрыҡ ырыуҙары ингән, тип иҫәпләй ғалим. Ҡыуаҡандар - 6, бишулдар - 2, ә табындар үҙҙәре 9 кесе ырыу бүлемдәренән (түбә, аймаҡ) хасил була.

Көнсығыш табын ырыуҙарынан ҡара табын, барын-табын, теләү һәм күбәләк ырыуҙары йәшәгән ерҙәр башлыса хәҙерге Учалы районына ҡарай. Ҡайһы бер тарихи сығанаҡтарҙа Барын, Теләү һәм Күбәләк олоҫтары үҙаллы берәмек рәүешендә күрһәтелгән. Әммә XVIII быуатта И. Кириллов һәм П. Рычков уларҙы табын составындағы түбә-аймаҡтар иҫәбенә индерә.

Ошо районда аҫабалыҡ хоҡуғынан мәхрүм ителеп, типтәр сословиеһына күсерелгән килмешәк башҡорттарҙың ундан ашыу ауылы бар, улар "Учалы типтәрҙәре" тип аталған социоэтник төркөмгә ҡарай. Урындағы халыҡ телендә уларҙы "аҡ табындар" тип тә йөрөтәләр.

Көнсығыш табын ырыуҙарының иң ҙуры һәм абруйлыһы - ҡара табын ырыуы. Ҡара табындар батшанан барса көнсығыш табындары ерҙәре индерелгән жалованный грамота алыуға өлгәшә. Тархан Аккинйә Тәнекәев, табын ерҙәрен күскенсе төркөмдәр ҡаныҡыуынан ҡурсалау маҡсатында, 1692 йылда батша ғали йәнәптәренә яҙылған үтенес хатында Ҡара табын олоҫо ерҙәре сиктәрен бына нисек билдәләгән: "Көньяҡта - Ҡыҙыл йылғаһы үренә тиклем, унда Айҡар тауында Бөрйән олоҫо билдәһе ҡуйылған; көнбайышта - Ағиҙел йылғаһына тиклем, өҫкә табан уның ағымы буйлап Әй йылғаһы үренә тиклем; төньяҡта - Мейәс йылғаһы үренән башлап, уның ағымы буйынса түбәнгә Урал артына тиклем, артабан көньяҡ-көнсығышҡа Уй йылғаһы тамағына һәм Тобол йылғаһы аръяғындағы далаға тиклем". Ошо башҡорттарҙың бөгөнгө варисҭары Силәбе өлкәһенең Арғаяш, Сосновка, Сыбаркүл райондарында әйле ырыуы башҡорттарына йәнәшә йәшәй. Уй йылғаһы үҙәнендәге Булат, Мәһәҙи, Ҡурған өлкәһе Сафакүл районына ҡараған Баҡай, Бурыл-Айғыр, Үртәү, Себеш ауылдарына ла табындар нигеҙ һалған.

Кәлсер-табын, кесе табын, күрпәс-табын, ҡумрыҡ-табын, дыуан-табын, йомран-табын, һарт-табын вәкилдәре Ағиҙел йылғаһы, уның ҡушылдыҡтары Елем, Инйәр һәм Әҫем йылғалары буйҙарында, башлыса, хәҙерге Архангел, Ғафури, Ҡырмыҫҡалы райондары ерҙәрендә йәшәй. Ауырғазы районының бер нисә ауылы (Сөләймән, Үтәймулла, Түбәнге Ләкәнде) табын ырыуына ҡарай. Шулай уҡ Асылыкүл буйындағы Ҡыҙрас, Бурангол, Сапай ауылдарында (Дәүләкән районы) ла ҡара табын, барын-табын варисҭары бар. Р.Ғ. Кузеев ошо хаҡта былай тип яҙа: "... ҡара табын тарханы Аҡунсыҡ ата-бабаларының "боронғо ерҙәрендә" күрһәткән хеҙмәттәре өсөн аҫабалыҡ хоҡуғын ала. XVIII быуатта Асылыкүл табындарының һаны яңынан күсеп килеүселәр иҫәбенә байтаҡҡа артҡас, уларҙың ата-бабаларының тарханлыҡ хоҡуғы танылмай башлай, һәм табын ауылдары ҡанлы башҡорттары ерендә килмешәк (припущенник) хоҡуғында ҡалырға мәжбүр була".

Тарихи Башҡортостандың көнбайышында, Ыҡ йылғаһы буйында ла табын башҡорттарының аҫаба ерҙәре булған. 1730 йылда "Өфө Провинциаль канцелярияһында камерир Ф. Жилин һәм өфөләләр С. Третьяков һәм И. Гавренев әйтеүе буйынса төҙөлгән башҡорт олоҫтары торошо һәм реестры" тип аталған документта Ыҡ йылғаһы буйында Күрпәс-Табын олоҫо һәм Табын олоҫо теркәлгән. Был ерҙәр ирәкте (ирәкте-табын) ырыуына ҡараған була. Бында әлегә тиклем табындарҙың Үргә Табын, Түбәнге Табын, Мәлләтамаҡ, Шәрип, Митрәй, Иҫке Вәрәш, Яңы Вәрәш, Наратаҫты, Сәләүез-Мухан ауылдары һаҡланып ҡалған. Ҡасандыр ирәкте-табын һәм бүләр ырыуы аҫабалары биләгән ерҙәр әлеге ваҡытта Татарстандың Мөслим районы территорияһына инә.

Ирәктеләрҙең бер өлөшө, Башҡортостандың төньяғынараҡ китеп, ул ваҡыттағы Уса юлы ерҙәрен биләй (Тәтешле һәм Балтач райондары). Уларға сиктәш булып, табын башҡорттарына ҡәрҙәш танып ырыуҙары ҡайпан, ҡаҙансы, ҡыртанып, су-танып, шулай уҡ балыҡсы һәм унлар ырыуҙары көн итә.

Табындарҙың тарихи Башҡортостандың көньяғында һәм көньяҡ-көнбайышында - хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Красногвардейск һәм Александровск райондарында, Тоҡ һәм Кесе Уран йылғалары буйындағы ауылдарҙа, Һамар һәм Һарытау өлкәләрендә - Ырғыҙ һәм Кәмәлек йылғалары бассейнында төпләнгәндәре лә байтаҡ. Бының сәбәбе - башҡорт ырыуҙарының яҙҙан көҙгә тиклем малдарын йәйләүгә алып китеп, киң дала буйлап аҡҡан йылға үҙәндәрен көтөүлек итеп файҙаланыуында. Был турала Р.Ғ. Кузеев ошолай тип яҙа: "XVI быуатта көнбайыш табындары ошо традицияны яңырта. XVI-XVII быуаттарҙа табын башҡорттарының бер өлөшө (бишул, йомран ырыуҙары) тора-бара Тоҡ, Оло һәм Кесе Уран йылғалары үҙәндәрен үҙ төйәгенә әйләндерә. Күсеп килеп йәшәүселәр биләгән территория XIX быуатта Башҡорт ерҙәрен генераль межалау барышында нығытыла. Көнсығыш табындар Тоҡ йылғаһы үҙәнендә һуңғараҡ, башлыса XVIII быуатта юрматы башҡорттары еренә килмешәк (припущенник) сифатында урынлаша".

Табын ырыуына бәйле тарихи мәғлүмәттәрҙе ошо этник берләшмәнең заманында үтә ҡеүәтле булыуын, аҙағыраҡ Ҡаҙан, Уса, Себер, Ноғай даруғалары (юлдары) тип аталған ғәйәт ҙур территорияла таралып йәшәп, башҡа башҡорт ырыуҙары менән тығыҙ бәйләнешкә инеп, башҡорт илен нығытып торосусы ҙур көскә әйә булыуын раҫлаусы дәлил итеп ҡабул итергә мөмкин.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



*Әхмәтзәки ВӘЛИДИ ТУҒАН*

## БАШҠОРТ

Бер Үҙәк шураһы һәм урындарҙа элекке кантондар нигеҙендә төбәк шуралары ҡорола, көҙгөнөн бер армия ойоштороло башлай. Үҙәктәре Ырымбурҙағы Каруанһарайҙа урынлаша. Адвокат Бикбов Юныстың рәйеслегендә Милли хөкүмәт ойоштороло.

1918 йылда башҡорт частары рустар тарафынан баҫылып, хөкүмәт таратыла һәм ағзалары Ырымбурға төрмәгә ябыла. Ә апрелдә ҡаланың төрмә урынлашҡан өлөшө баҫып алыныуы арҡаһында хөкүмәт ағзалары Урал тауҙарына ҡасырға мәжбүр була. Шунан һуң Урал һәм Көнбайыш Себерҙә башҡорттар баш күтәреп, ике бүлек ойоштора һәм хөкүмәт йәнә Ырымбурға әйләнеп ҡайта. Ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ частарын да эсенә алған армия генерал Ишбулатов етәкселегендәге айырым бер Башҡорт корпусына әйләндерелә. Тап шул ваҡытта немецтарҙың Украина һәм Кавказға үтеп инеүенән ҡурҡҡан инглиздәр Урал тирәһендә милли ҡырғыҙ һәм башҡорт армияһы ойошторолоуын теләмәй һәм таралыуын талап итә. Шул талап буйынса генерал Колчак был хөкүмәтте һәм армияны танымауын иғлан итә.

1919 йылда аҡтарҙың сигенеүе арҡаһында Ҡыҙыл армия тарафынан ҡамауҙа ҡалған Башҡортостан хөкүмәте армияһы һәм эске эштәрҙә үҙаллылыҡ һаҡланыу шарты менән советтар менән килешеү төҙөй (1919 йылдың 19 феврале). Бынан һуң башҡорттар менән ҡаҙаҡтар Ырымбурҙы үҙәк итеп һайлап берләшергә тырышһалар ҙа, тырышлыуҙары юҡҡа сыға. Ҡаҙағстан өсөн - Ырымбур, Башҡортостан өсөн Стәрлетамаҡ ҡалаһы үҙәк ителә. Ул ваҡытта Башҡортостан күпселеге төрки халыҡтары йәшәгән "Бәләкәй Башҡортостан"ды биләй. Уның территорияһы 84 874 км2 , халҡының һаны 1 259 059 кеше, уларҙың 65-72 проценты төрки халыҡтары була. Хөкүмәт рәйесе вазифаһын Йомағолов башҡара. Был хөкүмәт 27 000 кешелек армия ойоштороп, советтар менән 14 ай бергә эшләгәндән һуң, эштәрен ташлап, советтарға ҡаршы көрәшкән Төркөстандағы баҫмасылар хәрәкәтенә ҡушылыу өсөн шул яҡҡа китә. Бынан һуң Башҡортостанда тулыһынса Совет идараһы урынлаштырыла һәм армияһы бөтөрөлә. Советтар, Өфө губернаһын Башҡортостанға ҡушып, "Оло Башҡортостан"ды ойоштора. Үҙәге итеп Өфө ҡалаһы тәғәйенләнә. Шулай итеп Башҡортостандың территорияһы 151 840 км2 һәм халҡының һаны 1935 йылғы халыҡ иҫәбе буйынса 2 975 400 кешегә етә.

**(Аҙағы).**

**Библиография:**
Nemeth Jula, Magna Hungarica (Beitragezur his. Geographie des Orients, nsr. Von Mzik, Wien, 1929, s. 92-98); Филоненко, Башкиры, Уфа, 1912; Ғабдулла Ғисмәти, Башҡортостан географияһы, Өфө, 1924. Бола тарихтары өсөн ҡарағыҙ: A Battal, Kazan Turkleri: (Istanbul, 1925), s. 82-86, 92-95, 100-108, 117-126; Чулошников, Башкирские восстания XVII-первой половины XVIII века, 1936; Добросмыслов, Башкирские бунты, 1899; Труды научного общества по изучению быта, истории и культуры Башкирии, Стерлитамак, 1922, I, II; Материалы общества изучения Башкирии I, Башкирский краеведческий сборник, Уфа, 1922; Шәмси Типеев. Башҡортостанда инҡилап тарихы, Өфө, 1926. Башҡорт этнографияһы һәм антропологияһы өсөн: С. Руденко, Башкиры: опыт этнологической монографии, I, Петроград, 1916, II, 1922; W.Youferow, Etudes ethnographigues sur les Baschkirs, Paris, 1881; Dr. J.Wastl, Baschkiren. Een Beitrag zur Klarung der Rassenprobleme Ost europas, Wien, 1938; Д. Никольский, Башкиры, Петербург, 1899 (был әҫәрҙең аҙағында 348-365 биттәрҙә башҡорттар хаҡында ентекле библиография бирелгән); R. Zach und H. Jansky, Baschkirische Gesange, Wien, 1939; Башҡорт теле буйынса: G. Meszaros, Magna Ungaria (Budapest, 1919) Башҡорт аймағы, II, 1926.

*✓ Башҡортто бер ваҡытта ла уның ихтыярынан тыш нимәләр эшләргә мәжбүр итеп булмай, сөнки һәр аҫаба үҙен азат, хоҡуҡлы кеше тип иҫәпләгән һәм уға тархан нимә тип әйтә, хатта батша нимә ти - иҫе лә китмәгән.*



**Йыйындар, ҡоролтайҙар элек-электән башҡорт халҡы тормошонда мөһим роль уйнаған. Уларҙа милләт яҙмышы өсөн хәл иткес ҡарарҙар ҡабул ителгән. Бөгөн, V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы алдынан ҡайһы бер һорауҙарға асыҡлыҡ индереү өсөн редакцияға тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт һәм журналистика өлкәһендәге Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премиялары лауреаты Салауат ХӘМИҘУЛЛИН менән социология фәндәре кандидаты Илгиз СОЛТАНМОРАТОВты саҡырҙыҡ.**

# МИЛЛИ ҠЕҮӘТЕБЕҘ



**Оло ҡор алдынан тағы бер тапҡыр тарихҡа байҡау яһап, йыйындарҙың, ҡоролтайҙарҙың әһәмиәтен билдәләп үтәйек әле, булмаһа…**

**С. Хәмиҙуллин:** Бөгөн халыҡҡына түгел, йәмғиәт күп нәмәне, шул иҫәптән тарихсылар килтергән яңы концепцияларҙы ҡабул итергә һәм аңларға теләмәһә лә, башҡорттар 15-се быуаттан яңы заманға тиклем акефаль йәмғиәттә, йәғни ниндәйҙер иерархияға буйһонмай, үҙидара принцибында йәшәгән. Әлбиттә, бындай йәмғиәт башында йыйындар торған. Айырым кландар көндәлек мәсьәләләрҙе үҙҙәре хәл иткән, ә дөйөм милләт, мәҫәлән, һуғыш, солох, аҫабалыҡ мәсьәләләре, ниндәйҙер бәхәсле мәлдәр, Рус дәүләте составына ингәнгә тиклем, хатта унан һуң да тап ошо йыйындарҙа хәл ителгән. Шуға күрә башҡорт халҡының демократик традициялары йәмғиәтебеҙҙең шундай әһәмиәтле элементына эйә тип әйтергә була һәм ул менталитетыбыҙға ла һеңгән. Ғәмәлдә, башҡортто бер ваҡытта ла уның ихтыярынан тыш нимәләр эшләргә мәжбүр итеп булмай, сөнки һәр аҫаба үҙен азат, хоҡуҡлы кеше тип иҫәпләгән һәм уға тархан нимә тип әйтә, хатта батша нимә ти - иҫе лә китмәгән. Әгәр ул риза түгел икән - ихтилалға күтәрелгән. Был, ҡайһы берәүҙәр яҙғанса һәм уйлағанса, артта ҡалғанлыҡ билдәһе түгел, ошо демократик башланғыс, кireһенсә, башҡорт халҡына тере ҡалыу, бөгөнгәсә йәшәү мөмкинлеге бирә. Ә демократик булмаған, вертикаль структураларҙа юғалыу, ассимиляцияға бирелеү еңелерәк. Беҙгә бына ошо тарихи булмышыбыҙҙы, башҡорт халҡының демократик тенденцияларын нигеҙ итеп алырға кәрәк. Ҡоролтайҙарға килгәндә, ни өсөн беренсе мосолман съезынан һуң унда ҡатнашыусылар Башҡортостанға ҡайтып, Башҡорт халҡы бюроһы һәм Бөтә Башҡорт ҡоролтайы ойошторорға ҡарар итә? Был тап элекке, ғүмер буйы йәшәп килгән традицияларға кире ҡайтыуҙы аңлата, сөнки улар ниндәйҙер мөһим мәсьәләләрҙә халыҡтың ризалығынан башҡа ҡарар сығарырға үҙҙәрен вәкәләтле түгел, тип иҫәпләй. Һәм ҡабул иткән теләһә ниндәй ҡарарҙың, әгәр халыҡ хупламай икән, көсө булмауын аңлағандар. 1917 йылда үткән өс Ҡоролтай ҙа Башҡорт Республикаһын ойоштороуға һәм булдырыуға нигеҙ һала. Һуңынан 70 йыл буйына бер ниндәй ҡоролтай ҙа үтмәне, уҙған быуаттың 1995 йылында тағы ла халыҡ хәрәкәттәре башланды, халыҡ инициативаһы менән ҡоролтай тергеҙелде. 1917 йылғы ҡоролтай менән хәҙерге замандағыһын сағыштырырға ярамай, бөгөн милләт алдында һуғыш йәки солох, республика төҙөү мәсьәләһе тормай. Улар икеһе ике төрлө нәмә. Бөгөн Ҡоролтай рекомендация биреү характерындағы сара һәм ул үтер ҙә китер. Иң мөһиме - йыйылдыҡ та, ҡунаҡ булдыҡ та, сәй эсеп, йырлап-бейеп таралыштыҡ булмаһын, йүнәлештәр билдәле бит, велосипед уйлап сығараһы түгел, шуға ла был ҡоролтайҙан һуң да eң һыҙғанып эшләргә кәрәк.

**И. Солтанморатов:** Ошо демократик принциптар Рәсәйҙә парламентаризмға табан беренсе аҙымдар башланыуға ла сәбәп була. Рәсәй Дәүләт Думаһындағы мосолман фракцияһында башҡорт депутаттары, мәҫәлән, Шаһихәйҙәр Сыртланов, әүҙем ҡатнаша. Йыйындарҙың традицияһын - халыҡ фекерен тыңлап, халыҡ мәнфәғәтен яҡлауҙы бөгөн көнбайыштан ингән яңылыҡ итеп күрһәтергә тырышһалар ҙа, парламентаризм, федерализм башҡорттарҙа элек-электән булған. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетына, хатта уларға ғына түгел, башҡорт халҡы, Башҡортостан тураһында һүҙ алып барған ваҡытта башҡаларға ла ошоно һәр ваҡыт күҙ уңында тоторға кәрәк. Үкенескә күрә, күптәр был фактты онота. Был бит төбәгебеҙҙең төп үҙенсәлектәренең береһе, тип әйтер инем. Бөтә сер, хатта башҡорт халҡы менән идара итеү һәм уны үҫтереүҙең сере лә шунда. Шуны күҙ уңында тотмайынса, аңламайынса, алға китеш булмаясаҡ. Сөнки ниндәйҙер федераль проекттарҙы, программаларҙы нисек бар, шулай тормошҡа ашырырға тырышабыҙ, ә бит Башҡортостандың үҙенең үҙенсәлеге бар, өҫтәүенә, уның һәр бер районы айырым үҙенсәлеккә эйә. Барыһына бер тигеҙ ҡараһаҡ, совет осороноң хатаһын ҡабатлаясаҡбыҙ. Ҡоролтай ҙа ошо үҙенсәлектәрҙе күҙ уңында тотоп эшләргә тейеш. Ҡаныбыҙҙа булған демократик башланғысҡа әҙ генә ирек бирергә кәрәк, халыҡ үҙе күтәреп сыҡһын, хәл итһен үҙ проблемаларын. Күреп торабыҙ бит, ауылдарҙа халыҡ эскелеккә ҡаршы яу асты, ир-аттар ҡорҙары, клубтары булдыралар. Бары тик ошо башланғысты күтәреп алып, ярҙам итергә, халыҡ аңлаған рәүештә эшләргә кәрәк.

> *Йыйындарҙың традицияһын - халыҡ фекерен тыңлап, халыҡ мәнфәғәтен яҡлауҙы бөгөн көнбайыштан ингән яңылыҡ итеп күрһәтергә тырышһалар ҙа, парламентаризм, федерализм башҡорттарҙа элек-электән булған. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетына, хатта уларға ғына түгел, башҡорт халҡы, Башҡортостан тураһында һүҙ алып барған ваҡытта башҡаларға ла ошоно һәр ваҡыт күҙ уңында тоторға кәрәк. Үкенескә күрә, күптәр был фактты онота. Был бит төбәгебеҙҙең төп үҙенсәлектәренең береһе, тип әйтер инем. Бөтә сер, хатта башҡорт халҡы менән идара итеү һәм уны үҫтереүҙең сере лә шунда. Шуны күҙ уңында тотмайынса, аңламайынса, алға китеш булмаясаҡ.*

**Халыҡ өсөн Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты - власть менән халыҡты бәйләп торған ептәрҙең береһе. Әгәр БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары власть кимәлендә шундай вәкәләткә эйә булһа, Ҡоролтай ағзалары - йәмәғәтселек кимәлендә. Һәм ул был бурысын нисегерәк үтәй һәм үтәргә тейеш?**

**С. Хәмиҙуллин:** Ҡоролтай - формаль рәүештә йәмәғәт ойошмаһы булһа ла, ул дәүләт менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй. Шуға күрә унда ниндәйҙер демократлаштырыу яғына үҙгәрештәрҙе ҡапыл ғына атҡарыу мөмкин түгел. Күп райондарҙа ҡоролтай рәйесе итеп район хакимиәте башлығына яраған, уның һүҙен тыңлаған кеше, күп осраҡта хакимиәт башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары һайланды. Һөҙөмтәлә эш тә шул кимәлдә генә барҙы, бар нәмәгә кәртә ҡоролдо. Бигерәк тә төньяҡ-көнбайыш төбәктә был асыҡ күренде. Йәғни ҡайһы бер район ҡоролтайҙары рәйестәре, киреһенсә, эшкә аяҡ салды. Әле Ҡоролтай үҙенең сафтарын таҙартыу буйынса, исмаһам, урындарҙа бар күңеле менән милләт өсөн янған кешеләр эшләһен өсөн

**йәмәғәт ойошмалары һәм**

бер аҙ эш башланы. Урындарҙа зыян килтереүселәр ултырғанда, ойошманың нисек һөҙөмтәле эшләүен теләйһегеҙ? Был - беренсе мәл. Икенсе мәл: һигеҙ йылға һуҙылған торғонлоҡ осоронда Башҡорт Ҡоролтайын бөтөрөү буйынса ҙур эшмәкәрлек алып барылды. Әммә бында бумеранг һөҙөмтәһе килеп сыҡты. Ә бит башҡорт халҡының законлы вәкиле, уның мәнфәғәтен яҡлаусы ойошма булған Ҡоролтай менән бергә эшләргә кәрәк ине, сөнки Ҡоролтай дәүләттән азат була алмай, шуға күрә, алтын урталыҡты табыу зарур: ниндәйҙер кимәлдә дәүләт ихтыяжы ла ҡәнәғәтләндерелһен, шул уҡ ваҡытта Ҡоролтайҙа борон-борондан килгән демократик принциптар ҙа юғалтылмаһын ине. Ә теге-был яҡҡа ауышҡанда эш алға бармаясаҡ. Шуға, сафтарҙы таҙартыу йүнәлешендә ныҡлы эшләргә кәрәк.

**И. Солтанморатов:** Әле ниндәйҙер алға китеш күренә башланы. Мине бигерәк тә сит төбәктәрҙә үҙ аҫаба ерҙәрендә йәшәгән башҡорттарҙың яҙмышы борсой һәм уларҙа ҡоролтайҙар үткәреү, делегаттар һайлауҙы ойоштороу тәртибе оҡшаны: Башҡортостан Башлығы ҡултамғаһы менән алдан ошо төбәктәр губернаторҙары исеменә хаттар яҙылған. Был - ғүмерҙә лә булмаған күренеш, дөрөҫ йүнәлеш, сөнки әгәр ҡайҙалыр башҡорттар йәшәй икән (бигерәк тә диаспора түгел, үҙенең аҫаба ерендә йәшәһәләр), тимәк, ундағы башҡорттар тураһында хәстәрлек күреү - туранан-тура Башҡортостан Башлығы хакимиәтенең эшмәкәрлеге өлкәһенә инә.

**С. Хәмиҙуллин:** Быға тиклем билдәле бер арауыҡта башҡорттар күпләп йәшәгән күрше өлкәләр онотолған хәлдә булды. Ул ғына ла түгел, Башҡортостанда ла башҡорттар баҫылып ҡалғайны. Баяғы һигеҙ йыл эҙемтәһе оҙаҡҡа һуҙыласаҡ әле. Әммә халыҡ үҙенең милләте яҙмышы өсөн яуаплы икәнен аңлаһа, уны үҫтереүгә үҙ өлөшөн индерергә тырышһа, ул эҙемтәләрҙе тиҙерәк бөтөрөргә булыр.

**И. Солтанморатов:** Тағы бер нәмәне әйткем килә: бөгөнгө Ҡоролтай йәштәргә йүнәлеш алды һәм уның сафында йәштәр булырға тейеш, тип бара. Әммә бында ла ниндәйҙер баланс булырға тейеш һәм кемде бөгөн йәш тип атайбыҙ, шуға асыҡлыҡ индерергә кәрәк. Эйе, закон буйынса йәш категорияһы 35 йәшкә тиклем, әммә мин был осорҙо 45 йәшкә тиклем арттырырға тәҡдим итер инем. 45-тән үткәндәр - тап йәштәрҙе тәрбиәләрлек урта быуын, уларҙың белеме бар, тәжрибәһе бар, аяғында ныҡлы баҫып торалар, йәмғиәттә абруй яулағандар. Ә 35 йәшкә тиклемге йәштәрҙең, эйе, күҙҙәре янып тора, әммә тормош һәм эш тәжрибәһе самалы. Минеңсә, йәмәғәт эшенә килгән кеше ирекмән түгел, иң элек ниндәйҙер өлкәлә билгес булырға тейеш. Ғалим булһынмы, табип булһынмы, башҡа һөнәр эйәһеме - параллель рәүештә профессиональ йәһәттән үҫергә, шунан ғына туплаған тәжрибәһен йәмәғәт эшендә ҡулланырға тейеш. Ни өсөн Нияз Мәжитов заманында Ҡоролтай көслө булды? Сөнки ул ваҡытта Ҡоролтай башҡорт халҡының 45-60 йәшлек тотош бер ҡатлам билгестәренән тупланғайны. 25 йыл эсендә улар ҡартайҙы. Ә уларҙың урынына кем килә? Фәндә лә күренә был бушлыҡ, мәҫәлән, археология, антропология буйынса фән докторҙары юҡ, йә улар берәм-һәрәм генә. Шуға, йәмәғәт эштәренә урта йәштәге кешеләрҙе күберәк йәлеп итергә кәрәк. Ҡоролтайҙа быуындар күсәги-

**✓ Урындағы башҡорттар үҙ территорияларын билдәләй башланы, күңелдәрендә аҫабалыҡ уянды. Аҫабалыҡ уянғас, ул кеше тәбиғәтенә лә, теленә лә, башҡа нәмәләргә лә битараф була алмай. Аҫабалыҡ - бик ҡеүәтле тойғо!**



# КҮРҺӘТКЕСЕ -

## халыҡтың берҙәмлеге ул



лешлеге булырға тейеш. Ә уның өсөн алмаш бармы, юҡмы икәнен барларға, анализ яһарға, кадрҙар ревизияһы үткәрергә, ниндәй өлкәләрҙә кадрҙар етмәгәнен асыҡларға тейешбеҙ.

**Ысынлап та, беренсе Ҡоролтайҙан алып бөгөнгә тиклем милли кадрҙар әҙерләү проблемаһы күтәрелә килә, резолюцияға индерелә, әммә йөк һаман урынында ҡала. Һуңғы йылдарҙа был эш хатта насарайҙы ла тиергә мөмкин. Был йәмәғәтселектең маҡсат ҡуйып, талап итә белмәүе һөҙөмтәһеме, әллә Хөкүмәттең йәмәғәтселек фекеренә ҡолаҡ һалмауымы?**

**И. Солтанморатов:** Хөкүмәт айырым бер милләттең генә кадрҙарын үҫтерә алмай. Был тап йәмәғәтселектең көсөндә. Ул талаптар ҡуйып, махсус программалар ҡабул иттереүгә өлгәшһә, ҙур эш башҡарылаcаҡ. Мәҫәлән, Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалалары студенттарын берләштергән Ассоциацияла Башҡортостандан барған йәштәр тупланған. Шулай ҙа уларҙың 90 процентын башҡорттар тәшкил итә. Быны ни өсөн әйтәм, Башҡортостанда иң әүҙем, нимәгәлер ынтылған йәштәр - тап башҡорт йәштәре. Йәштәрҙең ниндәйҙер башланғысын хуплайым тиһән, унда мотлаҡ башҡорттар була. Бигерәк тә райондарҙан сыҡҡан йәштәрҙе туплау, уҡырға ебәреү буйынса әле әйткән ойошма матур эш алып бара. Тағы ла: БДИ-ны ни тиклем гена яманлаһалар ҙа, ул хатта төпкөл ауыл балаларына ҙур ҡалаларҙағы юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеү мөмкинлеге бирҙе. Был да кадрҙарҙы үҫтереүгә ҙур өлөш.

**Тимәк, БДИ милли кадрҙар әҙерләү мөмкинлеген бирә, әммә артабан был кадрҙарҙы республикала файҙаланыу эше алып барылмай. Әйтеп китеүегеҙсә, ревизия эшләнмәй, кадрҙар резервы юҡ...**

**С. Хәмиҙуллин:** Милли кадрҙар әҙерләү эше элек алып барылды ул. Әммә ул саҡта башҡорт элитаһының кимәле ул тиклем үк юғары түгел ине. Улар был эште ниндәйҙер маҡсатлы йүнәлешкә бороп ебәрә алманы. Бөгөн элита заман менән бергә атларға тырыша, әммә ҙур тиҙлек менән барған үҙгәрештәргә өлгөрә алмай. Шуға күрә урбанизация мәсьәләһенә күҙ йоморға ярамай. Татарстанда, мәҫәлән, кадрҙар проблемаһы бер ваҡытта ла булманы. Улар күптән урбанизацияланған халыҡ. Беҙҙең халыҡ күбеһенсә ауылда йәшәне, ҡалаларға күсергә атлығып торманы. Хәҙер башҡорттарҙың иң тупланған урыны - Өфө. Шуға беҙгә баш ҡала башҡорттары менән ныҡлап эшләргә, уларға, Силәбегә йәки башҡа төбәктәргә китмәһендәр өсөн, йәшәү, эшләү шарттары тыуҙырырға кәрәк. Боронғо Өфө элек-электән башҡорттар ҡалаһы булған һәм беҙгә бөгөн дә бында нығынырға, баш ҡалала башҡорт субмәҙәниәтен булдырыу, уларҙың телен, мәҙәниәтен һаҡлау, үҫтереү һәм башҡортлоҡтоң бөтөн тармаҡтарға, бөтөн ҡатламдарға, бөтөн мөхиткә үтеп инеүен маҡсат итеп ҡуйыу кәрәк. Был Ҡоролтай эшмәкәрлегенең дә төп йүнәлеше булырға тейеш.

**Өфөгә башҡорттарҙы күберәк туплау мәсьәләһе, моғайын да, V Ҡоролтайҙа ҡаралаҫаҡ документтың - Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһының бер пункты булып торорға лайыҡтыр. Ә уның башҡа пункттарын, ғөмүмән, стратегияны һеҙ нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ?**

**С. Хәмиҙуллин:** Бындай документтарҙың барыһына ла скептик ҡараштамын. Быға тиклем дә әллә күпме программа ҡабул ителде. Улар яҙыла ла тап ошо мәлдә башҡорт йәмәғәтселегенең нимә тураһында уйлағанын, хыялланғанын раҫлаусы архив документына әүерелә. Минең өсөн Стратегияны яҙыу процесы мөһим, сөнки халыҡ уйлай башлай, башында ниндәйҙер фекер тыуа. Ҡағыҙҙа булараҡ, стратегияларҙың барыһы ла тормошҡа ашмай. Бер-ике пункты үтәлһә лә бик яҡшы. Бында быға саҡлы эшләгән практикалар унайлыраҡ, тап шуларға баҫым яһарға һәм ошо нигеҙҙә эшләргә кәрәк. Ә стратегия - ул дөйөм йүнәлеш, ниндәйҙер теләк кенә. Иң мөһиме - эшләргә һәм әлеге ваҡытта Ҡоролтайҙың нимә менән шөғөлләнергә теләгәнлеген асыҡларға. Тел мәсьәләһе - ул дәүләт, Хөкүмәт кимәлендә хәл ителә торған мәсьәлә. Күпме ҡыҫҡыр, йөҙөрөк болға, уны йәмәғәт ойошмаһы ғына хәл итә алмай. Ә Ҡоролтай ниндәй мәсьәләләрҙе хәл итә ала һуң? Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары мәсьәләһен әле килеп беҙҙең өсөн берәү ҙә хәл итмәйәсәк икәнен аңлау кәрәк. Икенсеһе - Ҡоролтай башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәр менән ныҡлап эшләргә тейеш. Улар Башҡортостандың юрисдикцияһында түгел, унда йәмәғәтселектән башҡа берәү ҙә башҡорт халҡын ҡайғыртып ултырмай. Өсөнсөһө - Ҡоролтай башҡорт халҡының мейе үҙәге булырға, милләттең бар вәкилдәрен бергә йыйырға, тупларға тейеш. Ошо өс йүнәлеште мин иң мөһимдәре тип һанайым.

Башҡортостандан ситтә башҡорттар күпләп йәшәгән ҡайһы бер урындарҙа Ҡоролтай бер тапҡыр ҙа булғаны ла юҡ, халыҡ уны белмәй ҙә, ишетмәгән дә. Мәҫәлән, Ырымбур өлкәһендә тотош бер район бар - Әсекәй. Район тотош татарлашҡан ҡыпсаҡ һәм тамъян ырыуы башҡорттарынан тора. Тамъян ауылы бар. Был хаҡта Ҡоролтай бер нәмә белмәй, бер тапҡыр ҙа барғандары ла юҡ. Ә Бөтә донъя татар конгресы унда айына бер тапҡыр барып тора. Ниндәй генә байрам булмаһын - баралар ҙа етәләр, телевидениеға төшөрәләр. Унда йәшәүселәрҙең кейемдәре лә хәҙер татарҙыҡына әйләнгән. Ләкин был бит уларға ҡул һелтәп ҡуйырға ярай, тигәнде аңлатмай. Улар менән эшләргә кәрәк, маҡсатлы эш алып бармаһаҡ, әлбиттә, халҡыбыҙҙың бер өлөшөн юғалтып бөтәсәкбеҙ. Татарҙар татар диаспоралары менән ныҡлы эш алып бара, ә ундағы башҡорттар диаспора түгел, улар - аҫаба. Айырма шунда, Татарстанда татар диаспораһы менән эшләү дәүләт кимәлендә алып барылған сәйәсәт. Ә беҙҙә, үкенескә күрә, был эшмәкәрлек йәмәғәтселек кимәлендә ҡалдырылған. Дәүләт тә мөнәсәбәтен үҙгәртергә, үҙен ошо территорияла ғына административ эштәр башҡарыусы орган, Башҡортостандың ғына Хөкүмәте түгел, ә донъяла йәшәгән башҡорттарҙың Хөкүмәте, тип ҡарарға тейеш.

*Хәҙер башҡорттарҙың иң тупланған урыны - Өфө. Шуға беҙгә баш ҡала башҡорттары менән ныҡлап эшләргә, уларға, Силәбегә йәки башҡа төбәктәргә китмәһендәр өсөн, йәшәү, эшләү шарттары тыуҙырырға кәрәк. Боронғо Өфө элек-электән башҡорттар ҡалаһы булған һәм беҙгә бөгөн дә бында нығынырға, баш ҡалала башҡорт субмәҙәниәтен булдырыу, уларҙың телен, мәҙәниәтен һаҡлау, үҫтереү һәм башҡортлоҡтоң бөтөн тармаҡтарға, бөтөн ҡатламдарға, бөтөн мөхиткә үтеп инеүен маҡсат итеп ҡуйыу кәрәк.*

**И. Солтанморатов:** Миненсә, Стратегияға аныҡ тәҡдимдәр, оло ҡорҙа ҡабул ителгән резолюция ҡарарҙары ла инергә тейеш. Ғөмүмән, мин ҡабул ителәсәк документты стратегия тип түгел, ә ғәмәлдәр программаһы тип атар инем. Преамбулала бөгөн хәл ителергә тейешле проблемаларҙы күҙ уңында тотоп, дөйөм һүҙҙәр яҙырға мөмкин: телде үҫтереү, уның өсөн шарттар булдырыу, ауыл халҡына эш булдырыу, демография һ.б. Ә уларҙы аныҡ тәҡдимдәр менән нығытһаҡ, мәҫәлән, уҡытыусыларҙың I съезында 11 махсус милли белем усағы булдырыу идеяһы булды, Ҡоролтай ҡарарына, шул уҡ стратегияға уларҙың аныҡ урынын, районын индерергә кәрәк. Йәки ниндәйҙер районда йәки ауылда кооператив йә ауыл хужалығы продукцияһын эшкәртеү пункты асыуҙы алайыҡ. Федераль кимәлдә ҡабул ителгән программаларға нигеҙләнеп, уларҙы республика, район, ауыл кимәленә тиклем төшөрә, йәғни урындарҙағы үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, өҫтәмә программалар эшләүгә йүнәлеш бирә һәм талап итә алабыҙ. Юҡһа, III Ҡоролтайҙа Торатау итәгендә "Ырыуҙар ташы" эшләргә ҡарар ителде, ул һаман тормошҡа ашырылманы. Ҡоролтайҙан ҡоролтайға мираҫ итеп тапшырыла килгән бурысты - арҙаҡлы башҡорттарға һәйкәлдәр ҡуйыуҙы ла ҡабаттан күтәрергә була. Тағы ниндәй ырыуҙарҙың йыйындарын үткәрергә? Ул тәҡдимдәрҙең һөҙөмтәһе 3-5 йылдан күренергә тейеш. Шулай уҡ ҡала башҡорттары, башҡорт ауылы, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары айырым иғтибар үҙәгендә булырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта милли мәҙәниәтебеҙҙең, телебеҙҙең, демографияның сығанағы булып ауыл тора. Төньяҡ-көнбайышҡа килгәндә, күпме тылҡыйбыҙ шул төбәк ырыуҙарының йыйынын үткәрергә, айырым уҡ булмаһа ла, шәжәрә сиктәрендә дөйөм йыйын үткәрергә мөмкин. Ҡарарҙар ниндәйҙер һауала осоп йөрөгән түгел, ә ерлек менән бәйле булырға һәм төбәктәрҙең үҙенсәлеген иҫәпкә алып, ниндәйҙер ваҡиғағамы, шәхескәме, мөһим мәсьәләгәме, проблемағамы бәйле ҡабул ителергә тейеш. Тағы бер мөһим мәсьәлә - Салауат Юлаев проспектындағы Әр-Рәхим мәсете. Уның буйынса ләм-мим өндәшмәйбеҙ. Стратегияла йәки V Ҡоролтай ҡарарында был мәсьәлә лә, уның ҡасан төҙөлөп бөтөүен дә аныҡ күрһәтергә кәрәк. Шулай уҡ республикаға ҡайтырға теләүсе башҡорттар өсөн шарттар тыуҙырыу мәсьәләһе лә инергә тейеш был стратегияға.

**Граждандар йәмғиәте, әгәр уны дөрөҫ файҙаланғанда, ҡеүәтле көс. Бына шул көскә нисек ыңғай йүнәлеш бирергә, нисек файҙалы эшкә йәлеп итергә?**

**С. Хәмиҙуллин:** Чечендар үҙҙәренең батшаһы ла, хакимы ла булмауы менән ғорурлана. Хатта шундай әйтемдәре лә бар: "Каждый чеченец - узден (төрки һүҙе - үҙҙән - үҙендән)", йәғни азат кеше. Уларҙа һәр кеше азат, бер ваҡытта ла хужа ла, хеҙмәтсе лә булмаған, шуға күрә уларҙы бер кем дә буйһондора алмай. Беҙҙә, киреһенсә, булған потенциалды дөрөҫ файҙаланыу урынына, баҫырға тырышалар. Ҡоролтай, ырыуҙар хәрәкәте, башҡа йәмәғәт ойошмалары, ысынлап та, әгәр уларҙы дөрөҫ файҙаланғанда, власть органдары өсөн шул тиклем ҡеүәтле көс, ҙур ярҙам. Мәҫәлән, әле Нефтекамала гәрәй башҡорттарының хәрәкәте шул тиклем киң ҡолас алды, уларға казактар ҡушылды. Казактар тарих менән ҡыҙыҡһына башлап, үҙҙәренең башҡорт икәнен асыҡлаған. Ул яҡта ҡайҙандыр Баймаҡ-Әбйәлилдән килгән түгел, ә урындағы, үҙ диалектында һөйләшкән йәштәр үҙҙәренең тарихы менән ҡыҙыҡһынып, ҙур хәрәкәт барлыҡҡа килтерҙе. Хәҙер унда "Гәрәй ере" тигән иҫтәлекле таш ҡуйырға ниәтләйҙәр. Был инде этник хаж урыны, рух урыны буласаҡ, сөнки урындағы башҡорттар үҙ территорияларын билдәләй башланы, күңелдәрендә аҫабалыҡ уянды. Аҫабалыҡ уянғас, ул кеше бер нисек тә тәбиғәтенә лә, теленә лә, башҡа нәмәләргә лә битараф була алмай. Аҫабалыҡ - бик ҡеүәтле тойғо! Был мәсьәләне бары тик ғалим этнологтар ғына күтәрә, әммә күп осраҡта йәмғиәттә һәм власта быны етди ҡабул итмәйҙәр. Шуны үҫтерергә, күберәк йәмәғәт ойошмалары булдырырға, халыҡтың әүҙемлеген арттырырға, уларҙы хупларға кәрәк. Уларҙың үҙ-ара горизонталь бәйләнеше - беҙҙең милли ҡеүәтебеҙ күрһәткесе.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

***✓ Уларҙа һуғышсы ҡомары уянды. Әлегә көсө һәм күләме билдәле лә булмаған дошманға ҡаршы күтәрелеүгә ҡорал һорап, директорға ябырылды ир-ат. Был ғауғаға табипҡа ла килеп ҡушылырға тура килде.***






Аҙаҡ, аяҡһыҙ булып ҡалғас, ул ғәрип ветерандарҙы махсус лагерҙарға оҙатыуҙарын ишетеп, үҙ ризалығы менән юлға сыға һәм әлеге Валаам утрауына килеп юлыға. Туғандарын эҙләмәй ул, был хәлендә берәүҙе лә борсорға ла, бимазаларҙа ла теләмәй. Оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан сәләмәтлеге ныҡлы, зиһене шәп, ҡолағы сос, күҙе үткер. Күп һөйләмәй, әммә әйтһә, һәр саҡ тураһын әйтә. Йомшартып, уратып тормай. Рамаҙан менән уларҙың ендәре килешә. "Һин минә оҡшағанһың", тип тә ебәрә ҡайһы саҡ ҡарт. Шулай тиеүе, йәнәһе, хуплауы. Ағас эшенә оҫта үҙе. Бер көн бер утын киҫәген ала ла, ике-өс көндән шул нәмәне әллә ни төрлө нағышлы әйбергә әйләндерә лә ҡуя. Ҡыҙҡырҡынды семәрле ҡумталы, кәштәле, һандыҡлы итеп бөттө инде. Василийҙың балаларына ниндәй генә уйынсыҡтар бүләк итмәне: айыуын да, атын да, ҡошон да һырлап бирҙе. Яңы тыуған һәр сабыйға тигәндәй бағышлап сәңгелдәктәр яһаны. Пансионатта бәпес көтөлгәнен ишеткән көндән бишек эшләүгә тотона ла, бер кем менән бер нәмә һөйләшмәй ултырып тамамлап, биҙәктәрен төшөрөп, тәтәйҙәрен тағып, бәхетле ғаиләнең ишек төбөнә һөйәп китә. Ә инде балаларҙың уны яратыуы! Алпан-толпан атлап йөрөгәне лә, ыштанһыҙ йүгергәне лә, ярайһы ултырып тыңларлыҡ аҡылға эйәләре лә ҡарт матростың янында. Ул урамда ла бер өйөр балалар урауында йөрөй, берәһен күтәреп, икенсеһен етәкләп, башҡаларын эйәртеп ала. Шуларға нимәләрҙер һөйләй, улары аңлаймы-юҡмы, ауыҙ асып тыңлаған булалар.

- Матрос олатай, мине лә күтәр!

- Матрос олатай, теге дейеүҙе тағы ла һөйлә!

- Ат эшләп күрһәт, Матрос олатай?

- Әйҙә, һыу буйына төшәйек, Матрос олатай!

Ҡарт уларҙың бер нәмәһенә лә "юҡ" тимәй, көмөрәйә башлаған дәү кәүҙәһен тубыҡтарына кейҙерелгән күн "тояҡтарында" еңел йөрөтөп, һәр теләктәрен ҡәнәғәтләндереп тора. Малайҙары ҡартты артыҡ йонсотҡандай булып китһә, Зинаида асыуланмай ғына уларҙы ороша:

- Олатайҙы арытаһығыҙ бит, малайҙар, етәрегеҙ, ҡайтығыҙ әйҙә.

Балалар бабайҙың "юҡ, арыманым" тип әйтеүен көтөп ауыҙына текәлеп китәләр. Быны белгән ҡарт көләмһөрәп юрамал өндәшмәй тора. Түҙемһеҙләнгән бәләкәстәр уның ҡулынан тарталар: йәнәһе, әйт беҙҙең әсәйгә, беҙ һине ялҡытмайбыҙ, юғиһә, хәҙер ҡыуып ҡайтара. Ҡарт яурындарын ғына һелкетеп көлөп ала ла, ҡул һелтәй:

- Бар, Зинаида, юлыңда бул, беҙҙең бында ирҙәрсә һөйләшеү.

Зинаға ла был ярҙам ҡулай, хәҙер уның баҡсаһы ла, ҡош-ҡорто ла бар. Пансионат ферма ла тота. Унда һауынға ла өлгөрөргә кәрәк. Ошондай мәшәҡәтле тормошта Матрос ҡатын-ҡыҙ өсөн Хоҙай бүләгеләй. "Бына нимә өсөн йәшәтә уны үҙе бармаҡ төртөп күрһәткән өҫтәге" тип уйлай шул саҡта Рамаҙан. Кешеләргә ҡыуаныс өләшһен өсөн.

## Алыш

Тау башындағылар күренеү менән һыҙғыртып сәләм бирә торған пароход үҙ ваҡытында үтеп китте китеүен, тик ни эшләптер аҙыҡ машиналары оҙаҡланы. Игнатьев та, ашхана мөдире лә ҡырҡ сығып әйләнде, улар алмаштилмәш булып офоҡто күҙәтте. Тик аҙыҡ ылауҙары килмәне лә килмәне. Ахырҙа, Федор Васильевич ике һаҡсы алып, арбалы матайҙа ҡаршы китте лә, бер сәғәт тигәндә әйләнеп тә килде. Килде лә лагерҙа "тревога" күтәрҙе. Тиҙ арала баҫыуҙа уңыш йыйғандар, мал, ҡош фермаларында эшләүселәр, оҫтаханаларҙа ултырғандар, йәғни йөрөй-ҡыбырлай алғандарҙың барыһы ла төп бина алдына йыйылды.

- Иптәштәр! - тип бик тулҡынланып һүҙ башланы Игнатьев, уның хатта ҡулдары ҡалтырай, асыуҙанмы, шаңҡыуҙанмы, аҫҡы ирене тартышып-тартышып китә лә, тотош йөҙөн ҡыйшайтҡандай итә ине. - Беҙҙә - ЧП! Аҙыҡ ылауҙарын талағандар! Талағандар ғына түгел, бөтөнләй ҡыуып алып киткәндәр!

Халыҡ ҡапыл ғына уянып китә алманы, улар өсөн дә был хәл бөтөнләй көтөлмәгәнсә булды, ахыры.

- Ярты юлда һөжүм ителгән, ҡорбандар ҙа булған, күрәһең, юлда ҡан эҙҙәре бар. Йөктәрҙе оҙата килгән һаҡсыларҙы юҡ иткәндәрҙер тип уйлайым, бәлки водителдәрҙе лә... Әммә бер ниндәй ҙә кәүҙәне тапманыҡ, ситкәрәк йәшереп китеүҙәре лә ихтимал. Быны шундай хәлдәр, туғандар.

Ниһайәт, халыҡ та телгә килде:

- Утрауҙа банда йөрөй тип ишетелгәйне шул, буш хәбәр булмаған икән.

- Күпме икәндәрен белергә ине...

- Айлыҡ аҙыҡтан яҙып булмай! Һәм улар беҙҙе бер ҡурҡытһа, артабан килеп тә баҫасаҡ!

Игнатьев тыныслыҡ талап итеп, ҡулын күтәрҙе:

- Дөрөҫ уйлайһығыҙ, иптәштәр! Беҙ хәҙер берәй сараһын күрмәһәк, улар шашасаҡ ҡына. Унан килеп, кәрәсин, он кеүек нәмәләр ике көнлөк кенә ҡалған. Ылауҙа ҡышҡы йылы кейемдәр ҙә, медикаменттар ҙа булырға тейеш...

Ҡатын-ҡыҙҙар ҡаушап төшһә лә, ир-егет ярһыны ғына:

- Ҡорал бирегеҙ, Федор Васильевич! Давай, ҡыҙыуында эҙләй сығайыҡ!

- Ярҙам килгәнен көтөп ултыра алмайбыҙ бит! Әйҙәгеҙ, утрауҙы тентеп сығайыҡ. Йөк машиналары юлһыҙ тау-таш араһында әллә ҡайҙа китә алмаҫ.

Федор Васильевич баш ҡаға-ҡаға тыңлап торҙо ла, тағы һүҙ алды:

- Иптәштәр! Иптәш, фронтовиктар! Кем ҡулына ҡорал ала ала, шуларҙы тағы бер тапҡыр ҡоралға тотонорға һәм үҙебеҙҙе яҡларға саҡырам! Дуҫтар, ил баҫып килгән фашисҡа бирешмәгән яугирҙар, яҙмыш ауырлығына бөгөлмәгән ҡаһармандар бит әле беҙ, әйҙәгеҙ, был юлы ла бирешмәйек - һатлыҡ йәндәрҙе тотоп, яуапҡа тарттырайыҡ!

* * *

Тыныс тормошҡа, хатта артыҡ хәсрәтһеҙ һәм сикләнгән йәшәйешкә күнегеп киткәндәр ҙә, хеҙмәт менән көн итеүселәр ҙә һәм хатта ашап-эсеп ятыуға ғына ҡулайлашҡандар ҙа кинәт ҡуҙғып, теремекләнеп китте. Уларҙа һуғышсы ҡомары уянды. Әлегә көсө һәм күләме билдәле лә булмаған дошманға ҡаршы күтәрелеүгә ҡорал һорап, директорға ябырылды ир-ат. Был ғауғаға табипҡа ла килеп ҡушылырға тура килде. Сөнки "һуғышсыларҙың" хәл-торошон унан яҡшы белгән кеше юҡ. Ул стройҙа тороусыларҙы "годен-не годен" тип аралап бүлеп сыҡты. Әммә "не годен" булғандар ҙа ҡоралландырылып, пансионат сиктәренә урынлаштырылып сығылды. Һаҡсылар уларға ашығыс рәүештә инструктаж үткәрҙе лә, ҡалғандар өс төркөмгә бүленеп, өс тарафҡа юл алды.

Рамаҙандар төркөмө ике сәләмәт һаҡсынан, бер ашнаҡсы һәм санитарҙан да, ете "танкистан" тора ине. Икенсе төркөмдө Игнатьев үҙе етәкләгән булһа, өсөнсө төркөм доктор Соломон ҡулы аҫтында сыҡты.

Беренсе көн алыҫ юл үтә алманылар, төштән һуң ғына сыҡҡайнылар, көҙгө көн йәһәт ҡараңғылатты ла ҡуйҙы. Ҡоро паек менән тамаҡ ялғағас, арҡаларына аҫҡан плащ-палаткаларын йәйеп ебәреп, йомшаҡ мүк, ҡарағай ылыҫы менән ҡапланған ергә тәгәрәшеп бөттөләр. Усаҡ тоҡандырыу ҡәтғи тыйылғайны. Ике сәғәт һайын һаҡты алмаштырып, һәр береһенә ял бирергә тырыштылар. Рамаҙан Матросты оло кеше булараҡ һаҡҡа ҡуймаҫҡа иткәйне лә, уныһы йоҡоһоҙлоҡҡа һылтанып ятманы ла тигәндәй. Хәленән килһә, был ҡартты ул бөтөнләй эйәртмәҫ тә ине, тик бында Баталға бойороҡ бирә алған әҙәм юҡ. Хатта Игнатьев та үтенес йә кәңәш менән генә мөрәжәғәт итә ала уға. Әлеге заданиеға ла ул рөхсәт көтөп тормай, биленә нисәнселер быуынынан ҡалған ҡомартҡыһын - семәрле хәнйәрен таҡты ла беренселәрҙән булып сафҡа баҫты. Директор менән доктор бер-береһенә ҡарашып ҡына ҡуя алды.

Таң яҡтырыр-яҡтырмаҫтан ҡуҙғалдылар. Йомшаҡ урындарҙа ауыр йөк тейәлгән машинаның бата-бата ынтылған урындары асыҡ күренә, ҡайһы ерҙәрҙә бөтөнләй ерҙән китмәгәндәй булып та ҡала. Эҙәрмәндәр күҙәтә торғас, был юлдан тик бер генә ылауҙың юлланыуын аңлап алды. Тимәк, эҙ яҙҙырыу өсөн ике машина ике йүнәлештә алып кителгән. Төшкө ашҡа туҡтағайнылар, алдан барған күҙәтеүселәр ашығышып боролоп килде.

- Беҙ торған тау аҫтында мәмерйә бар. Шул тәңгәлдә машина тора, тик кешеләре күренмәй, - тип хәбәр итте улар.

Аш ҡайғыһы китте. Һәр кем ҡоралын уңайлап тотоп, тауҙың ике битенән шыуышып төшә башланы. Ағастарға ышыҡлана-ышыҡлана машина эргәһенә лә килеп еттеләр, кузовты, кабинаны ҡаранылар - буш. Мәмерйәнең станаларына һыйынып, һаҡ ҡына эскә үтә башлағайнылар ғына, ҡапыл урман боролошонан йөк машинаһының икенсеһе килеп сыҡты ла, туп-тура былай елдерҙе. "Ятырға" тигән бойороҡтан барыһы ла ергә ауып, шыуышып йөрөп, уңайлы урындар һайланылар. Бына машина килеп тә туҡтаны, кабинаһынан һәм кузовынан унлаған ир-ат һикерешеп төштө. Уларҙың аяҡтары ергә тейер-теймәҫтән, мәмерйәләгеләр ут асты. Китте атыш. Ул арала тағы бойороҡ яңғыраны:

- Эстән киләләр! Арттағылар эстәгеләрҙе ҡаршыларға әҙерләнә!

Рамаҙан тоҡос кәүҙәһен йәһәт бороп, эстән шаптыр-шоптор йүгерешеп килгәндәрҙең яҡтыға сыҡҡанын көттө. Тыштағы атыш тауышын ишетеп, тәртипһеҙ һәм һаҡһыҙ сабышып килгән ирҙәр кәм тигәндә лә бер тиҫтәләп ине. Тәүге икәүһен автомат сираты менән аяҡтан йыҡҡайны, башҡалары ергә ятып, таш-тар артына ышыҡланып атышыуға күсте. Ике яҡтан ҡыҫымға алды банда. Баш күтәрер әмәлдәре ҡалманы.

- Сәпкә генә атырға! Бушҡа пуля әрәм итмәҫкә! - Һул яурынын ҡыҫып тотҡан һаҡсыларҙың береһе сытырайып команда бирә. Егеттең яраланғанын аңғарған Батал, шыуышып килеп, айырылышҡанда доктор кеҫәһенә тығып ебәргән бинт менән яурынбашын һыҡтырып бәйләп ҡуя.

Уртала ҡалғандарҙың һан яғынан да артыҡ түгеллеген һәм ҡоралдары ла һынаулы ғына икәнде аңлап алған банда вәкилдәре ҡыйыулана төштө. Улар аратирә атышты ла, артыҡ ҡабаланмаҫҡа булып, хатта тәмәке тоҡандырып, әңгәмәләшеп тә алырға булдылар.

- Эй! Фрайерҙар! Һеҙгә ҡорбандар кәрәкме? Кәрәкһә - булдырабыҙ! Кәрәкмәһә - килешәбеҙ, ә? - машина тәгәрмәсенә ышыҡланып ҡысҡырғандың тауышын, әлбиттә, барыһы ла таныны.

- Серый... - тип теш араһынан ыҫылданы Рамаҙан да.

- Йә, килешәбеҙме? Һеҙ беҙҙең менән ҡалаһығыҙ ҙа, табышты уртаҡ бүлешәбеҙ!

- Беҙ банда шакалдары менән килешмәйбеҙ! - Яралы һаҡсы барыһы өсөн яуапланы.

- Һин, сопляк, башҡалар өсөн хәл итмә. Һинең эшең хеҙмәт итеү, ике-өс йылдан әсәң ҡуйынына ҡайтып китәһең. Ә бындағы фронтовиктар улар минең кеүек ташландыҡ әҙәмдәр. Мин улар менән һөйләшәм!

- Фронтовиктар менән һөйләшкең киләме? Улайһа, әйҙә, сыҡ, икәүҙәникәү һөйләшәйек! - Рамаҙандың асыуы алҡымына килеп ҡалҡына ла башлағайны, эргәһендә ятҡан Батал ҡарт еңенән тартып, кире һалды.

- Ә-ә! Басурман! Һин дә бындамы? - Сергей ҡәнәғәт көлдө. -Бына, дуҫҡай, килеп ҡаптың!

- Һин миңә Антоша өсөн яуап бирәсәкһең әле!

- Бирермен-бирермен, ниндәй һорауҙарың бар, барыһына ла яуап бирермен. Беҙҙең ваҡыт күп, ашыҡҡан еребеҙ юҡ.

Тыштағылар яйлап тәмәке тартып алдылар ҙа, үҙ-ара мөңгөрләшеп, хәбәрләшеп алғас, Сергей тағы килешеп ҡарамаҡсы булды:

- Һинең һүҙеңде ишеттек, басурман, ә башҡалар нимә уйлай? Барыһының да үлгеһе килмәйҙер бит? Мин бына Батал ҡарттың аҡ башын күрәм. Сәләм-алейкум, хөрмәтлем! Һеҙ нимә тиерһегеҙ, аҡыллы кеше?

- Мин бит үҙ ҡанундарым менән йәшәгән уҙаман, Серый ҡустым, беләһең, - Батал да әңгәмәгә ҡушыла, тауышында асыуҙың әҫәре лә юҡ. - Мин тыуып үҫкән яҡта барыҫтар менән шакалдар бер өйөрҙә йөрөмәй. Барыҫ хатта ҡартайып, һунар итә алмай башлағанда ла шакалдар ҡалдығын ауыҙ итмәй. Ул иң бейек түбәләргә үрмәләп менеп, шунда ғорур ятып үлә. Һин, ҡалдыҡ-боҫтоҡ менән мөрхәтһенеп өйрәнгән йән, бындайҙы, бәлки, ишеткәнең дә юҡтыр?

- Шулай икә-ән... - Серый ҡайғырған булып ҡыланды. - Мин һеҙҙе берәҙәк ғәрип ҡарт тип кенә күрһәм, һеҙ, әләйһәң, тау барыҫы икән дә, - уның ғыжғылдап көлгәненә башҡалары ҡушылды.

**(Дауамы бар).**

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...



# БӘХӘСТӘН БӘХЕТ ТЫУАМЫ?

**Тыуҡһан туғыҙ йортло ҙур ғына ауылда бик бәхетле кешеләр йәшәгән. Берeһенән-береһе матурыраҡ, зауыҡ менән биҙәлгән өйҙәрҙә йәшәгән улар. Һәр хужалыҡты гүзәл баҡсалар уратып алған. Ауылдаштар йыл әйләнәһенә емеш-еләктән, йәшелсәнән өҙөлмәгән. Яҙҙарҙы дәртләнеп ҡаршы алғандар, йәйҙәрҙе көндәлек хеҙмәт менән күңелле үткәргәндәр. Байрамдарҙа уйнап-көлөп, йырлап-бейеп күңел асҡандар. Көҙ мул уңыш йыйғандар ҙа, ҡышҡыһын рәхәтләнеп ял иткәндәр. Ерҙә йәшәһәләр ҙә, күккә бағып, йондоҙҙарға ҡарап өмөтләнгәндәр, йәшәйеш тураһында уйланғандар, киләсәккә ышаныс менән ҡарағандар, кейеҙ-келәмдәргә йыһан есемдәрен биҙәк итеп төшөргәндәр.**

Өс йылға бер тапҡыр июль айында ауыл кешеләре йәшәгән урындарынан йыраҡ булмаған яланда ҡорға йыйыла торған булған. Өс йылға бер тапҡыр кешеләр Аллаһы Тәғәлә тауышын ишеткән һәм үҙ һорауҙарына яуап алған. Маңлай күҙҙәре менән күрмәһәләр ҙә, кешеләр күңелдәре менән эргәләренә килгән Хоҙайҙы тойғандар. Һәр кем ошо мәлдә киләсәккә уй-хыялдар ҡорған, Хаҡ Тәғәлә менән кәңәшләшкән. Мөғәмәлә төрлө кимәлдә барған: бөрөүҙәр тәрән уй-фекергә сумған, икенселәр ябай ғына донъяуи кимәлдә аралашҡан, өсөнсөләрҙең мөғәмәләһе уйын-көлкөгә ҡоролған.

Мәсәлән, берәү ошондай һорау биргән:

- Хоҙайым, нинә һин бөгөн беҙҙе ямғыр һыуына ҡойондорҙоң? Иртә менән лысма һыу иттең дә, төшкә ҡарай ғына ҡояш йылыһын өләштең. Әллә үҙең төшкә тиклем йоҡондан уянманыңмы, әллә беҙҙең байрам майҙанына йыйылғанды көтөп торҙоңмо?

- Юҡсы, - тип яуап бирә Хоҙай. - Мин иртә таңдан уҡ байрамығыҙ күңелле үтһен өсөн хәстәрлек күрҙем. Арағыҙҙа иртәнге тәһәрәт алырға йыбанғандар бар. Улар байрам йәмен ебәрмәһен, тинем дә, бөтәгеҙҙе лә бер юлы ҡойондорҙом. Әле бына таҙарынып кибендегеҙ.

- Улайһа, бик шәп иткәнһең, - тип ризалаша һорау биргән кеше.

Сәстәренә сал төшкән олпат ир бөтөнләй икенсе төрлө һорау бирә:

- Хоҙайым, әйт әле минә, йыһандағы йондоҙҙарҙың мәңгелек тәртибе ни аңлата? Ерҙәге тормоштан биҙһәм, үҙем һайлаған йондоҙға ғаиләм менән күсенеп бара аламмы?

- Йондоҙҙар һеҙгә йыһан тураһында мәғлүмәт бирә. Ерҙәге ығы-зығынан арынып, күңел тыныслығына өлгәшә алһағыҙ, йондоҙло китап һеҙгә үҙ серҙәрен асыр. Әммә бының өсөн тән таҙалығы ғына етмәй, күңел сафлығы мөһим. Йыһан сикһеҙ - һайла, әйҙә, үҙенә оҡшаған планетаны. Тик бының өсөн бер генә шартты үтәргә кәрәк: йондоҙҙағы ғүмерең, ерҙәге тормошоң менән сағыштырғанда, тик ижад менән генә һуғарылһын.

Шулай күңелле йәшәгән был ауыл халҡы.

Көндәрҙән бер көндө был ауылға бер ыңғайҙан йөҙ аҡыл эйәһе килгән. Киң күңелле ауылдаштар ят кешеләрҙе бик ҡунаҡсыл ҡаршы алған, һый-хөрмәт күрһәткән. Ындай муллыҡты күреп, хакимдәрҙең иҫе киткән. Уларҙың береһе былай тип һүҙ башлаған:

- О, кешеләр, һеҙ бик матур йәшәйһегеҙ. Әммә тормошоғоҙ үтә талғын, бер тигеҙ үтә. Һәр бер көн ҡот ҡунып, етеш йәшәһәгеҙ ҙә, Аллаһы Тәғәлә менән дөрөҫ һөйләшә белмәйһегеҙ, һеҙгә тәрбиәлелек етешмәй. Шуға күрә һеҙ Илаһи көскә дан йырлап тыбына белмәйһегеҙ.

- Юҡсы, бер ҙә улай түгел, - тип, ауылдаштар борсола башлаған. - Аллаһ менән беҙ өс йылға бер тапҡыр тиң күреп аралашабыҙ. Уны күрмәһәк тә, һәр иртәлә Ул беҙгә ҡояш булып балҡый, бал ҡорто булып бал йыя, ҡышҡы һалҡындарҙа ерҙе аҡ шәл менән ҡаплай. Ул һәр саҡ эргәбеҙҙә, беҙгә тәбиғәттең һәр миҙгеле ҡәҙерле.

- Юҡ, һеҙҙә эштәр дөрөҫ ойошторолмаған, - тигән аҡыл эйәләре. - Беҙ һеҙҙе Аллаһ менән аралашырға өйрәтергә килдек. Бөтә Ер шары буйлап ғибәҙәтханалар, матур-матур ҡорамдар төҙәлә. Был изге урындарҙа кешеләр Аллаһ менән көн дә һөйләшә ала. Беҙ һеҙҙе лә өйрәтәсәкбеҙ.

Өс йыл дауамында ауыл кешеләре аҡыл эйәләренең һүҙҙәрен диҡҡәт менән тыңлаған. Һәр хәкимдең үҙенә хас ҡарашы, үҙ теләге булған: берәүҙәре ҡорамды нисегерәк эшләү тураһында аҡыл һатҡан, икенселәре ғибәҙәт ҡылыу тәртибе тураһында һөйләгән - һәр кем үҙ яғына ҡайырған. Ауылдаштарҙың ҡайһы аҡыл эйәһен һайларға белмәй баштары ҡатҡан. Етмәһә, улар сит кешеләрҙе рәнйетеүҙән ҡурҡҡан. Шуға күрә һәр өйҙә, һәр аҡыл эйәһен тыңлап, ҡорамдар төҙөргә булғандар. Тик ауылда туҡһан туғыҙ йорт булһа, аҡыл эйәләре йөҙ булған. Был яңы ауыл кешеләренең ҡарарын ишетеп, аҡыл эйәләре хафалана башлаған. Нисек инде улай, тимәк, бер аҡыл эйәһенә ҡорам етмәйәсәк, ул хөр-сәзаҡаһыҙ ҡаласаҡ бит? Килмешәктәр кемдең теорияһы иң хаҡ икәнен иҫбатлап, бәхәсләшә башлаған. Яйлап был бәхәскә ауыл кешеләре лә ҡушылған. Бәхәс шул тиклем көслө булған: ауылдаштар өс йылдан һуң яланға ҡорға йыйылыу тураһында ла онотҡандар хатта!

Тағы өс йыл үткән. Ауыл тирәләй туҡһан туғыҙ мөһабәт ҡорам ҡалҡып сыҡҡан. Улар эргәһендә кешеләрҙең элекке өйҙәре йәмһеҙ һәм шөкәтһеҙ булып күренгән. Кешеләр емеш-еләкте, йәшелсәләрҙе лә ҡарамаған, баҫыуҙар ташландыҡ хәлгә ҡалған, баҡсалар ҡороған.

Һәр аҡыл эйәһе үҙ ҡорамына бикләнеп, кешеләргә аҡыл һатҡан: "Һеҙ әле тулыһынса иманға килмәгәнһегеҙ. Хәйерсаҙаҡаны күберәк алып килегеҙ, көнөтөнө табыныгыҙ".

Ҡорамһыҙ тороп ҡалған йөҙөнсө аҡыл эйәһе иһә йәшертен үҙ эшен алып барған. "Ғибәҙәтхана улай төҙөлмәй, табынғанда ла икенсе һүҙҙәр ҡулланырға кәрәк. Аллаһ менән нисек көн һайын һөйләшергә икәнен бер мин генә беләм", - тип өгөтләгән ул.

Әгәр ҙә ауылдаштарҙың береһе уның өгөт-нәсихәтенә инанһа, ауыл эргәһендә яңы ҡорам төҙөлгән, элекке ташландыҡ хәлгә дусар булған. Хәҙер инде ҡорамһыҙ тороп ҡалған икенсе аҡыл эйәһе халыҡты үҙ яғына ауҙарырға тырышҡан. Шулай бик күп йылдар уҙған.

Көндәрҙән бер көндө ауылдаштар өс йылға бер йыйылған элекке ҡорҙо иҫтәренә төшөргән. Аллаһ тауышын тағы үҙҙәренсә ишеткеләре килгән. Ауыл эргәһендәге яланға йыйылғас та, улар күмәкләп яуап таба алмаған һорауҙарын биргән: "Аллаһы Тәғәлә, әйтсе беҙгә, ни өсөн беҙҙең баҡсаларҙы ҡорт баҫты? Ни өсөн беҙ элеккеләй йыл да мул уңыш йыймайбыҙ? Ни өсөн кешеләр бер-береһе менән бәхәсләшеүҙән бушамай? Ни өсөн беҙ, күпме генә ыҙғышһаҡ та, үҙ иманыбыҙға ҡайта алмайбыҙ? Беҙ күпләп төҙөгән ҡорамдарҙың ҡайһыныһында йәшәйһең Һин"?

Кешеләр яуапты оҙаҡ көткән. Күктән был юлы күңелһеҙ, арыған тауыш ишетелгән:

- Эй, кешеләрем, мин һеҙҙе берҙәм итеп яраттым. Һеҙ берҙәм булғанда ғына илаһи хыялға ирешеп була. Ә һеҙ һәр берегеҙ, үҙ аллаһын эҙләп, айырым ҡорамдарға бикләндегеҙ. Ҡәҙерле балаларым, әйтегеҙсе, мин ҡайһы ҡорамда булырға тейеш? Бөтәгеҙҙе лә тиң күргәс, берегеҙҙе лә рәнйетмәҫ өсөн ҡайны ҡорамды һайлайым? Һөйөү менән һайлау ирке һеҙҙең һәр берегеҙҙән үҙендә. Берҙәм ҡарарға килһәгеҙ генә хыялығыҙ тормошҡа ашыр...

Шулай тигән дә тауыш шымған. Ҡасандыр гөл-сәскәгә күмелгән ауылда йәшәгән кешеләр иһә бөгөнгәсә бәхәсләшә. Өйҙәре емерек, баҡсалары ташландыҡ хәлдә. Ҡорамдар бейегәйгән һайын бәхәс тә ҡыҙа бара...

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Был кинәйәлә кемдәр һүрәтләнә, аңғарҙығыҙмы? Шулай шул. Ҡорамдарыбыҙ бейегәйә, ас-яланғас түгелбеҙ, тамағыбыҙ туҡ - ә беҙ һаман бәхәсләшәбеҙ, зарланабыҙ. Шөкөр итеү тигәнде бөтөнләй оноттоҡ. Былай барһа, бер көн килеп ысынлап та емерек ҡорамдарға, ярыҡ ялғашҡа ҡалмаҫмы икән көнөбөҙ?**

Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.

БАЛАҢА УҠЫ!

# НИ ӨСӨН УРАЛ ТИП ЙӨРӨТӨЛӘ?

Башҡорттар бик-бик күп ерҙәр билә йәшәгән. Тау башҡорттары тип тә, ялан башҡорттары тип тә аталған улар. Өҫтәүенә, төрлө-төрлө ырыуҙарҙан тупланғандар. Һәр ырыу үҙенең өҫтөнлөгө өсөн сәмләшкән. Оло бәхәстәр ғауғаға саҡлы барып еткән. Бер саҡ төрлө ырыу аҡһаҡалдары йыйылған да:

- Ырыу башҡа булһа ла, бауыр бер бит. Янъяллашыуҙы туҡтатыу кәрәк. Былай бер-беребеҙҙе ҡырып бөтөүебеҙ ихтимал, - тип ҡарар ҡылғандар ҙа яугирҙарға мөрәжәғәт иткәндәр. Улары һөнгөләрен ергә сәнсеп, һөйләүсене ауыҙы менән йоторҙай булып тыңлаған, ти. Ҡайһылары ауыҙына үлән ҡабып, башын түбән эйеп уйланған, ти. Кәңәш-төңәш итеп, берләшергә булғандар. Берләшкәс, башҡортлоҡтоң билдәһе булған уртаҡ төйәк исеме лә кәрәк бит.

Тарауыл аҡланына йыйынға килгәндәр былар. Башҡорт ерен уртаҡ атама менән Урал тип кенә йөрөтөргә тәҡдим иткәндәр. Ялан башҡорттары ҡапылғара урманлы, ҡаялы Уралды ҡабул итә алмаған. Шуға ла уртаҡ төйәк атамаһын Урал тип атауға ҡырҡа ҡаршы булғандар.

- Урал тигән даны булһа ла, маҡтар урыны аҙ. Ҡуй-һарыҡтың быуыусы буре төйәге, сәскә үбеп бал йыйған, илен бал менән туйындырған бал ҡортон ҡырым-сиреү килтереүсе айыуы күп. Ҡар һыуында сәскә атҡан, яҙ төҫө булып балҡыған умырзая сәскәһен йылы ҡояшҡа ҡотайтмай ышыҡлап торған һалҡын тау бит. Дөйәгә йәндәй аш булған юшаны юҡ, әсеһерәгән малына татыры юҡ. Ҡош ҡустәре төшөрләк мөлдөрәп торған алдырҙай, ҡарасәй ҡаҙҙар түл йәйгән, һаҙмыттарын һылыулап екән, ҡуға ураған, Заятүләккә йәр булған Һыуһылыуын үҫтергән Асылыҡүлдәй күле юҡ. Шыпшыр урман Уралтау, - тигән ялан башҡорттары.

Тау башҡорттары Уралды маҡтап үҙ дәлилен килтергән.

- Илде туфандай ҡаплағанҡара һыуҙан эрсегән, бар тереклекте һыу аҫтында зар илатҡан Шүлгәнгә яу аҫҡан Урал батырҙың буйлап үткән һуҡмағы бит ул Уралтау. Иҙел, Нөгөш, Йайыҡ, Үҙән, Эйек, Ҡаҫмарт йылғаларын барын бергә ағыҙып, әсәләй һуғарып ил иткән Уралтау бит ул. Урал - илгә әсә ул, Урал - илгә ата ул. Атай атай булмаһа, батырға өлгә булырмы, әсәй әсәй булмаһа, һылыуға әсәй булырмы? - тигәс, Уралды - төйәк, ялан ерҙе йәйләү итергә һүҙ ҡуйышып таралышҡандар, ти. Бергә йыйылып, "Ете ырыу" тигән йыр йырлағандар ҙа аҙаҡ уны Урал тип атағандар. Ошонан һуң сәсәндәр бар башҡорт илен данлаған ҡобайырҙарҙы Уралға бәйләп әйтер булған.

ИНТЕРНЕТТАН



# РИЗЫҒЫҢ...

## һаулығың

■ Электрон тәмәкенең зыяны юҡ тип уйлаусылар хаталана, унда ла никотин бар. Ә никотин үпкәләргә тәбиғи рәүештә лайланан таҙарынырға ирек бирмәй, киреһенсә, лайланы ҡуйырта. Канзас университетының медицина үҙәге үткәргән тикшеренеүҙәр ошоно күрһәтә. Электрон сигареттың быуын һулағанда организмға никотин күберәк тә инә. Ябай тәмәкенең никотины шунда уҡ ҡанға эләгә, ә электрон тәмәкенеке үпкәләргә ултыра. Тимәк, бронхылар төрлө инфекцияларға бирешеп бара. Ә лайла йыйылыуы күп кенә ауырыуҙарға, шул иҫәптән хроник астма, ҡурылдай, муковисцидозға килтерә, тын алыуы ауырлаша, йүтәл барлыҡҡа килә. Был бигерәк тә йәштәрҙең сәләмәтлеге өсөн зыянлы.

■ Аризона университеты ғалимдары билдәләүенсә, насар йоҡо менән юғары ҡан баҫымы араһында бәйләнеш бар. Йоҡоһо яҡшы булғандарҙың ҡан баҫымы юғары булмай. Экспериментта 300 кеше ҡатнашҡан, уларҙың уртаса йәше - 45, ә иң олоһона 70 йәш булған. Улар 45 минут һайын ҡан баҫымын тикшереп торған ҡоролманан тыш, төнгө йоҡоноң сифатын тикшерә торғанын да таҡҡандар. Кемдәр насар йоҡлаған, шуларҙың иртән ҡан баҫымы юғары булған. Бынан ғалимдар ошондай һығымта яһаған: 7-9 сәғәт йоҡларға һәм төнгө 11-ҙән һуңға ҡалмай йоҡларға ятырға кәрәк икән. Барлыҡ ут сығанаҡтарын һүндереп, тулы ҡараңғылыҡта йоҡлау яҡшыраҡ. Былар барыһы ла мелатонин гормоны бүленеп сығыуға булышлыҡ итә.

■ "Сәләмәт туҡланыу" милли тикшеренеү үҙәге иртәнге аш һоло бутҡаһынан торһон, тигән кәңәш бирә. Файҙалы ла, оҙаҡ ваҡыт асыҡтырмай ҙа, сөнки составында бета-глюкан тигән матдәләр бар. Әммә һоло бутҡаһын дөрөҫ - шәкәрһеҙ һәм тиҙ генә бешерергә кәрәк. Бутҡаға үҫемлек майы һалып ашау иң дөрөҫө. Магазинда һатылған пакеттарҙағы әҙер бутҡалар файҙа килтермәй. Ғөмүмән, бутҡаларҙың барыһы ла яҡшы, бары тик манный менән тары ярмаһы ғына исемлектең иң аҙағында. Уларҙың гликемик индексы юғары, тимәк, ҡанда ҡапыл шәкәр күтәрелеүенә килтерә. Һимереү менән яфаланыусыларға груша менән алма ла ярҙамға килә. Банан, йөҙөм, ҡауын составында шәкәр күп булыуы менән айырылып тора, шуға уларҙы ашау тыйыла. Тәүлегенә бер тапҡыр 1 йомортҡа ашау ҙа тән ауырлығын арттырмаясаҡ, иртәнге аш йомортҡа өсөн иң ҡулайлы мәл.

■ Лондрина университеты ғалимдары үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, мүк еләге һуты быуындары һыҙлаған ҡатын-ҡыҙҙарға шифалы. Ревматоидлы артрит менән сирләүселәргә көнөнә ярты литр мүк еләге һуты эсергә кәңәш ителә. Өс ай буйына эскәндән һуң быуындарҙы зарарлаусы антиесемдәр күләмен кәметергә мөмкин. Һүҙ anti-CCP антиесемдәре тураһында бара. Уларҙы гиперактив иммун системаһы етештерә. Тап ошо антиесемдәр күләменә ҡарап, табиптар артрит тураһында дагноз ҡуя. Эксперимент күрһәтеүенсә, мүк еләген гел эсеү артриттың билдәләрен - аяҡ-ҡулдарҙың быуындары шешен кәметә. Мүк еләгендәге антиоксиданттар был билдәләрҙе булдырыусы аутоиммун реакцияһын йәйлатә.

ҠОРОЛТАЙ АУАЗЫ

# БЕҘ МӘҢГЕГӘ КИЛГӘН ХАЛЫҠБЫҘ

***Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай КӘРИМдең II Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайындағы сығышы:***

- Бынау йәшемә еткәндә ошондай күркәм мәжлестә ҡатнашыу шатлығынан рәхәтлек кисерәм. Халҡыбыҙҙың оло байрамын, уның делегаттарын һәм йыраҡ араларҙы яҡын итеп килгән ҡәҙерле ҡунаҡтарыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайым. Телмәремде мин хәүефтәрҙән арына алмаған, көйһөҙ йылдарҙа онотола килгән, телдән төшә барған бер һүҙҙән башлар инем - ул "бәхет" тигән һүҙ. Тәңре үҙеме, әллә яҙмыш ихтыярымы, беҙҙең халҡыбыҙға Ер шарының хазиналы, иң гүзәл илаһи төбәгенән мул итеп өләш сығарған. Был бәхет түгелме ни? Иркен яландарыбыҙҙың, күркәм тауҙарыбыҙҙың, ағын һыуҙарыбыҙҙың, ҡалын урмандарыбыҙҙың игелеген күреп, ҡәҙерен белеп йәшәргә лә йәшәргә беҙгә. Меңәр йыл эсендә тауҙар ишелгән, мәмләкәттәр ҡыйралған, ҡалалар һүнгән, ҡәбиләләр тарих юлдарында аҙашып юғалған. Ошо араларҙы үтеп, беҙҙең халҡыбыҙ үҙен генә түгел, хәр рухын, сәсән телен, моңло йырын, милли әҙәбен, милли иманын һаҡлап ҡалған. Бөгөнгө Ҡоролтай минең өсөн тәҡдиребеҙҙең, тынмаҫ йырыбыҙҙың дауамы булып яңғырай. Был бәхет түгелме ни?

Замандарҙың болалы мәлендә дүрт ярым быуат әүәл тарихи зарурлыҡ беҙҙең боронғо бабаларыбыҙҙы Рәсәй менән ҡауыштырған. Тамырҙарҙы тамырҙарға бәйләгән. Улар ышаныслы ҡанат аҫтына һыйындырып, милләт бөтөнләгән, уның именлеген ҡурсалап ҡалғандар. Был ерҙә йөҙәр йыл буйына милләт-ара татыулыҡ хөкөм һөрә. Бөгөнгө йыйынныбыҙҙа ҡатнашҡан төрлө халыҡ вәкилдәре, ҡәҙерле ҡунаҡтарыбыҙ, минең инаныуымса, беҙгә хөрмәт күрһәтеп, беҙҙе яратып килгәндәр. Был бәхет түгелме ни?

Бөйөк Октябрь революцияһы беҙҙең милли дәүләтебеҙҙең нигеҙен һалырға, уны артабан төҙөргә форсат бирҙе, һүнә башлаған рухыбыҙ яҡтырып, балҡып китте. Саф башҡорт телендәге китапты тәү тапҡыр ҡулыбыҙға алдыҡ. Мәғрифәт, фән, әҙәбиәт, сәнғәт бейеклектәренә юл ярҙыҡ, донъяны тәрәнерәк танып белеүгә ирештек. Донъя беҙҙе ныҒыраҡ, яҡыныраҡ таныны. Был бәхет түгелме ни?

Шулай ҙа мин үҙ-үҙемдән: "Һиненсә, бөтәһе лә ал да гөл булған, ал да гөлмө ни?" - тип һорайым. Үҙем үк яуап бирәм, юҡ, улай уйламайым, әммә минең рухым аяҙ. Унда яман, яуыз хәтергә урын бирмәйем. Мин асылда изге хәтер, яҡты өмөт менән йәшәйем. Сөнки минең эскерһеҙ, кенәһеҙ халҡым, тыуған республикам шулай йәшәй.

Уҙғандар менән бәхәсләшеү, үткәндәр арҡаһында үпкәләшеү буш эш ул. Буш ҡына түгел, зыянлы эш. Ә бөгөнгө тураһында борсолоуҙарым бар. Ҙур булмаған шундай халыҡ оҙон юлдарҙа юғалмайса, батырҙарса йәшәй алыуының сәбәбен уйлайым да, ошондай нәтижәгә киләм. Ул үҙенең тән һәм рух сәләмәтлеген һаҡлаған, тыуған тупрағына булған мөхәббәтен һаҡлаған. Бындай халыҡ үлемһеҙ булырға яратылған. Бөгөнгө көндә мине милләттең тән сырхауы ла, йән сырхауы ла, ер-һыуға ҡарата уның битарафлығы ла, сарфатһыҙлығы ла, рухи вайымһыҙлығы ла хафаларға һала. Был сирҙәребеҙ хаҡында һеҙ бөтәгеҙ ҙә беләһегеҙ. Хәлебеҙҙең хәүефле икәнен берберебеҙгә аңлатып өгөтләшергә ваҡыт тар. Был йәһәттән аҡыллы указдар, ҡаты фармандар кәсһөҙ. Аңыбыҙға килеп, һәр беребеҙ үҙ-үҙенә иман килтереү сәғәте һуҡты. Бар мөлкәтте, бар дәрәжәне, бар намыҫты, бар азатлыҡты юғалтыуҙан кеше һәр ваҡыт ҡурҡырға тейеш. Юғарыла әйтелгән оло бәхетебеҙҙе юғалтыуҙан ҡурҡайыҡ, ҡан ҡәрҙәштәрем! Ҡурҡайыҡ, барса тупраҡташтарым! Үҙебеҙҙе, балаларыбыҙҙы, уларҙың балаларын янап торған заман сирҙәренән ҡотҡарайыҡ! Беҙ мәңгегә килгән халыҡбыҙ. Нимә генә тимәйек, беҙ кәбеһенсә милләткә ышыҡланып, милләткә таянып йәшәйбеҙ. Ә бит асылда һәр башҡорт, мин милләттең ҡеүәтен, абруйын һаҡлайым, мин уның ышанысы һәм таянысымын, мин суверенлы Башҡортостандың ышанысы һәм таянысымын, мин бөйөк Рәсәйҙең ышанысы һәм таянысымын, тип үҙен раҫларға тейеш. Ә таяныс сәләмәт, таҙа, ҡаҡшамаҫлыҡ булырға тейеш. Милли идеяны мин һәр шәхестең милләт алдында һәм милләт өсөн яуаплылығында күрәм.

# ҠАНАТЛЫ АҠБУҘАТТАЙ ТАЛПЫНҺЫН!

***Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил БИКБАЕВтың I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайындағы сығышы:***

- Донъялағы бөтә һәйбәт эштәр иң элек изге ниәттән, яҡшы һүҙҙән башлана, - тине Рауил Төхвәт улы Бикбаев. - Ләкин һүҙ эшкә әйләнмәһә, уның ҡиммәте бер тингә лә тормай. Үҙаллылыҡ, Башҡортостандың суверенитеты тигән һүҙҙәр 80-се йылдар аҙағында, 90-сы йылдар башында күпме кешеләрҙең йөрәгендә ут тоҡандырҙы. Әгәр ҙә ул һүҙҙәр һүҙ генә булып ҡалһа, Башҡортостаныбыҙҙың бөгөнгө хәле нисегерәк булыр ине икән? Кешеләргә яҙыусы барыһынан элек үҙенең һүҙе менән, яҙған әҫәрҙәре, баҫылып сыҡҡан китаптары менән барып етә. Бөгөн үҙәктән килгән мәкерле сәйәсәт, ялған демократтарҙың тырышлығы кешеләрҙе нисек тә бер-берелһенән айырыурға, милләттәрҙе араалаштырмауға ҡоролған. Яҙыусы һүҙе уға һәр ваҡыт милләтте берләштереүсе көс булды. Бөгөнгө болғауыр заманда бигерәк тә.

Эйе, ауырлыҡтарыбыҙ етерлек, яуаплылыҡ гәйәт ҙур, алда торған эштәребеҙ тау хәтле, ҡайҙа ҡарама, йөрәк һыҙландырғыс хәлдәр. Элек унар бала тәрбиәләгән башҡорт ир-егеттәренең ейәндәре бөгөн ауылдарҙа өйөрө менән өйләнә алмай шаңғып йөрөй. Был ни ғәләмәт, был ни фажиғә? Элек бер ауылдан ун ауыл таралып ултырып, ырыу-ырыу үрсегән башҡорттоң бөгөн ауылдары бөтә, ауылдары ҡорой. Элек каторгаларҙан, бығауҙарын ташҡа бәреп, ауыр юлдарҙа ҡанһырап, өйөнә атлыҡҡан башҡорт бөгөн килеп иленән ҡаса, иленән тарала. Элек мәшһүр моно менән хайран ҡалдырған, алыҫ ерҙәрҙе әсир иткән башҡорт бөгөн килеп үҙ теленән, үҙ моңонан биҙә. Һөргөндәргә һөрөләп, каторгаларға ҡыуылып, төрмәләргә бикләнеп тә үҙ рухын һаҡлап алып ҡала алған, нисәмә йылдар ғорурлығын юймаған милләтем хәҙер араҡы шешәләренә бикләнеп тонсоғормо? Ил, халыҡ тип баш ватыр заманда, башҡортом, баш тәҙәтәм тип, башын юғалтырмы? Элек Башҡортостан азатлығы тип, туҡтауһыҙ яуға күтәрелгән батырҙарыбыҙҙы батша палачтары дар ағастарына аҫҡандар. Бөгөн ил ҡалҡаны, ил тотҡаһы булаһы ирҙәр үҙҙәрен үҙҙәре аҫа. Был ни ғәләмәт, был ни фажиғә? Халыҡта, өмөтһөҙ - шайтан, тигән һүҙ бар. Күп кешенең күңеле һүрелгән, ҡиблалар буталған, аяттар юғалған бөгөнгө заманда был һүҙ айырыуса йыш хәтергә килә. Кисәге йондоҙҙар бөгөн юҡ. Нисәмә быуын өсөн изге булған ҡыҙыл йондоҙҙо бер башы мәғрипте, бер башы мәшриҡты соҡорға торған ҡарағош бәреп төшөрҙө. Нисәмә быуын башҡорт батырҙарының йөрәк пәрҙәһен йыртып, башҡорт милләтенең ҡанын эскән, әллә тағы күпме милләттәрҙең ҡүҙен соҡорға тырышҡан яуыз ҡарағош тағы ла ҡанатын йәймәксе. Бына ошондай ҡыйралыш заманында бигерәк тә йәштәребеҙҙең өмөтһөҙ шайтандарға әйләнеүенән ҡурҡам мин. Күнелебеҙҙә, зинһар, ышаныс һүнмәһен ине. Мин буш боғазланып, күкрәк һуғырға саҡырмайым, ләкин үҙебеҙҙе үҙебеҙ бөтөрөп, кәмһетеп ҡуймайыҡ. Мәсхәрәләргә маташыусы мөртәттәр былай ҙа табылыр, етерлек табылып тора. Кем булыуыбыҙҙы онотмайыҡ, ҡайҙан килеп, ҡайҙа барыуыбыҙҙы күрә беләйек. Тарихи хәтеребеҙҙе юғалтмайыҡ. Халыҡ әллә ни тиклем бөйөк булһа ла, ул ниндәйҙер дөйөм төшөнсә генә түгел. Халыҡ ул бит беҙҙән, тере кешеләрҙән тора. Халыҡтың йөҙөн һәм рухи көсөн ундағы кешеләрҙең нисә мең йәки нисә миллион булыуы ғына билдәләмәй, милләттең көсө шәхестәрҙең күп булыуынан тора. Ғорур булайыҡ, сабыр булайыҡ. Әгәр һәр кем үҙ эшен намыҫ менән башҡарһа, әгәр барыбыҙ ҙа берҙәм булып ойошоп, тупланып, оло маҡсаттарыбыҙға тоғро хеҙмәт итһәк, телебеҙгә дәүләт теле статусы бирһәк, аҫаба ерҙәребеҙҙе алыпһатарҙарҙың йыртҡыс ҡулынан мәңгелеккә сикләп ҡуйһаҡ, беҙ халыҡ тигән бөйөк һүҙҙе, йөҙөбөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәйенсә, әйтә аласаҡбыҙ. Ожмах кеүек Башҡортостаныбыҙҙы Аллаһы Тәғәлә беҙгә бүләк итеп кенә бирмәгән, бәлки беҙҙе милләт булараҡ һынар өсөн ошо йәннәт ерҙә йәшәргә насип иткәндер. Был ерҙе атайолатайҙарыбыҙ хәләл көсөн, әсе тирен түгеп һаҡлап ҡалған. Улар һынатмағанды беҙ һынатырбыҙмы? Милләттәштәребеҙҙең тараңыу, ситкә һибелеүе беҙҙең ихтыярҙан ғына торманы. Ә бына бөгөн янынан тупланыу, башҡорт халҡының рухи яңырыуы - беҙҙең ихтыярҙа, беҙҙең уңғанлыкта, беҙҙең тырышлыкта, беҙҙең тоғролоҡта. Уҙған дандарыбыҙ менән ғорурланып йәшәйек, ләкин бөгөнгөбөҙ менән хурланып ҡына йәшәмәйек, башҡаларҙы ғына ғәйепләмәйек, һәр беребеҙ үҙебеҙҙе үҙебеҙ нығыраҡ барлайыҡ. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы символы итеп ниндәй матур һын - халҡыбыҙҙың изге ҡанатлы аҡбуҙаты һайланған. Ир-егеттең күңелендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр, тиҙәр беҙҙә, һәр беребеҙҙең күңелендә ҡанатлы аҡбуҙат талпынһын, ғәзиз милләттәштәрем.

МИЛЛӘТ ҠОР ЙЫЯ

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайҙарында күтәрелгән милләтебеҙ проблемалары, ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы тормошҡа ашырыу мәсьәләләре ниндәйҙер кимәлдә "Киске Өфө" гәзите биттәрендә сағылыш таба килә. Һеҙҙең иғтибарға гәзиттең "Диалог", "Монолог", "Түңәрәк ҡор" рубрикаларында баҫыла килгән милләтебеҙ тарихы, бөгөнгөһө һәм киләсәге, рухи булмышы, менталитеты хаҡындағы фекерҙәрҙән өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ.**

# ТАМЫРҘАРЫБЫҘҘАН АЙЫРЫЛМАЙЫҠ!

***Наил ЮЛДАШБАЕВ, башҡорт теле уҡытыусыһы, Ейәнсура районы:*** Ата-әсәгә балаһын ниндәй телдә, ҡайһы класта teләй - шунда уҡытырға рөхсәт биргән закон дөрөҫ түгел. Ул мәкерле ниәттән, тәбиғәт ҡанундарын боҙоп эшләнгән. Һәр милләт балаһы мотлаҡ үҙенең туған телендә уҡырға тейеш, сөнки ата-әсәләрҙең балаларҙы нисек уҡытырға икәнен хәл итергә бер ниндәй хоҡуғы юҡ. Беҙ уларҙы тыуҙырһаҡ та, уларға, уларҙың тәҡдиренә, яҙмышына хужа түгел, уларға тәбиғәт хужа. Ата-әсә баланы донъяға килтереүсе бер тәбиғәт ҡоралы ғына. Беҙ бала ниндәй тәбиғи һәләттәр менән тыуа - шуны үҫтерәбеҙ, башҡорт ғаиләһендә тыуҙы икән - уның белем алыу теле лә башҡорт теле булырға тейеш. Шулай булғас, ни өсөн беҙ баланы йә теге, йә был яҡҡа тартҡылайбыҙ, быға ни хоҡуғыбыҙ бар? Баҡсала помидор йәки ҡыяр шытып сыҡһа, уларҙы үҫкәнсе теге йәки был яҡҡа борғосламайбыҙ, ҡыярҙан - помидор, помидорҙан ҡыяр уңышы алырға теләмәйбеҙ бит. Әле ата-әсәләргә мәктәптә тел һайлау хоҡуғы биреп, кешенең милли киләсәген юҡҡа сығарыу сәйәсәте алып барыла. Ата-әсә, үҙенең кимәленән сығып, балаһы өсөн телде үҙе һайлай. Белемле кешеләр балаларын үҙенең телендә уҡыта. Ә беҙҙең ҡайһы бер ата-әсәләргә тел кейем һымаҡ күренә: теләһәм - быныһын кейәм, теләмәһәм - икенсеһен. Ә тәбиғәттән бирелгән тел - ул кейем түгел! Уны алыштырып булмай!

***Илдар ШӘЙӘХМӘТОВ, "Любизар" 1-се башҡорт атлы полкы" хәрби-тарихи клубы етәксеһе:*** Йылҡыларҙан аттар тәрбиәләү өсөн башҡорт атының тыуған көнөн билдәләргә кәрәк. "Аҡбуҙат", "Урал-батыр" эпостарында Аҡбуҙаттың күлдән сыҡҡан миҙгелен билдәләп, ошо ваҡытты Башҡортостанда Башҡорт аты көнө тип иғлан итеүҙе кәрәк тип табам. Шул уҡ хорваттар ҙа апрелдең һуңғы бер көнөн, липициан - хорват аты көнө, тип киң билдәләй. Төркмәндәрҙә лә ахалтекин атының тыуған көнө билдәләнә. Халыҡ-ара йылҡы көнө тигән байрамдар бар. Ғөмүмән, беҙгә донъяла, башҡа халыҡтарҙа йылҡы һәм аттарға бәйле нимәләр бар, шуларҙы өйрәнергә кәрәк, сөнки улар ҡасандыр беҙҙә лә булған, әммә донъяларҙың шартлы үҙгәреше һөҙөмтәһендә үҙебеҙ ҙә үҙгәргәнбеҙ. Асылыбыҙға ҡайтыр өсөн үҙебеҙҙә булғандарҙы ла киренән йыйнарға тейешбеҙ. Венгрҙар шулай эшләй: һәр кем үҙ хужалығынан килтереп, атының һөнәрен күрһәтә - кемдекелер бейей, кемдекелер тыпырлай, кемдекелер артына ултыра һ.б. Милли кейемле ир-аттар ғорурлыҡ менән көтөүсе һөнәрҙәрен күрһәтә, оҙон сыбыртҡылар менән сауҙа итәләр, уларҙы һәр малай-шалай ҡуллана белә. Беҙҙә лә шулай булырына ышанып йәшәйек: кемдер эйәре менән маҡтанырға тейеш: үҙем эшләнем, был сергетышты ҡатыным тегеп бирҙе, йүгән - олатайымдан ҡалған мираҫ; ә был юртаҡты ҡолон сағынан тәрбиәләнек, улым өйрәтте, эйәрҙә ейәнем ултыра...

***Мәүлит ЯМАЛЕТДИН, шағир һәм прозаик:*** Өмөтлө киләсәккә бер генә ышаныс бар. Алдынғы ҡарашлы ғалимдарыбыҙ, зыялыларыбыҙ халыҡҡа юл күрһәтергә тейеш. Миненсә, әҙәбиәт, сәнғәт, ғөмүмән, мәҙәниәт һәр кемдә ниндәйҙер ышаныс тыуҙырырға, өмөтһөҙләккә юл ҡуймаҫҡа тейеш. Ижад ителгән әҫәр кешенең күңелен күтәрһен. Яҙыусы ла, граждан булараҡ та үҙ бурысымды шунда күрәм. Сөнки халыҡ борон-борондан, беҙҙең сәсәнебеҙ бына шулай тине, тип, сәсән һүҙенә ҡарап торған. Һәм, иң мөһиме, иманға ҡайтырға кәрәк. Ә иман - бик ҙур төшөнсә. Кескәй генә дүрт хәрефле һүҙгә эхлаҡ та, әҙәп тә, теләнә тоғролоҡ та, иленә һөйөү ҙә, үҙ-ара мөнәсәбәт тә һыя. Иманлы кеше түрә булһа ла иманын юғалтмаясаҡ, халыҡты ҡайғыртасаҡ, уның өсөн көсөн йәлләмәйәсәк. Ә әлеге мәлдә иҫ киткес тиҙлек менән байыған кешеләрҙең күңелендә иман юҡ. Хаҡ юлды мәҙәниәттең, имандың күтәрелеп сығыуында ғына күрәм мин.

***Ноғман МУСИН, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:*** Хәҙерге ваҡытта, асылда, бер милләтле булған, боронғо йәшәү рәүештәрен, милли йолаларын һаҡлаған милләттәр һәм дәүләттәр үҫеш осоро кисерә. Миҫал өсөн Ҡытай менән Японияны ғына алайыҡ. Бөгөн был дәүләттәр һәр йәһәттән алға сыҡты. Шуға күрә беҙҙең барлыҡ уңышһыҙлыҡтарыбыҙҙың, бөтә бәләләребеҙҙең сәбәбе милли асылыбыҙҙан айырыла, йола-традицияларыбыҙҙы онота барыуыбыҙҙа. Сөнки һәр милләттең йәшәү рәүеше йола-традициялар рәүешендә уға бит Хоҙай һәм тәбиғәт тарафынан һалынған һәм мәңгелеккә нығытылған. Беҙ меңәр-меңәр йылдар буйынса шул йола-традициялар нигеҙендә йәшәп килеп, XX быуатта уларҙан айырылдыҡ та, йәшәүебеҙҙең мәғәнәһен, тормошобоҙҙоң ҡотон юғалта башланыҡ. Милләтте теленән, тамырынан, йолаһынан айырырға тырышыу тотош илдең тамырына балта сабыу менән бер. Әгәр ҙә дәүләт күп милләтле икән, ундағы һәр милләттең үҫешен тәьмин итмәйенсә тороп, дәүләттең берлеген тәьмин итеү мөмкин булмаясаҡ. Үҙенең милли тойғоһо ҡыйырһытылған кеше башҡаларға нисек тыныс, уларҙың ихтыяжын аңлап ҡарай алһын инде? Ошоларҙан сығып шундай һығымта яһарға ла була: беҙҙең илдең иң ҙур бәләһе - унда йәшәүсе халыҡтарҙың милли тамырҙарынан айырылыуында, илебеҙҙең һаман да мандып йәшәп китә алмауы ла ошо сәбәпкә бәйле.

***Зилә РӘХМӘТУЛЛИНА, философия фәндәре кандидаты:*** Милләттең яҙмышы уның менталитетына бәйле. Аҫыл сифаттарыбыҙ күп беҙҙә. Һуғыш ҡупҡанда, экстремаль хәлдәр тыуғанда батырлыҡ ҡалҡып сыға, ҡурҡыу тойғоһо юғала. Шул уҡ ваҡытта беҙҙә тыйнаҡлыҡ сифаты ла бик көслө. Боронғо халыҡ булараҡ, беҙ абсолют категорияларҙан сығып, йыһан киңлегендә фекер йөрөтөп эш итәбеҙ. Шуға күрә тормош ығы-зығыһы, аҡса эшләү беҙгә мәғәнәһеҙ шөғөл кеүек тойола. Бөгөнгө типик башҡортҡа интроверт булыу хас, йәғни күбебеҙ үҙ күңел донъяһында йомолоп йәшәй. Беҙҙә һаман да коллективлыҡ сифаты көслө. Йәғни, бөтәһе лә бер тигеҙ йәшәргә тейеш, тигән фекерҙәбеҙ. Бына ни өсөн уңышҡа өлгәшкән милләттәшебеҙҙе яратып еткермәйбеҙ, үҙебеҙгә тиң ҡан-ҡәрҙәшкә генә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙербеҙ, һине уҙып китә алырлыҡ булһа, ярҙам итеүҙән баш тартабыҙ. Әлбиттә, менталитетты үҙгәртеүе бик ҡыйын, әммә беҙ мотивтарыбыҙҙы үҙгәртә алабыҙ. Шул ваҡытта эш-ҡылыҡтарыбыҙ ҙа үҙенән-үҙе үҙгәрәсәк. Әгәр ҙә, мәҫәлән, еребеҙгә хужа булып ҡараһаҡ, үҙебеҙҙе хужаларса тотасаҡбыҙ ҙа. Халҡыбыҙға ярҙам итәбеҙ тиһәк, телевидение, башҡа матбуғат саралары аша алдынғы, заманса башҡорт образын тыуҙырып, шул образды пропагандаларға кәрәк.

***Юлдаш ЙОСОПОВ, тарихсы:*** Тарих фәндәре докторы Булат Аҙнабаев: "Тик хәрби халыҡтың ғына тарихы була",- тип әйткәйне бер мәл. Ысынлап та, көнө буйы, йылдар буйы, быуат буйы һабан һөрөп, мал көтөп кенә йәшәгән халыҡҡа үҙ тарихын белеүҙең ихтыяжы ла юҡ. Ә хәрби халыҡҡа иһә, яугир рухын һүндермәй һаҡлар өсөн дә үҙ тарихын белеү фарыҙ. Халыҡ - ул сәйәсәт субъекты, ә ниндәйҙер кешеләр төркөмө фәҡәт ашау-эсеү өсөн генә йәшәй икән, ул бары төркөм генә. Алтын Урҙала теге йәки был батырҙың, яугирҙың исеме һәр ваҡыт ырыуының исеме менән ҡуша аталып йөрөтөлгән. Башҡорттарҙы ла ырыу кланы системаһы тарих аренаһына алып килгән. Сөнки һәр бер ырыуҙың башҡорт милләте ҡорона ҡушылғанға тиклем үҙ тарихы булған һәм бар. Ул тарих донъяла йәшәгән бер халыҡтың йә дәүләттең тарихына барып ялғана. Башҡорт этногенезының барлыҡ күркәмлеге лә ошо факторға барып ялғана. Башҡорт ырыуҙарының гаплотөркөмдәрен өйрәнә башлағанда күптәр уның былдай һөҙөмтәләргә алып килеүен көтмәгәйне, йәғни гаплотөркөмдәр беҙҙең милләттә ырыуҙар бүленеше менән тура килә. Был күренеш шул турала һөйләй: беҙ меңәр йылдар һуҙымында ошо ерҙә йәшәп тә, бер-беребеҙ менән буталып бөтмәгәнбеҙ, һәр ырыу үҙенең гаплотөркөмгә бәйле үҙенсәлеген дә һаҡлап ҡала алған.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## Аюрведа медицинаһында нисек итеп ҡартлыҡты артҡа күсерәләр?

- Хәҙерге индустриаль сәнәғәттә кешеләр меңәр йылдар ҡулланған аюрведа медицинаһының принциптары юғалтылған, - ти Көнсығыш медицинаһы буйынса эксперт Савелий Кашницкий. - Ә улар ғүмерҙе оҙонайта. Мәҫәлән, оло йәштәге кешенең иртәһе нисек булырға тейеш? Беренсенән, дөрөҫ итеп уяна белергә кәрәк. Беҙ бит күҙҙәребеҙҙе тырнап асып, шунда уҡ ырғып тороп, мөһим эштәрҙе башҡарырға тотонабыҙ. Был - ҙур хата. Иң мөһиме - организмды сираттағы көнгә шундай итеп әҙерләргә кәрәк, алда торған көсөргәнеш тә, эш тә, төрлө кисерештәр ҙә организмға зыянһыҙ ҡабул ителһен.

Оло кешегә уянғас та пульсын һанарға кәрәк. Бер тапҡыр ғына түгел, өс тапҡыр: ятҡан, ултырған һәм баҫып торған килеш. Күрһәткестәрҙәге айырма минутына 10 тибештән артырға тейеш түгел. Урындан ҡапыл торорға ярамай. Йорт хайуандарына ҡарағыҙ әле, эттәр һәм бесәйҙәр нисек уяна: улар тәүҙә кирелә-һуҙыла, һуңынан яйлап ҡына аяҡтарына баҫа. Һеҙ ҙә тәүҙә кирелегеҙ-һуҙылығыҙ, устарығыҙҙы ышҡығыҙ, бармаҡтарығыҙға массаж эшләгеҙ. Күҙ мускулдары өсөн гимнастика яһағыҙ: күҙҙәрегеҙҙе устарығыҙ менән ҡаплап, өҫкә-аҫҡа, уңға-һулға ҡарағыҙ, быны күнегеүҙе 10-20 тапҡыр ҡабатлағыҙ. Һуңынан устарығыҙ менән шунса тапҡыр уҡ ҡолаҡтарығыҙҙы ышҡығыҙ. Ҡулдарығыҙҙы, аяҡтарығыҙҙы уыуығыҙ һәм төн буйы ойоған ҡанығыҙҙы таратығыҙ. Табан, балтыр, тубыҡ, янбаштарығыҙҙы ышҡығыҙ. Бер нисә тапҡыр балтыр мускулдарына көс төшөрөп йомшартығыҙ. Шунан һуң эсәктәргә гимнастика эшләргә мөмкин. Уң ҡулығыҙ менән сәғәт йөрөшө буйынса эсегеҙҙе 20-30 тапҡыр һыйпағыҙ. Ҡулығыҙҙы йоҙороҡлап, эсегеҙҙә аҫҡа-өҫкә йөрөтөп массаж эшләгеҙ. Өҫкә күтәрелгәндә нығыраҡ баҫығыҙ, ҡабырғаға табан һәм уртаға - еңелсә. Гимнастика ятҡан килеш 3-4 минутты ала.

Карауатҡа ултырығыҙ. Өҫтө тигеҙ булмаған пластик валик алығыҙ һәм уны аяҡ табандары менән иҙәндә тәгәрәтегеҙ. Табанда барлыҡ ағзалар менән бәйле биологик актив нөктәләр урынлашҡан. Валикты тәгәрәтеү - тотош организмды уяулыҡ режимына күсереү ул. Был 1-2 минут ваҡытығыҙҙы алыр.

Һуңынан ваннаға инегеҙ. Ҡул душын ваннаның бер осона һалығыҙ ҙа, уны полиэтилен менән ҡаплағыҙ. Һалҡын, әммә тән өсөн һыуыҡ булмаған һыуҙы ебәрегеҙ. Ул ванна буйлап ағып, шишмә эффектын тыуҙырыр. Ошо шишмә буйлап 108 аҙым алға-артҡа йөрөгөҙ (күп халыҡтарҙа 108 - изге һан - гармонияның тығыҙ тупланыуы сағылышы. Был гармония һеҙҙең тәнегеҙгә үтеп инер). Ошо "прогулкаһан" һуң аяҡтарығыҙҙы мотлаҡ йөн таҫтамал менән ҡороторға һәм ике ҡат йөн ойоҡ кейергә кәрәк. Өйөгөҙҙә ошолай 5-10 минут йөрөгөҙ. Әгәр бынан һуң һалҡын душ ҡабул итергә булһағыҙ, температураның түбәнәйеүе ҡапыл күҙәтелмәһен, яйлап ҡына барһын. Ниндәй температура кәрәкле булыуы критерийы - рәхәтлек тойғоһо, уңайлылыҡ. Душ менән аяҡтар буйлап аҫтан-өҫкә йөрөтөргә мөмкин. Ололарға баштан аша һыуыҡ һыу менән ҡойонорға ярамай, сөнки был ғәмәл баш мейеһе тамырҙарының ҡыҫылыуына килтереүе мөмкин.

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**



## 24 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.45, 2.30, 3.05 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 4.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 3.25 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ангел-хранитель". [16+]
23.30 "Познер". [16+]
0.30 Т/с "Эти глаза напротив". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Ведьма". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Шаповалов". [16+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Историческая среда. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**19.00, 22.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.15 Колесо времени. [12+]**
**0.15 Х/ф "Чартер". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Моя семья". [12+]**
**5.15 Весело живем. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 25 ИЮНЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.45, 2.30, 3.05 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 4.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 3.25 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50, 1.30 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ангел-хранитель". [16+]
23.30 Т/с "Эти глаза напротив". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Ведьма". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Шаповалов". [16+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.15 Республика Live. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Историческая среда. [0+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**17.15 Точка зрения ЛДПР. [16+]**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 С мотором... [12+]**
**20.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 "Честно говоря". [12+]**
**23.15 Күстәнәс. [12+]**
**23.45 Замандаш. [6+]**
**0.00 Т/с "Следствие любви". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Любовь на троих". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 26 ИЮНЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.45, 2.30, 3.05 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 4.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 3.25 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50, 1.30 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ангел-хранитель". [16+]
23.30 Т/с "Эти глаза напротив". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Ведьма". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Шаповалов". [16+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30, 21.00 Историческая среда. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 23.15 Бала-саға. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Бай баҡса. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**0.00 Т/с "Следствие любви". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Вот так случилось..." [12+]**
**5.15 Весело живем. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 27 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.45, 2.30, 3.05 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 4.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 3.25 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50, 1.30 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ангел-хранитель". [16+]
23.30 Т/с "Эти глаза напротив". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Ведьма". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Шаповалов". [16+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.15 Д/ф "Наши дети". [6+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Историческая среда. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 С мотором... [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**23.15 Концерт этно-группы "Аргымак". [12+]**
**1.15 Т/с "Следствие любви". [16+]**
**2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**3.45 Спектакль "Озорная молодость". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 28 ИЮНЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.45, 3.30 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 4.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.50 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Три аккорда". [16+]
23.30 Х/ф Премьера. "Чего хочет Джульетта". [16+]
1.20 Х/ф "Рокки". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Х/ф "Подсадная утка". [12+]
0.55 Х/ф "Лжесвидетельница". [12+]
4.10 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00, 16.00, 19.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм.**
**10.30 V Всемирный курултай башкир. Пленарное заседание. 1-я часть.**
**13.00, 23.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 "Йома". [0+]**
**14.00 Үткән гүмер. [12+]**
**14.30 Историческая среда. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Алтын тирмә. [0+]**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 "Кумысный путь". [0+]**
**16.45 V Всемирный курултай башкир. Пленарное заседание. 2-я часть. Праздничный концерт.**
**19.00 "Страна поющих цветов". [0+]**
**19.15 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 "Самрау-шоу". [12+]**
**23.30 Ҡурай баттл. [12+]**
**1.45 Т/с "Следствие любви". [16+]**
**3.15 Спектакль "Белый пароход". [12+]**
**5.15 Бай баҡса. [12+]**
**5.45 Д/ф "Между небом и Землей". [12+]**

## 29 ИЮНЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.20, 6.10 Х/ф "На Дерибасовской хорошая погода, или На Брайтон-Бич опять идут дожди". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
7.10 Х/ф "Гусарская баллада". [12+]
9.00 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.10 Д/ф Премьера. "Стас Михайлов. Все слезы женщин". [12+]
11.10 "Честное слово" с Юрием Николаевым. [12+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Д/ф "Теория заговора". [16+]
13.10 К юбилею Александра Панкратова-Черного. [16+]
16.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.50 "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
19.30, 21.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
23.00 Премьера. Музыкальная премия "Жара". [12+]
1.15 Х/ф "Рокки-2". [16+]
3.05 "Модный приговор". [6+]
3.50 "Мужское / Женское". [16+]
4.35 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.15 "По секрету всему свету". [6+]
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного". [12+]
10.10 Сто к одному. [12+]
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Выход в люди". [12+]
12.45 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
13.50 Х/ф "Приговор идеальной пары". [12+]
17.55 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Любовь не по правилам". [12+]
23.00 Х/ф "История одного назначения". [12+]
1.25 Х/ф "Некрасивая Любовь". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**8.45 Д/ф "Вся жизнь - мечта". [12+]**
**9.30 "Физра". [6+]**
**9.45 "Перекличка". [6+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 МузКәрәҙ. [0+]**
**10.30 "Городок АЮЯ". [0+]**
**10.45 Күстәнәс. [6+]**
**11.15 Хазина о Хазине. [0+]**
**11.45 Дневник Международных детских игр. [6+]**
**12.00 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия". VI этап.**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт Zainetdin. [12+]**
**18.15 "Театры малых городов". [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байык-2019". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Следопыт.**
**22.30, 3.45 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "БГФ: Роман на 80 лет". [12+]**
**2.15 Т/с "Следствие любви". [16+]**
**4.30 Спектакль "Спрячь любовника в шкаф". [12+]**
**5.45 Весело живем. [12+]**
**6.00 Д/ф "Портрет героя". [12+]**

## 30 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.35, 6.10 Х/ф "Евдокия". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 "Жизнь других". [12+]
11.10 "Видели видео?" [6+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Премьера. "Живая жизнь". [12+]
15.15 "Легенды "Ретро FM". [12+]
17.50 Премьера. "Семейные тайны" с Тимуром Еремеевым". [16+]
19.25 "Лучше всех!" [0+]
21.00 "Толстой. Воскресенье".
22.30 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр. [16+]
23.45 Т/с Премьера. "Ярмарка тщеславия". [16+]
1.35 На самом деле. [16+]
2.25 "Модный приговор". [6+]
3.10 "Мужское / Женское". [16+]
3.55 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

4.25 Т/с "Сваты". [12+]
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна. [12+]
8.00 Утренняя почта. [12+]
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым". [12+]
10.10 Сто к одному. [12+]
11.00 Вести.
11.20 Смеяться разрешается. [12+]
12.40 Т/с "Чужое счастье". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.30 "Действующие лица с Наилей Аскер-заде". [12+]
1.25 Х/ф "Приговор идеальной пары". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 "Песня года". [12+]**
**10.00 "Созвездие талантов". [0+]**
**11.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.45 Гора новостей. [6+]**
**12.00 Бай баҡса. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [0+]**
**15.30 "БГФ: Роман на 80 лет". [12+]**
**18.30 Деловой Башкортостан. [12+]**
**18.45 Лидеры региона. [12+]**
**19.15 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.00 Республика Live. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 "Байык-2019". [12+]**
**0.15 Т/с "Следствие любви". [16+]**
**1.45 Спектакль "Эти свободные бабочки". [12+]**
**4.15 Астана - Москва - Уфа. [12+]**


## НАВСТРЕЧУ ВЫБОРАМ

В соответствии с частью 6 статьи 63 Кодекса Республики Башкортостан о выборах Муниципальное бюджетное учреждение "Издательский дом "Уфа" городского округа город Уфа Республики Башкортостан сообщает о готовности предоставить на платной основе **печатную площадь в газетах "Вечерняя Уфа", "Уфимские ведомости", "Уфимская неделя", "Киске Өфө" для проведения предвыборной агитации на выборах Главы Республики Башкортостан, на дополнительных выборах депутатов Государственного Собрания-Курултая Республики Башкортостан** по Солнечному одномандатному избирательному округу №9, Комсомольскому одномандатному избирательному округу №16, на дополнительных выборах депутатов Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан 8 сентября 2019 года.

**Стоимость 1 кв. см - 60 рублей, в т.ч. 20% НДС. Контактные телефоны: (347) 273-35-92, 272-89-09, e-mail vureklama2007@mail.ru**

Реклама


## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Июнь (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 24 (21) дүшәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 25 (22) шишәмбе | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 26 (23) шаршамбы | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 27 (24) кесе йома | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 28 (25) йома | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:24 |
| 29 (26) шәмбе | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 30 (27) йәкшәмбе | 3:15 | 4:45 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БӨТӨН ДОНЪЯ БАШҠОРТТАРЫ ҠОРОЛТАЙЫ БАШҠАРМА КОМИТЕТЫ РӘЙЕСТӘРЕ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**24-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тирәс. Алпауыт. Нахур. Агата. Ҡәлғә. Лексика. Ыумас. Тирмә. Ай. Әсе. Скаут. Тау. Олпат. Лаос. Таныш. Окапи. Имза. Ниловна. Зудов. Ғәлимов. Тайвань.

**Вертикаль буйынса:** Хайсаров. Арыҫлан. Мортазин. Азат. Итәғәт. Алсаҡ. Тәпән. Токио. Вәлиев. Хисмәтуллин. Манго. Сатыр. Ҡат. Остаз. Иҙел. Мата. Әсә. Үтәшев.

ИҒТИБАР!

# ТОРАТАУҒА КИЛЕГЕҘ!

• I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы 1995 йылдың 1-2 июнендә Өфө ҡалаһында үтә. Башҡортостандың һәр ҡала һәм районынан, Рәсәйҙең 10 республикаһы һәм 18 өлкәһенән, 7-гә яҡын сит ил дәүләтенән, шулай уҡ Венгрия, Германия, Ҡытай, Перу, Польша, АҠШ, Төркиә, Финляндия, Швейцария һәм Көньяҡ Африка Республикаһынан бөтәһе 806 вәкил ҡатнаша. Ҡоролтай барышында 10 секция эшләй. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты һайлана. Башҡарма комитеттың эш урыны итеп Өфө ҡалаһы билдәләнә.

• II Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы 2002 йылдың июнендә Өфө ҡалаһында үтә. Башҡортостан Республикаһынан, Рәсәй Федерацияһының 33 төбәгенән, 19 сит илдән, шул иҫәптән Израиль, Италия, Канада, АҠШ, Төркиә һәм Япониянан 800-ҙән ашыу вәкил ҡатнаша. 12 секция эшләй. Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы дәүләт органдарына милли сәйәсәт, милләт-ара мөнәсәбәт, милли мәҙәниәт һәм республика халыҡтары телдәрен артабан камиллаштырыу буйынса тәҡдимдәр индерелә.

• III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы 2010 йылдың 10-11 июнендә Өфө ҡалаһында үтә. Унда Башҡортостан Республикаһынан, Рәсәй Федерацияһының 33 төбәгенән, 19 сит илдән, шул иҫәптән АҠШ, Бразилия, Германия, Израиль, Италия, Канада, Португалия, Төркиә, Япония, Балтика һәм БДБ илдәренән 800-ҙән ашыу вәкил ҡатнаша.

• IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы 2015 йылдың ноябрендә Өфөлә уҙғарыла. Уның эшендә 400 делегат ҡатнаша. Сара барышында 7 секция эшләй.

• 28-29 июндә Башҡортостан V Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаттарын ҡабул итә. Йыйын Өфөлә һәм Ишембай районында, бөтөн донъяға билдәле шиханыбыҙ Торатау янында үтәсәк. Рәсәй төбәктәренән - 157, сит илдәрҙән 58 делегат саҡырылды. Башҡортостандың район һәм ҡалаларынан 295 кеше делегат итеп һайланды. 28 июндә V Ҡоролтай сиктәрендә Өфөләге "Ватан" этнопаркында сағыу "Самрау" шоу-фестивале үткәрелә. Йыйын 29 июндә изге тауыбыҙ Торатауҙа тамамлана. Рух байрамында теләгән һәр кем ҡатнаша ала, сикләү юҡ.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# ИЮНЬ АЙЫНЫҢ ШИФАЛЫ ҮЛӘНДӘРЕ

### Ҡуян үләне

(кислица обыкновенная)



Ҡуян үләнен май-июнь айҙарында йыялар: япраҡтарын күләгәлә, асыҡ һауала киптерәләр. Киптерелгән япраҡтарҙы ҡағыҙ йәки сепрәк муҡсайҙарҙа бер йылға тиклем генә һаҡларға. Ҡайһы бер осраҡтарҙа үләндең тамырын да ҡулланалар, уны көҙөн ҡаҙып алып, өлөштәргә бүлеп киптерәләр.

Ҡуян үләненең япрағы аскорбин кислотаһы, каротин, В төркөмө витаминдарына, рутин, дуплау матдәләре, гликозидтар, ҡуҙғалаҡ, гәрәбә, алма һәм башҡа органик кислоталарға һәм уларҙың тоҙона бай. Был үҫемлектең ауыртыуҙы баҫа, ҡан ағыуын туҡтата, яраларҙы бөтәштерә, бабасыр (глист) төшөрә торған, бәүел һәм үт сығара торған тәьҫире бар. Халыҡ дауаһында ҡуян үләнен ангина, температура күтәрелгәндә, биҙгәк менән ауырығанда, ҡан баҫымы күтәрелгәндә, атеросклероз, йөрәк неврозы, ауыҙ тиресәһе шешеүе (стоматит) һәм ауыҙҙан насар еҫ килгәндә, зәңге, ашағы килмәгәндә, ашҡаҙан әселеге юғары булғанда, үҙәк көйгәндә, ҡоҫоуҙан яфаланғанда, гастрит, ашҡаҙан яман шеше, гепатит һәм бауырҙың башҡа сирҙәренән, нефрит (бөйөр шешеүе), бәүел һәм үт ҡыуығы ауырыуҙарынан, матдәләр алмашыныуы боҙолғанда, мышаяҡ һәм терегөмөш менән ағыуланғанда, эренләгән яраларҙы һәм фурункулдарҙы дауалауҙа ҡулланалар.

**Ағыуланыуҙан төнәтмә.** 1 ҡалаҡ йәш ҡуян үләнен термосҡа һалып, өҫтөнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөп алырға. Һәр ике сәғәт һайын 50 мл күләмендә ҙур булмаған йотомдар менән эсергә.

**Нефрит.** 1 балғалаҡ киптерелгән ҡуян үләне япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2-3 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр берәр ҡалаҡ эсергә, дауаланыуҙы 4-5 көн дауам итергә. Был төнәтмә шулай уҡ гастрит, ашҡаҙан әселеге юғары булғанда, күрем мәлендәге һыҙланыуҙан ярҙам итә. Энурез булғанда көнөнә 6 тапҡыр берәр ҡалаҡ эсергә.

**Биҙгәк, юғары температуралы ангина.** 20 г киптерелгән ҡуян үләне япрағына 1 стакан ҡайнар һөт ҡойоп, яй ғына утта 3-4 минут ҡайнатырға. Шунан ҡайнатманы термосҡа ҡойоп, ике сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Ҡайнатманы өс өлөшкә бүлеп ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә өс тапҡыр эсергә.

**Гельминтоз (паразит гельминттар тыуҙырған ауырыуҙар).** Йәш ҡуян үләне япраҡтарын йыуып, ҡайнар һыу менән сайҡап, ит турағыс йәки блендер ярҙамында ваҡлап, һутын һығып алығыҙ. Һутҡа 1:1 нисбәтендә һыу өҫтәп ҡойоп, ҡайнар хәлгә еткерергә. Көнөнә өс тапҡыр 1 ҡалаҡ эсергә, артынан бер балғалаҡ бал ашарға. Һутты бер аҙна эскәндән һуң, бер ай ял итергә һәм яңынан бер аҙна дауаланырға. Был рәүешле әҙерләнгән һутты ашҡаҙан яман шешен дауалау өсөн дә файҙаланырға була: 5 тамсы һутты үлән сәйенә тамыҙып көнөнә 4-5 тапҡыр эсергә, йә булмаһа ашаған мәлдә 5 мл һутты көнөнә өс тапҡыр эсергә була. Был рәүешле кәмендә 2 ай дауаланыу тәҡдим ителә.

**Бауыр ауырыуҙары.** 100 г киптерелгән ҡуян үләне япрағына 40 процентлыҡ 100 мл спирт ҡойоп, 5 тәүлеккә ҡараңғы урынға ҡуйырға. Әҙер настойканы һөҙөп таҙартырға һәм ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә өс тапҡыр бер ҡалаҡ эсергә.

***Иҫкәртеү:*** *ҡан шыйыҡ булғанда, подагра, артрит, тиҙ генә көҙән йыйырып барғанда, бөйөр һәм бауырҙың ҡаты ауырыуҙары, бөйөргә таш ултырғанда, шәхсән килешмәгән осраҡта ҡуян үләнен ҡулланыу тыйыла. Дауалана башларҙан алда табип менән кәңәшләшеү мөһим, ҡуян үләнен һәм унан эшләнгән дарыуҙарҙы артыҡ күп ҡулланыу бәүел сығарыу юлдары һәм бөйөрҙәргә насар тәьҫир итеүе ихтимал.*

ӘЙТӘГҮР!

# ХАЛЫҠ ЫШАНЫСЫ - ИҢ МӨҺИМЕ

**I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы тураһындағы хәтирәләрегеҙ ниндәй?**

***Хәләф ИШМОРАТОВ, Төрки донъяһы парламентарийҙары халыҡ-ара фондының Рәсәй Федерацияһындағы вәкиле, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы:*** I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайын ойоштороу ул беҙҙең милләт тарихында бер прогресс булғандыр. Шундай оло сараны тәүге тапҡыр үткәрәбеҙ, бер ниндәй ҙә тәжрибә юҡ, уны хаталар, һынап ҡарауҙар юлы менән генә тоҫмаллайбыҙ. Шул уҡ ваҡытта халыҡтың рухи күтәренкелеге, өмөтлө булыуы, ошо сараға ҙур ышаныс менән ҡарауы көс бирә. Киң массалар, ойошмалар, ауыл-райондар берҙәм булып "ҡоролтай" тип яндыҡ. Ойоштороу комитетында Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов - үҙе шәхсән, Бакиев, Сәғитов, Ғәбитов, Әйүпов кеүек ир-уҙамандар бөтөн эштәрҙең башында булды. Мәҙәниәт министры булараҡ, мин үҙем сит өлкәләрҙә һәм илдәрҙә йәшәүсе милләттәштәребеҙ менән бәйләнеш булдырыуҙы тәьмин иттем.

Беренсе ҡоролтайҙың маҡсаты - башҡорт милләтен ойоштороу ине, һәм ул шул маҡсатына өлгәште лә. Беҙ ул саҡта ысынлап та берләшкән ҙур көс була алдыҡ. Хатта ҡайһы бер милләттәр араһында "Беҙҙе хәҙер республиканан сығарып ебрмәҫтәрме икән?" тигән борсолоу ҙа булды һәм беҙгә уларҙы тынысландырырға ла тура килде.

Ҡоролтайға әҙерләнеү эштәре бик киң масштабта алып барылды. Мәҫәлән, ҡунаҡтарҙы саҡырыу, урынлаштырыу, ҡунаҡ итеү өсөн республика бюджетынан бер ниндәй ҙә сығымдар талап ителмәне, уларҙы предприятиелар үҙ ҡарамағына алып, эште еңеләйтте. Эшлекле һөйләшеүҙәрҙән һуң әлеге ҡунаҡтарға райондарҙа үткәрелгән һабантуйҙарға йөрөп килеү форсаты ла бирелде. Йәғни, улар кабинеттарҙа һәм баш ҡалала ғына йөрөмәне, ә ябай халыҡтың йәшәйеше менән дә танышып ҡайтты.

Ҡоролтай алдынан Сахалинда көслө ер тетрәү булып, беҙ аҙыраҡ баҙап та ҡалғайныҡ. Шунда тиҙ арала бәлә күреүселәргә республикабыҙ тарафынан матди ярҙам күрһәттек һәм сараны үткәреүгә фатиха алдыҡ.

Хәтеремдә, ҡоролтай башлана торған көндө беҙ әҙерлек эштәренә нөктә ҡуйып, таңғы дүрттә генә таралыштыҡ һәм өҫ-башты алыштырҙыҡ та, яңынан йыйылдыҡ. Арыу-талыу тойолманы ла, сөнки идеяларыбыҙ, рухи тойғоларыбыҙ менән көслө һәм туҡ инек. Бынан егерме биш йыл элекке үҫеш дәүерен бөгөнгө менән сағыштырыу өсөн мин шул ҡоролтайҙа яһаған сығышымды ғына ла миҫалға килтерә алам. Республика буйынса асылған мәҙәниәт усаҡтары, уҡыу йорттары, милли һәм мәҙәни белем биреү учреждениелары һәм башҡа ҡаҙаныштар тураһында оло ғорурлыҡ менән һөйләгәйнек. Үкенескә күрә, бөгөн уларҙың күптәре ябылған йәки ябылыу өҫтөндә.

Ҡоролтай үтеп киткәс тә, унда ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы тормошҡа ашырыу дәүләт кимәлендә алып барылды. Ҡоролтай рәйесе итеп академик Нияз Абдулхай улы Мәжитов һайланғайны һәм ул аҙна һайын министрҙар менән берлектә Хөкүмәт ултырыштарында ҡатнашты. Халыҡтан килгән һорауҙарҙы ул шунда уҡ хәл итә һәм яуап ала ине. Бер ниндәй ҙә хат өҫтөнә хат яҙыу йәки етәксенән етәксегә йөрөтөү булманы. Бөгөнгө ҡоролтай тап бына ошо мәсьәләләрҙе дәүләт кимәлендә хәл итә алыу юлдарын ҡайтарһын ине. Ул үҙенең халыҡ менән дәүләт етәкселеге араһындағы бәйләп, тоташтырып, асыҡлыҡтар индереп һәм ярҙам итеп тороусы структура икәнен онотмаһын. Һәм тағы ла бер мөһим нәмә - халыҡтың ышанысы. Халыҡтың ышанысы булмаһа, ҡоролтай кеүек ойошманың бәҫе лә булмай. Шунлыҡтан, бөгөнгө ҡоролтайҙың иң төп бурысы, моғайын, халыҡ ышанысын яулауҙыр.

ЗАУЫҠ

# БЕР УЙ МЕНӘН ЯНАЙЫҠ, ЙӘНГӘ УСАҠ ЯҒАЙЫҠ!

I

Баш ҡалала бөгөн байрам -
Күккә ашҡан балҡыштары.
Баш ҡорона йыйылалар
Бөтөн донъя башҡорттары.

Ете диңгеҙ, уттар кисеп,
Үтеп Йыһан баҫҡыстары.
Атайсалға ағылалар
Бөтөн донъя башҡорттары.

Күҙҙәрендә уйсанлыҡ та,
Балҡып тора шатлыҡтары.
Уралтауға ҡайта бөгөн
Бөтөн донъя башҡорттары.

Иләүенә тупланғандай
Әйтерһең дә, бал ҡорттары.
Килмәй улар, ҡайта бөгөн
Бөтөн донъя башҡорттары.

Әйтерһең дә, умарталар
Өфөләрҙең таш йорттары,
Кәрәҙенә бал килтерә
Бөтөн донъя башҡорттары.

Төрлө илдән, төрлө телдә
Булһалар ҙа паспорттары,
Бер маҡсатта - Арғымаҡта
Бөтөн донъя башҡорттары.

Йөҙҙәрендә иман нуры,
Бөркөп тора сафлыҡтары;
Асылына - илгә ҡайта
Бөтөн донъя башҡорттары.

Тыңлағыҙ һеҙ,
Баш йортоғоҙ
Һеҙҙе нисек алҡышлауын:
Һаумыһығыҙ,
һаумыһығыҙ,
Бөтөн донъя башҡорттары.

II

Өймәкләшеп иләүгә,
Төйнәкләшеп биләүгә;
Ил барлығын онотмай,
Тел тамырын ҡоротмай, -
Йыйҙыҡ бөгөн ҡоролтай,
Ҡорҙоҡ бөгөн ҡоролтай.

Ай, ҡоролтай, ҡоролтай,
Вай, ҡоролтай, ҡоролтай;
Халҡым рухы ҡоростай,
Ҡурай мәңге сыңлаған,
Уралтауы тыңлаған,
Халҡым рухы һынмаған.

Мең йыллыҡтар үтһә лә,
Һыу-боҙлоҡтар өтһә лә,
Империя сүкһә лә;
Йәшәй ерҙә башҡорттар
Урал тигән таш йортта,
Күп ырыуға баш ҡорттар.
Башҡорт тигән саф иләү,
Ҡырҙым тигән Тәфтиләү, -
Бөгөнгөһө - Мөфтиләү...
Хәҙер быуат башында,
Мең йыллыҡтар ҡашында
Ҡурай уйнай аҫылдар.

Ай, ҡоролтай, ҡоролтай,
Вай, ҡоролтай, ҡоролтай;
Уҫҡа йыйған йоҙроҡтай,
Терәһыулы турһыҡтай,
Йомарланған ҡороттай,
Ергә һалған орлоҡтай.

Ай, ҡоролтай, ҡоролтай,
Вай, ҡоролтай, ҡоролтай;
Геүләп торған солоҡтай,
Киләсәккә юллыҡта
Уйнап йөрөй ҡолон, тай.

III

Бер уй менән янайыҡ,
Бер уй менән ҡалайыҡ,
Илгә ҡолаҡ һалайыҡ.
Нисек йәшәй халайыҡ?
Яуаптарын табайыҡ,
Йәнгә усаҡ яғайыҡ.

Ил хаҡында һүҙебеҙ,
Илдә ике күҙебеҙ,
Илдә яҡты йөҙөбөҙ,
Илдә ожмах, гүребеҙ,
Илдән киткән күбебеҙ,
Ил бит йәшәй, күрегеҙ!

Илдән сығып киткәндәр,
Ситте төйәк иткәндәр,
Мөстән атын еккәндәр,
Ситтә сәскән, иккәндәр, -
Илгә тула бүтәндәр,
Тула әкәм-төкәмдәр.

Ҡайһығыҙ һуң, ҡай ерҙә?
Кемдер байып серергә,
Олаҡҡан бит Себергә;
Кемдер йөрөй сит ерҙә
Ҡаҡланырға, кибергә,
Инер өсөн ҡәбергә.

Ҡайтығыҙ һеҙ, әйләнеп,
Илгә яҙмыш бәйләгеҙ,
Терәһыуҙы тәмләгеҙ;
Ҡайтып төшһә һәммәгеҙ,
Башҡортостан ҡәғбәбеҙ
Гөл-баҡсаға әйләнер,
Тупланайыҡ, әйҙәгеҙ,
Ҡайтығыҙ тик әйләнеп!

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҺЫНАЛМАҒАН ФӘРЕШТӘНӘН...

## һыналған шайтан артыҡ

Көслө алдында эйелмә, ҡыйынлыҡ алдында бөгөлмә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Туҡһан туғыҙ осраҡта ҡыҙ-ҡатындар үҙҙәрен ахмаҡтарса тота, әммә йөҙөнсө осраҡта ул ирҙәрҙән дә хәйләкәрерәк булып сыға.

**(Агата Кристи).**

Хәҡиҡәт - тормошта икмәк кеүек үк кәрәкле продукт.

**(Карл Берне).**

Илай белмәгән йәш кеше - ҡырағай, йылмая белмәгән өлкән кеше - бахыр.

**(Сантаяна).**

Айһыҙ төндә ҡыҙ күҙләмәйҙәр, болғансыҡ һыуҙа балыҡ эҙләмәйҙәр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше Уҡытыусы эргәһенә килә һәм шулай тип зарлана:**

**- Мин бөткән кеше. Минең тормошом ҡайғыларҙан һәм ярлылыҡтан ғына тора. Эшләгән эштәрем миңә шатлыҡ та, байлыҡ та килтермәй. Мин уңышһыҙ кеше. Атай-әсәйем миңә белем бирмәне, ярҙам да итмәне, шуға ла мин наҙан һәм ахмаҡмын, шуға ла мин бер-бер артлы хаталар эшләйем...**

**Уҡытыусы был кешенең үҙ-үҙен әрләгәнен тыңлап ултыра ла, шулай ти:**

**- Эйе, ысынлап та һин өмөтһөҙ кеше...**

**- Ни өсөн? - тип аптырай кеше. Ул Уҡытыусынан йәлләү һәм уны йыуатыу һүҙҙәре ишетермен тип уйлаған була.**

**- Сөнки кеше үҙен ниндәй тип иҫәпләһә, ысынлап та шундайға әйләнә, - тип яуаплай Уҡытыусы. - Мин һине өмөтһөҙһөң тинем, һәм был - хаҡиҡәт.**

**- Миңә ни эшләргә һуң? - тип әрнеп һорай кеше.**

**- Бөтөн ғүмерең буйы һин үҙеңде көсһөҙ һәм бер нигә лә эшкинмәгән тип иҫәпләнең. Хәҙер инде һин быны киреһен эшлә. Быға тиклем үҙеңде эшкинмәгәнмен тип ныҡыһаң, хәҙер инде, мин шәпмен, эшкингәнмен, тип үҙ-үҙеңде ышандыр. Шунан һуң был ике фекерҙе лә ситкә ташла. Сөнки һин эшкинмәгән дә түгел, шул уҡ ваҡытта бөйөклөккә лә дәғүә итә алмайһың. Һин ҡайһы саҡта дөрөҫ эшләй, ҡайһы саҡта яңылыша торған ҡәҙимге кеше. Хәҙер һин яралы кешегә оҡшаш. Көсһөҙлөк энәһе һине ауыртыныуға дусар итә, ул ауыртыныуҙы көслөлөк энәһе менән баҫырға тырыш. Ул саҡта балаға оҡшап ҡаласаҡһың: балалар бит булдыра аламы, юҡмы икәнлеккә ҡарап тормай, бар донъяны үҙенеке итә лә ҡуя..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 21 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 498